ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискэ Өфө

11-17 июль (майай) 2025

№27 (1171)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Мәскәүгә барып...**

аҡсаһын мутлашыусыларға биргән



2-3

**Баланы кем итеп түгел,**

ниндәй кеше итеп тәрбиәләү мөһим



7

**Элекке мөхәббәтте ҡайтарыу кәрәкме?**



10

**Баймаҡ "пирамида"һы**



12

*Асыулы, ҡараңғы йөҙлө бер әҙәм йәмәғәт транспортында китеп бара һәм уйлай: "Тормошта бер йүнле нәмә юҡ, барыһы ла эс бошорғос. Етәксем - яуыздың яуызы, ҡатыным - мыжыҡ, балалар тәртипһеҙ..." Ә яурынында ултырған фәрештә блокнотына уның һүҙҙәрен сыйғыслай:"...барыһы ла эс бошорғос. Ҡатыным - мыжыҡ, балалар тәртипһеҙ, етәксем - яуыздың яуызы... Һуң был һүҙҙәрен ул кисә лә, унан алда ла яҙҙырғайны бит... Ниңә кәрәк икән уға былар? Ярай инде, үҙе шулай теләгәс, үтәргә тура килә..."*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Башҡортостанда ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтарын сығарыуҙың тирә-яҡ мөхиткә ҙур зыян килтереүе буйынса бик күп һорауҙар килеп тыуа. Һуңғы йылдарҙа республиканың Урал аръяғы райондарында был мәсьәлә бермә-бер киҫкенләште. Проблеманы хәл итеү өсөн нимәләр эшләнә һуң?

***Нияз ФАЗЫЛОВ, Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры:*** Билдәле булыуынса, Башҡортостанда файҙалы ҡаҙылмаларҙы сығарыу тиҫтә йылдар буйы тейешле контролһеҙ алып барылды. Һуңғы 6 йыл эсендә хәл үҙгәрә башланы - ер аҫты байлыҡтары һәм ресурстары менән файҙаланыу законлар нигеҙендә тәртипкә килтерелә. Был маҡсатта 2021 йылда Радий Хәбиров инициативаһы менән составына федераль, республика, муниципаль власть, Роснедра, контроль һәм йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ингән ведомство-ара комиссия төҙөлдө. Был төрлө структураларҙың көсөн берләштерергә мөмкинлек бирҙе. Комиссия ултырыштарында лицензия шарттарын үтәү, алтын табыу лицензияһына мораторий, карьерҙарҙы рекультивациялау, проекттарҙы тикшереү, һалымдарҙы анализлау мәсьәләләре ҡарала. Мәҫәлән, был комиссия ағзалары Учалы районында алтын сығарыу менән шөғөлләнеүселәрҙең проекттарын анализланы, ҡаҙылма байлыҡтарҙы сығарыуҙан килгән һалымды баһаланы.

Законһыҙ эш алып барыу осраҡтарына айырыуса иғтибар бүленә. Атап әйткәндә, Урал аръяғында ер аҫты байлыҡтарын вәхшиҙәрсә эшкәрткән алтын табыусыларға ҡарата енәйәт эштәре ҡуҙғатылды, лицензиялары тартып алынды. Суд ҡарары нигеҙендә улар тәбиғәткә килтерелгән зыянды ҡапларға тейеш.

Ғөмүмән, Башҡортостанда киң таралған файҙалы ҡаҙылмаларҙы законһыҙ сығарыуға ҡаршы көрәш әүҙемләште. Был маҡсатта уларҙың әйләнеше һәм һатыу системаһы цифрлы иҫәпкә алынды. Һөҙөмтәлә ҡаҙнаға ингән һалым килемдәре күпкә артты. Алдағы йылдарҙа ла комиссия хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү, оператив саралар күреү, лицензия шарттарын тикшереү буйынса эшен дауам итәсәк. Лицензия биреү мәсьәләләрендә республика Хөкүмәте менән килешеү төҙөү һәм Урал аръяғы майҙанын геологик өйрәнеү ваҡытын 2032 йылдың IV кварталына тиклем оҙайтыу тәҡдиме менән Роснедраға мөрәжәғәт итергә ниәтләйбеҙ. Шул рәүешле республика тәбиғи ресурстар менән идара итеүҙең асыҡлығын һәм һөҙөмтәлелеген тәьмин итәсәк.

ҒАИЛӘ ҠОРО

# БЕҘҘЕҢ ӨСӨН ТӨП ӨЛГӨ...

## шәжәрәбеҙҙәге атай-олатайҙар

**Ғәлимовтарҙың ғаиләһе тураһында Дәүләкән яҡтарында яҡшы беләләр. Сөнки тап ошо төбәктең данын яҡлап, былтыр Ғәлимовтар "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" республика асыҡ конкурсында "Күп балалы башҡорт ғаиләһе" номинацияһында еңеүсе булды. Тырыш, уңған ғаилә "Всей семьей" Рәсәй проектында ла уңышлы сығыш яһаны. Марсель Айрат улы - утты-һыуҙы кискән ир-азаматтарҙың береһе. Чечняла хеҙмәт итә, орден менән бүләкләнә. Бөгөнгө көндә ул Дәүләкән ҡалаһында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ә. Хәкимов музейы мөдире булып эшләй. Щулай уҡ ул милли көрәш буйынса уҡытыусы-тренер, уның тәрбиәләнеүселәре республика, Рәсәй кимәлендә еңеүҙәр яулай. Ҡатыны Рәйсә Илшат ҡыҙы менән бына тигән ул һәм ҡыҙҙар тәрбиәләйҙәр. Берҙәм ғаилә төрлө йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша, ирекмәндәр ойошмаларына ҙур ярҙам күрһәтәләр. Беҙ Марсель Айрат улына һәм Рәйсә Илшат ҡыҙына бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).




12+

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

БАШ ҠАЛАМ

# ШАҠШАЛА ЛА...

## уттар ҡабына

**Республикабыҙ матур беҙҙең. Урынлашҡан урыны, тәбиғәте, халҡы менән матур һәм күркәм. Шулай уҡ һуңғы ваҡытта республикабыҙҙың илебеҙҙең башҡа төбәктәре һәм башҡа илдәр менән тығыҙ бәйләнеш булдырыуын күреү ҙә ҡыуаныслы.**

Күптән түгел баш ҡалабыҙҙа Минск көндәре уҙҙы. Был сараның һөҙөмтәһе булып төрлө өлкәләге хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүҙәр төҙөлдө. Тимәк, Өфө, Башҡортостан тауарҙарын Минск ҡалаһында ла һатып алып буласаҡ, ә был үҙ сиратында, урындағы эшҡыуарлыҡҡа үҙ ҡеүәтен арттырыу, яңы юҫыҡҡа сығыуға этәргес көс була. Ә эшҡыуарлыҡ, бизнес үҫешкән һайын төбәк ҡаҙнаһына һалым да күберәк инә, яңы эш урындары ла барлыҡҡа килә.

Ҡулланылышҡа Рәсәй банкыларының береһе тарафынан илдең иң күп йөшәгән милли төбәктәренең фольклор мотивтары менән сығарылған яңы карталары араһында Башҡортостандың булыуын ҙур ғорурлыҡ менән уҡыным. "Ысын башҡорт орнаменты декоратив элемент ҡына түгел, ә визуаль код булып тора. Үҙ эшемдә мин башҡорт биҙәгенә хас геометрик һәм үҫемлек мотивтарын берләштерҙем, композицияның нигеҙендә - малсылыҡ, үләндәр һәм ундырышлылыҡ символы булған ҡусҡар биҙәге", - тип белдерҙе карта өсөн орнамент эшләгән рәссам Нелли Аҡсурина. Шәп тә инде, беҙҙең милли орнаментлы карталарҙың бөтә ил, хатта донъя буйлап таралыуы.

Баш ҡалала йәшәүсе булараҡ, Өфө тураһында ла бер күлимә һүҙемдә яҙып үтәйем. Совет майҙаны бик тә үҙгәрҙе һуңғы йылдарҙа. Әйтергә кәрәк, үҙгәрештәр тик яҡшыға булды. Миллионлы ҡаланың төп туристик үҙәге булған был яҡтар матурайып, унайлы булып ҡалды. Ләкин ни өсөн майҙанда, шул иҫәптән фонтан урынында ла, плиткаларҙы сисә башланылар икән ул? Бер ҡайҙа ла төҙәкләндереү тураһында мәғлүмәт булманы буғай. Ярай, нисек булһа ла майҙан тағы ла яҡшыраҡ булыр, тип уйлайым.

Беҙ йыш ҡына Спорт Һарайы алдында үткән ауыл хужалығы йәрминкәһенә йөрөйбөҙ. Оло йәштә булыу сәбәпле, йәмәғәт транспортында барабыҙ һәм ҡайтабыҙ. Ләкин Медколледж туҡталышында (Спорт Һарайы яғына ҡарай) туҡталка булмауы бәкәлгә һуға. Аныҡлап әйткәндә, беҙгә ултырып торорға урын юҡ. Берәй йүнен күрһәләр икән.

Шаҡша бисҭәһенә йыш ҡына барабыҙ. Һуңғы барғанда быға тиклем ҡараңғы урамдарҙа балҡып уттар ҡабынһын өсөн әүҙем эш барыуын күреп ҡыуандым. Баш ҡаланың "Уфагорсвет" ойошмаһы эшселәре тырышлығы менән Шаҡшаның Май, Әбйәлил, Ҡыйғы, Спорт һәм башҡа урамдарында фонарҙар ҡуйыла икән. Урындағы халыҡ өсөн бик тә яҡшы күренеш.

**Ғәфүр ИШҠОЛОВ.**

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# МӘСКӘҮГӘ БАРЫП...

## аҡсаһын мутлашыусыларға биргән

**Кешенең бер ҡатлылығына, радио, телевизор, гәзит-журналдар, интернет аша әйләнгән һайын тылҡып тороуҙарына ҡарамай, һаман муттар ҡулына эләгеүҙе дауам итеүенә аптырарһың. Бер нисә мең һум түгел, ә миллиондар менән иҫәпләнгән сумманы билдәһеҙ иҫәптәргә күсерә, хатта үҙе алып барып енәйәтсенең ҡулдарына тоттора бәзгеләр. Түбәндә сираттағы ҡорбандар һәм мутлашыусыларҙың енәйәти алымдары тураһында уҡығыҙ.**



● Стәрлетамаҡтан 46 йәшлек ир мутлашыусылар ҡармағына эләккән һәм 2,8 миллион һум аҡсаһын юғалтҡан. Мессенджерҙарҙың береһенән ул быға тиклем эшләп киткән ойошманан хәбәр ала. Билдәһеҙ кеше "элекке хеҙмәткәрҙәрҙе тикшереү" тураһында хәбәр итә һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары менән хеҙмәттәшлек итеү кәрәклеге тураһында иҫкәртә. Артабан уға, йәнәһе лә, ФСБнан шылтыраталар һәм, һинең банк иҫәбенән сит илгә аҡса күсерәләр, уны туҡтатыу өсөн "иҫәпте яңыртыу" кәрәк, тип белдерәләр. Енәйәтселәрҙең күрһәтмәһе буйынса зыян күреүсе банктан ике миллион һум аҡсаһын ала һәм, өҫтәп, 800 мең һумлыҡ кредит юллай. Шунан махсус рәүештә Мәскәүгә килә һәм бөтә сумманы курьерға тапшыра. "ФСБ хеҙмәткәрҙәре" бәйләнешкә сыҡмай башлағас, ир мутлашыусыларҙың ҡорбаны булыуын аңлай һәм полицияға мөрәжәғәт итә.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Башҡортостанда ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтарын сығарыуҙың тирә-яҡ мөхиткә ҙур зыян килтереүе буйынса бик күп һорауҙар килеп тыуа. Һуңғы йылдарҙа республиканың Урал аръяғы райондарында был мәсьәлә бермә-бер киҫкенләште. Проблеманы хәл итеү өсөн нимәләр эшләнә һуң?***

***Зариф БАЙҒУСҠАРОВ, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** Ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтарын сығарыусылар, эштәре тамамланғас, боҙған ерҙәрҙе тулыһынса тәртипкә килтерергә - карьерҙарҙы күмергә, тирәяҡты таҙартырға, ағас ултыртырға һәм башҡа тәбиғәтте һаҡлау сараларын күрергә тейеш. Әммә ҡайһы саҡ был талап үтәлмәй. Үҙҙәрен банкрот тип иғлан итеп, йә башҡа сәбәптәр табып, эҙ яҙлыҡтыралар. Һөҙөмтәлә тәбиғәтебеҙгә, урындағы халыҡ йәшәгән мөхиткә ҙур зыян килә. Был проблема мине күптән борсой. Шуға күрә рекультивация гарантияларын билдәләүсе закон проекты әҙерләнем. Был башланғысымдың асылы: файҙалы ҡаҙылмалар сығарыуға лицензия бирер алдынан ойошма аҡтарыласаҡ ерҙе киләсәктә тәртипкә килтереү өсөн билдәле сумманы рекультивация фондына йүнәлтергә бурыслы. Был аҡса, уны инфляциянан һаҡлау өсөн, банкка процент менән һалына.

Файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу эштәре һәм рекультивациялау тамамланғас, Тәбиғәттән файҙаланыу өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт, муниципалитеттар һәм Экология министрлығы вәкилдәренән торған комиссия башҡарылған эштәрҙең сифатын тикшерә. Рекультивация тураһында акт нигеҙендә ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыусы әлеге фондтан аҡсаһын кире ҡайтара ала. Йөкләмәләр үтәлмәгән осраҡта, был аҡса тәбиғәткә килтерелгән зыянды ҡаплау өсөн РФ субъектына йүнәлтелә. Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыусы өсөн тағы бер юл - ул рекультивацияны финанслау буйынса банк гарантияһын алырға хоҡуҡлы. Был осраҡта, әгәр рекультивация үткәрелмәһә, банк уға аҡса бүлергә тейеш.

Тиҙҙән был закон проектын Дәүләт Думаһында ҡарай башлайбыҙ. Ошо закон Башҡортостанда, ғөмүмән, бөтә илдә ташландыҡ карьерҙарҙың барлыҡҡа килеүенә кәртә буласаҡ. Минең фекеремсә, әгәр предприятиеның рекультивация фондын булдырыуға аҡсаһы юҡ икән, тимәк, уға геологик разведка һәм файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу менән шөғөлләнергә бөтөнләй кәрәкмәй. Ер аҫты байлығын файҙаланыусылар менән муниципалитет хакимиәте араһында килешеү төҙөләргә тейеш. Унда бар мәсьәләләр ҡараласаҡ: мәғдәндең ниндәй юлдан йөрөтөләсәге, юлдарҙы һәм күперҙәрҙе ремонтлауға аҡса бүленеүе һ.б. Тикшереүҙе экологик инспекторҙар башҡарырға тейеш. Хатта кескәй генә талаптар үтәлмәһә лә, улар мотлаҡ сараларҙы күрергә бурыслы.

Әлеге ваҡытта Әбйәлил районында геологик разведка эштәрен башлау тураһында һүҙ бара. Әгәр артабан тау байыҡтырыу комбинатын төҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителһә, атап үтелгән закон проекты буйынса, инвестор республика һәм район менән эш урындары һаны (мәҫәлән, уларҙың 90 проценты урындағы халыҡҡа гарантиялана), экологик талаптарҙы үтәү һәм урындағы бюджетҡа һалымдарҙы күсереү тураһында килешеү төҙөйәсәк. Шулай уҡ, яҡын-тирәләге ауылдарҙа йәшәүселәрҙең телә̇ктәрен иҫәпкә алып, юлдар һалыу, мәктәптәрҙе ремонтлау һ.б. мәсьәләләр ҙә күтәрелеүе ихтимал. Бынан тыш, тау байыҡтырыу комбинатын төҙөү урындағы һәм республика бюджеттарына ҙур суммала һалым индереүгә булышлыҡ итәсәк, был социаль проблемаларҙы хәл итеүгә һәм инфраструктураны үҫтереүгә аҡса йүнәлтергә мөмкинлек бирә. Тирә-яҡ мөхиткә зыян килтерелмәһен, геологик разведка эштәре кешеләрҙең тормошона кире йоғонто яһамаһын өсөн хәлде контролдә тоторға бурыслыбыҙ. Был бөтә күҙәтеү органдарының, муниципаль берәмектең һәм республика етәкселегенең бурысы. Бергәләп эшләргә тейешбеҙ, маҡсатыбыҙ - лайыҡлы эш хаҡы булған эш урындары булдырыу, унайлы йәшәү шарттарын тәьмин итеү һәм киләсәк быуындар өсөн тәбиғәтте һаҡлау.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәләк булған яугирҙарҙың ғаиләләренә түләнгән 2 миллион һумлыҡ матди ярҙам алыусылар даирәһен киңәйткән законға ҡул ҡуйҙы. Хәҙер мәрхүмде бәлиғ булғансы ҡараған һәм тәрбиәләгәндәр республика бюджетынан аҡса алырға мөмкин. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, биологик ата-әсә булмаған кешенең бала өсөн терәккә әйләнеүе, ләкин билдәле бер хоҡуҡи статусы булмағас, түләүгә дәғүә итә алмауы ҡануни яҡтан төҙәтелде. Бынан тыш, закон буйынса бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам алыусылар иҫәбенә Украина менән сиктәш Рәсәй территорияларында хәрби бурыстарын үтәгәндә һәләк булған яугирҙарҙың ғаилә ағзалары индерелде.

✓Алдағы биш йыллыҡта Башҡортостанда автомобиль юлдарын үҫтереүгә һәм транспорт хеҙмәттәре сифатын күтәреүгә 120 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтелә. Был хаҡта республика Премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итте. Аҡса республиканың "Юл хужалығы", "Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге", "Пассажир һәм йөк ташыуҙы үҫтереү" һәм "Газ-мотор яғыулығы баҙарын һәм электромобилдәр өсөн зарядлау инфраструктураһын үҫтереү" ярҙамсы программаларын үҙ эсенә алған транспорт системаһын үҫтереү дәүләт программаһы сиктәрендә бүленә.

✓5 июлдә Мәскәүҙең "Коломенское" музей-ҡурсаулығында һабантуй булды. Милли байрам Мәскәү, Башҡортостан һәм Татарстан хөкүмәттәре ярҙамында уҙғарыла, тип хәбәр итте ойоштороусылар. Һабантуйҙың төп сәхнәһендә билдәле артистар, бейеү һәм музыкаль коллективтар сығыш яһаны. Мәскәү һабантуйының махсус ҡунаҡтары - Заһир Зәйнетдинов (ZAINETDIN), "Бишбармаҡ" оркестры, Ғаяз Ғәйетбаев, Айгөл Әсәҙуллина һәм башҡа популяр йырсылар. Милли көрәш майҙансығында 15 илдән иң көслө спортсылар көрәш һәм ҡырғыҙ көрәшенең финал алыштарында ҡатнашты.

✓Екатеринбургта үткән "Иннопром-2025" Халыҡ-ара сәнәғәт күргәҙмәһендә Радий Хәбиров етәкселегендә Башҡортостан делегацияһы ҡатнашты. Эш программаһына ярашлы, унда Рәсәй төбәктәре губернаторҙары һәм эре индустриаль компаниялар етәкселеге менән эшлекле осрашыуҙар булды. Республикабыҙҙың сәнәғәт потенциалы һәм тармаҡтар ҡаҙаныштары махсус стендта күрһәтелде. Сара ҡунаҡтары авиация двигателдәре һәм пилотһыҙ техника, машиналар эшләү һәм химия продукцияһы менән таныша алды.

✓Йәштәр хоккей лигаһында уҙған миҙгелдәге һөжүмсе Максим Ильичев символик рәүештә лиганың иң яҡшы биш уйынсыһы иҫәбенә инде. Ул Өфөлә тыуған. Хоккейсы спорт карьераһын 2013 йылда "Салауат Юлаев"та башлаған. 2022-2023 йылдар миҙгеленән "Русские витязи" хоккей клубы өсөн сығыш яһаған. Йәштәр хоккей лигаһында 48 матчта форвард 48 (33+15) мәрәй йыйған. Хәҙер ул "Салауат Юлаев" клубына күсте.

• Ошондай уҡ юл менән енәйәтселәр Иглин районында йәшәүсе 43 йәшлек ҡатындың 2,5 миллион һумдан ашыу аҡсаһын ҡулға төшөрә. Уларҙың баҫымы аҫтында ҡатын, үҙенең машинаһын залогҡа һалып, бер миллион һумдан ашыу займ ала, 500 мең һумдан ашыу кредит юллай һәм, 900 меңгә яҡын йыйған үҙ аҡсаһын өҫтәп, бөтә сумманы, йәнәһе лә, "банк иҫәбен мутлашыусыларҙан һаҡлау өсөн" тип аталған хәүефһеҙ иҫәпкә күсерә.

• Рәсәй Эске эштәр министрлығының Стәрлетамаҡ ҡалаһы буйынса идаралығының дежур бүлегенә 76 йәшлек ҡатын мөрәжәғәт итә. Баҡһаң, пенсионерға "почта хеҙмәткәре" шылтырата һәм уның исеменә посылка килеүе тураһында хәбәр итә. Уны алыу өсөн СМС менән килгән кодты атауын һорайҙар. Ҡатын кодты әйткәс, уға ФСБ хеҙмәткәре булып икенсе мутлашыусы шылтырата. Ул, пенсионерға кредит бирелгән, ә аҡсаны "дошмандар ойошмаһы" иҫәбенә күсерергә тырышалар, тип белдерә. Тентеү һәм бөтә ҡиммәтле әйберҙәрҙе тартып алыу ҡурҡынысы аҫтында енәйәтсе ҡулаҡсаны "хәүефһеҙ иҫәпкә" күсереүҙе талап итә. Ҡурҡып ҡалған ҡатын йыйған бөтә аҡсаһын, 600 мең һумды, банкомат аша мутлашыусыларға күсерә. Икенсе көндө генә, күршеһе ярҙамында, пенсионер алданыуын аңлай һәм полицияға мөрәжәғәт итә.

• Салауат ҡалаһында йәшәүсе 53 йәшлек ир, "еңел аҡса" эшләү вәғәҙәһенә ышанып, мутлашыусылар ҡорбаны була. Ике аҙна дауамында зыян күреүсе ялған инвесторҙарҙың күрһәтмәләрен үтәй, һөҙөмтәлә 2 миллион 400 мең һумдан ашыу аҡсаһын юғалта. Ул танышыу сайтында инвестицияларҙан юғары килем тураһында һөйләгән һәм уға ҡушылырға тәҡдим иткән ҡыҙ менән таныша. Тәҡдим менән ҡыҙыҡһынып, ир "консультанттар" менән телефон аша аралаша һәм уларҙың күрһәтмәләрен үтәй башлай. Зыян күреүсе телефонға "эш өсөн кәрәкле" ҡушымталар ҡуя һәм башта 20 мең һум самаһы аҡсаһын криптовалютаға алмаштыра. Һуңынан "белгестәр" уны етди килем алыу өсөн 2 миллион һум кәрәклегенә ышандыра. Бындай суммаһы булмағас, ир кредит ала һәм аҡсаны мутлашыусылар әйткән төрлө иҫәптәргә күсерә. Күпмелер ваҡыт үткәс, "эшләп тапҡан" аҡсаһын алырға уйлай, тик был мөмкин булмай сыға. Алданғанын аңлап, ул полицияға мөрәжәғәт итә.

**"Иҫкәртәбеҙ! "СМС-хәбәрҙәрҙән кодтарҙы бер кемгә лә хәбәр итмәгеҙ. Аҡсаны таныш булмаған иҫәп-хисаптарға күсермәгеҙ. Оло туғандарығыҙ менән ошондай хәлдәр була ҡалһа, хәбәр итеү кәрәклеге хаҡында һөйләшегеҙ", - тип кәңәш бирәләр Рәсәй Эске эштәр министрлығының мәғлүмәт һәм йәмәғәтселек менән бәйләнеш бүлегенән.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Башҡортостанда ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтарын сығарыуҙың тирә-яҡ мөхиткә ҙур зыян килтереүе буйынса бик күп һорауҙар килеп тыуа. Һуңғы йылдарҙа республиканың Урал аръяғы райондарында был мәсьәлә бермә-бер киҫкенләште. Проблеманы хәл итеү өсөн нимәләр эшләнә һуң?***

***Азамат ИҘРИСОВ, Баймаҡ районы хакимиәт башлығы:*** Башҡортостанда ер аҫты байлыҡтарын варварҙарса файҙаланыуға ҡаршы көрәш буйынса системалы эш дауам итә. Намыҫһыҙ алтын табыусылар тарафынан ҡылынған боҙоуҙарға реакция булып, 2028 йыл аҙағына тиклем Урал аръяғында һибелмә алтын сығарыу өсөн лицензиялар биреүгә мораторий тора. 2021 йылдан ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыусылар эшмәкәрлеге мәсьәләләре буйынса ведомство-ара комиссия эшләүе лә үҙ һөҙөмтәһен бирә. Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу мәсьәләләре төбәк Башлығының даими контролендә.

Беҙҙең район файҙалы ҡаҙылмалар ятҡылыҡтарына бай. Тик алтын сығарыусылар, атап әйткәндә, "Весна", "Таналыҡ" һәм "Граф" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттәр эште вәхшиҙәрсә алып бара. Улар тирә-яҡ мөхитте һаҡлау нормаларын үтәмәй, районда теркәлмәгәндәр, шуға күрә муниципаль бюджетҡа һалым түләмәйҙәр, килтергән зыяндары 5 миллиард һумдан ашыу тәшкил итә.

Һибелмә алтынды контролдән тыш сығарыу процесын туҡтатыу Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу мәсьәләләре буйынса ведомство-ара комиссияның эше һөҙөмтәһендә мөмкин булды. Мәҫәлән, "Граф" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт административ яуаплылыҡҡа тарттырылды, һуңынан уның лицензияһы юҡҡа сығарылды.

Тәбиғи байлыҡтар менән эш иткәндә тәү сиратта район һәм урындағы халыҡтың мәнфәғәттәрен иҫәпкә алырға кәрәк. Бының өсөн район биләмәһендә юридик шәхесте теркәү, уның эшмәкәрлегенә урындағы халыҡты йәлеп итеү, бының өсөн йәштәрҙе уҡытыу, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса бөтә нормаларҙы ҡәтғи үтәү талап ителә. Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыусыларҙың эшмәкәрлеген һәм улар менән үҙ-ара эш итеүҙе күҙәтеү өсөн йәмәғәт контроле органын булдырыу ҙа мотлаҡ.

ДОНЪЯ ШАҔДАУЫ

# УҢ АЯҠТАНМЫ, ҺУЛДАНМЫ?

**Мөшкөлләнә барған хәленә ҡарамаҫтан, Украина Рәсәй тарафтарына дрондар яуҙырыуын дауам итә. Ләкин улар тәғәйен сәпкә барып етә алмай: беҙҙең яугирҙар илебеҙ һауа сиктәрен ышанысла һаҡлай.**

РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, 6 июлгә ҡарай төн эсендә генә лә Рәсәй Һауа һөжүменә ҡаршы саралар 120 пилотһыҙ шартлатҡысты һауала уҡ сәпкә алып, юҡ итеүгә өлгәште. Һөҙөмтәлә Брянск өлкәһенә осоролған - 30, Курск өлкәһе өҫтөндә - 29, Орел өлкәһендә - 18, Белгородта 17 дошман шартлатҡыс аппараты атып төшөрөлдө. Бынан тыш, Тула, Ленинград, Смоленск, Новгород һәм Тверь өлкәләренә тәғәйенләнгән 26 дрон үҙенең емергес маҡсатына өлгәшә алманы, юҡ ителде. 5 июль төнө лә беҙҙең һауа һағы өсөн көсөргәнешле булды: 94 дошман дроны һауала ҡыйратылды. Яуап һүҙе лә оҙаҡ көттөрмәне: 6 июль Рәсәй Ҡораллы көстәре дошмандың хәрби инфраструктураһын юҡ итеү буйынса киң ҡолас һөжүм кампанияһын дауам итте.

Украина Ҡораллы көстәренән айырмалы, Рәсәй ғәскәре ҡаршы тарафтың оборона сәнәғәте, хәрби идаралыҡ һәм элемтә объекттарын, шулай уҡ дошмандың личный составын, техникаһын, ялланып һуғышыусылар подразделениеларын утҡа тота. "Герань" дрондарынан тыш, беҙҙекеләр "Кинжал" комплексы ракеталары ла ҡулланды. Ошо йәһәттән пилотһыҙ шартлатҡыс аппараттар буйынса украин белгесе - Флэш ҡушаматлы Сергей Бескрестновтың таныуынса, Рәсәй "Герань" дрондары етештереүҙе шундай тиҙлеккә еткерҙе, тиҙҙән улар бер төн эсендә 700-800 аппарат менән һөжүм итә аласаҡ һәм бындай көскә ҡаршы бер ниндәй ҙә һауа оборонаһы ҡаршы тора алмаясаҡ. Билдәле булыуынса, беҙҙекеләр яңыраҡ ҡына эшләп сығарыла башлаған "Герань- 3" аппаратын да ҡулланып өлгөргәйне инде. Тәүгеләренән айырмалы рәүештә, "Герань-3" тиҙлеген күпкә арттырҙы, бейектән оса һәм улар ҙур төркөм булып, өймәкләшеп һөжүм итеүгә иҫәпләнгән. Уларҙы Украина ғәскәре ҡулланған Patriot ракеталары менән сәпкә алыу бик икеле, тип һөйләй хәрби эксперт, Һауа оборонаһы ғәскәрҙәре тарихсыһы Юрий Кнутов.

Бая телгә алып кителгән украин дрондар белгесе Бескрестнов әйтеүенсә, АҠШ әлеге Patriot ракеталарынан алып HIMARS өсөн боеприпастарға тиклем Украинаны тәьмин итеүҙән баш тарта. Әлегә... Тик бына Трамп иртәгә нимә тиеп аптыратыр. Рәсәйҙең баллистик ракеталарына һәм дрондарына ҡаршы тороуҙа Украина Ҡораллы Көстәре өсөн мөһим булған был ҡоралһыҙ дошман оборонаһы бер аҙна эсендә юҡҡа сығыуы ихтимал, тип яҙа Bild баҫмаһына немец хәрби эксперты Томас Тайнер. Ләкин АҠШ президенты Дональд Трамптың бөгөн - йоҡонан уң аяғына баҫып торһа, иртәгә һулы менән баҫыу ғәҙәте бик яҡшы билдәле. 5 июль ул Украинаға ҡорал ебәреүҙе дауам итергә ниәтләүе хаҡында белдерҙе. Трамп был ҡарарға 4 июлдә Зеленский менән телефондан һөйләшкәндән һуң килгән. Аңламаҫһың был Трампты. Бер яҡтан, ул Мәскәү менән мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыу яғында: The Wall Street Journal хәбәр итеүенсә, Трамп Сенатҡа Рәсәйгә ҡаршы санкцияларҙы йомшартырға ҡуша, ә икенсе яҡтан, Зеленскийҙың "күҙ йәштәре"нән йомшарып, Украинаны күтәрмәләүен дауам итә.

Ҡайҙа һуң Трамптың ысын йөҙө? Ике, әллә тағы нисәләр йөҙлө булыуын ул үҙен президентлыҡҡа үткәреүгә күп көс һәм аҡса түккән Илон Маск менән мөнәсәбәттәрендә лә асыҡ күрһәтте инде. Ике аралағы ыҙғыш киҫкенләшә генә бара. Трамптың элекке кәңәшсеһе Стив Бэннон әйтеүенсә, АҠШ президентына импичмент иғлан итеү хаҡында сығыш яһап, Маск "кире ҡайта алмаҫтай" нөктәне уҙып китте. Ә Дональд Трамп иһә CNN телеканалы менән әңгәмәһендә миллиардер Маскты "бахырҡай" тип атаны, "уның проблемалары" булыуы хаҡында белдерҙе һәм Илон менән һөйләшеп тороуҙы ла кәрәк тапмауы, уның хаҡында, ғөмүмән, уйламауын әйтте. Дөрөҫ, уның башҡа төрлө уйниәттәре күп, әлбиттә, ләкин шуларҙың нисәүһе бойомға аша алды икән?

Әйткәндәй, 5 июлдә Дональд Трамп Владимир Путин менән телефондан аралашты. Һөйләшеүҙән һуң Трамп Путинды профессионал тип таныны һәм санкциялар менән уңышлы көрәшә өсөн маҡтаны, ләкин шул уҡ ваҡытта Украина конфликтында "аҙаҡҡаса барырға теләгәне" өсөн Рәсәй башлығы менән аралашыуҙан ҡәнәғәт булмауын белдерҙе. Ҡыҙыҡ, Рәсәй Президенты менән һөйләшкән көнө иртәнсәк Трамп йоҡоһонан ҡайһы аяғына баҫып торғайны икән?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы түләүле белем биреү хеҙмәттәрен күрһәткәндә ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау мәсьәләләре буйынса ҡыҙыу бәйләнеш асылыуы хаҡында белдерҙе. "Хотлайн" 7 июлдән 18-енә тиклем 8-800-77-50-170 номеры буйынса эшләй. Дүшәмбе-кесаҙна: иртәнге 10-дан киске 5-кә тиклем, йома: 10-дан 4 тула 15 минутҡа ҡәҙәр. 12-нән 1 тула 15 минутҡа тиклем тәнәфес.

✓Ишембай районының Петровское ауылында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәйкәл асылды. Был хаҡта муниципалитет хакимиәте башлығы Азат Ишемғолов хәбәр итте. Мемориал - тыуған илебеҙҙе һаҡлаған башҡорт яугирҙарының батырлығы һәм ҡаһарманлығы символы, тип билдәләне ул. Бынан алдараҡ Азат Ишемғолов фронттағы яҡташтарына алты автомобиль, мотоцикл, инструменттар һәм аҙыҡ-түлек алып барып тапшырыуҙары хаҡында хәбәр иткәйне.

✓Мәләүез районында йәш табиптарға торлаҡты ҡуртымға алыу хаҡы ай һайын 10 мең һум күләмендә компенсациялана. Шулай уҡ маҡсатлы килешеү буйынса уҡыған студенттарға - 3 мең һум стипендия, эшкә урынлашҡанда айлыҡ өҫтәмә түләү ҡаралған. Бынан тыш, йәш табиптар өҫтәмә һөнәрҙәр буйынса ҡайтанан әҙерлек үтергә мөмкин, тренажер залдарына һәм бассейндарға ташламалар бар. Уларҙың балаларына мәктәпкәсә учреждениеларҙа урындар бүленә. Мәғлүмәт буйынса, Мәләүез үҙәк район дауаханаһы урта звено медицина хеҙмәткәрҙәре менән 62 процентҡа ғына тәьмин ителгән.

✓Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән яңы һөнәри байрам - Рәсәй адвокатураһы көнө булдырыла. Уны 31 майҙа билдәләйҙәр. 2002 йылдың 31 майында "Рәсәй Федерацияһында адвокат эшмәкәрлеге һәм адвокатура тураһында" федераль закон ҡабул ителеүгә бәйле, Рәсәйҙең Юстиция министрлығы ошондай тәҡдим менән сығыш яһаны. Прокуратура көнө 12 ғинуарҙа билдәләнә.

✓Мишкә районы хакимиәтенең элекке етәксеһе Павел Трапезников Бөрө районы башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Был турала Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә белдерҙе. Мишкә районы етәксеһе вазифаһын башҡарыу бурысы Лариса Александроваға йөкмәтелде. Һәм тағы. Айҙар Абдуллин контракт буйынса Дыуан районы башлығы итеп тәғәйенләнде.

✓2024 йылда сабыйҙар үлеме күрһәткесе 3,5 промилле тәшкил иткән. Был республиканың статистика күҙәтеүе тарихында иң түбән күрһәткес булып тора. Республикала сабыйҙар үлеме кимәле тарихи минимумға етте, тип белдерҙе Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин Хөкүмәттә уҙған оператив кәңәшмәлә. "Тыуым түбән булған осорҙа сабыйҙар үлемен кәметтек, былтыр - 4, хәҙер 3,5, ә элегерәк 6,2 промилле ине", - тине ведомство етәксеһе.

✓ *Республикала "Мәктәпкә йыйыныրға ярҙам ит" хәйриә акцияһы бара. Теләгән һәр кем социаль йәһәттән аҙ тәьмин ителгән, күп балалы һәм тулы булмаған ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларға яңы уҡыу йылына әҙерләнергә ярҙам итә ала.*



ҠЫҪҠАСА

# ХӘҮЕФҺЕҘ БУЛҺЫН

**Башҡортостанда рәсми туристик маршруттар исемлеге төҙөлдө.** Белдереүҙәренсә, туристик маршрутҡа рәсми тигән статус биреү туроператорҙарҙан тейешле ғариза ҡаралғандан һуң ғәмәлгә ашырыла. Ғариза биреүселәргә критерийҙар иҫәбендә - республика биләмәһендә бер йылдан ашыуыраҡ эшмәкәрлек алып барыу; туристик маршрутты Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең киң мәғлүмәт сараларында, социаль селтәрҙәрҙә, рейтингтарҙа күрһәтеү. Туроператорҙарҙан бөтәһе 67 ғариза килгән, тип хәбәр иттеләр республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығынан. Ведомство-ара комиссия, 59 маршрутты хуплап, исемлеккә индерҙе. Категориялы туристик походтар был исемлеккә юҡ. Исемлеккә рәсми раҫланған маршруттар тураһында дөйөм мәғлүмәттәр генә бирелгән. Ентеклерәк мәғлүмәт алыу өсөн туроператорҙарға һәм ойоштороусыларға туранан-тура мөрәжәғәт итергә кәңәш ителә. Туристик маршруттың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өсөн турҙы ойоштороусы яуаплы.

✓ **Силәбе өлкәһенең Троицк ҡалаһында "Рәсүлев уҡыуҙары: Ислам тарихта һәм Рәсәйҙең заманса тормошонда" тигән халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция үтте.** Сарала Рәсәйҙең 17 төбәгенән, 20 сит илдән 900-ҙән ашыу дин ғалимдары, философтар, милли-мәҙәни үҙәктәр әүҙемселәре, дини һәм йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ҡатнашты. Пленар өлөштә Силәбе өлкәһе губернаторы Алексей Текслер, Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назараты рәйесе, Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Тәлғәт Тажетдин сығыш яһаны. Конференцияла Башҡортостандан делегация ҡатнашты, Силәбе өлкәһендә Башҡортостан вәкиле Әлфир Байымов, Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағында Башҡортостандың дәүләт хеҙмәте һәм идаралығы академияһы ректоры Данияр Абдрахманов һәм башҡалар булды. Быйылғы уҡыуҙар Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына һәм Ватан һаҡсылары йылына арналды.

✓ **Мәғлүмәт-коммуникация технологияларын законһыҙ ҡулланыуға ҡаршы көрәш идаралығы уҙған йылдың көҙөндә Башҡортостан Эске эштәр министрлығы ҡарамағында булдырылды.** "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы майҙансығында журналистар менән осрашыуҙа идаралыҡ начальнигы, полиция полковнигы Рәмил Төхвәтуллин аңлатыуынса, уның составына оператив блок, йәки элеккесә криминаль блок, шулай уҡ был енәйәттәргә аналитика үткәреү һәм уларҙы координациялау менән шөғөлләнгән бүлек инә. "Идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре категорияһы төрлөсә, уның составында - енәйәт эҙләү, иҡтисади хәүефһеҙлек, "К" идаралығына ингән хеҙмәткәрҙәр. Улар "виртуаль", контактһыҙ енәйәттәр менән шөғөлләнә. Идаралыҡ хеҙмәткәрҙәренең тырышлығы менән республикала ла, унан ситтә лә мутлашыусыларҙы ҡулға алыуҙар бар. Шуны билдәләргә кәрәк, беҙҙең граждандарға ҡарата енәйәттәр башҡа төбәктәр граждандары тарафынан башҡарыла", - тип хәбәр итте БР буйынса Эске эштәр министрлығы вәкиле.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ШӘХСИ КОНТРОЛДӘ

**Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә "Салауат" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең эшмәкәрлеге тикшерелде.**

Йәмғиәт директоры Таһир Бәхтегәрәев белдереүенсә, әле предприятие, федераль лицензияға ярашлы, геология-разведкалау эштәре алып бара. Уларҙың барышын Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шәхси контролгә алыуы тураһында белдерҙе. "Беҙ был проектты компания етәкселеге менән бер нисә тапҡыр осрашып тикшерҙек. Үҙ вәкәләттәрем сиктәрендә предприятиеның килешеүҙәрҙе нисек үтәүен даими күҙәтәсәкмен. Сәнәғәт министрлығына социаль-иҡтисади хеҙмәттәшлек тураһында ҙур килешеү әҙерләргә ҡуштым", - тине ул.

Әлеге ваҡытта "Салауат" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте Башҡортостанда резидентлыҡҡа теркәлеүҙе башланы һәм Әбйәлил районында үҙ офисын асты.

# ҺӨНӘРИ БЕЛЕМ МӨҺИМ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Евразия фәнни-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусының Геном үҙәге майҙансығында Урта һөнәри белем биреү буйынса республика советының сираттағы ултырышын үткәрҙе.**

Радий Хәбиров үҙенең сығышында студенттар коллективтарының әхлаҡи мөхитенә һәм йәштәрҙең әхлаҡи ҡараштарына Башҡортостандың һәм бөтә илдең киләсәге бәйле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Республикабыҙ өсөн һөнәри белем биреү системаһының ҙур әһәмиәтен аңлайбыҙ. Шуға күрә, ҡатмарлыҡтарға ҡарамаҫтан, тәү сиратта уҡыу йорттарының матди-техник базаһын нығытыуға ҙур иғтибар бүләбеҙ. Былтыр төбәк бюджеты иҫәбенә 15 колледжды тәртипкә килтерҙек. Йыл һайын дөйөм ятаҡтарҙы ремонтлауға ла 500-әр миллион һум бүләбеҙ. Шуныһы мөһим: быйылдан колледждарҙы капиталь ремонтлау буйынса федераль программа эшләй. Ике йыл эсендә республика ете учреждение бинаһын ремонтлайбыҙ", - тине төбәк етәксеһе.

Башҡортостан Башлығы йәштәр менән артабан эшләүҙең бер нисә өҫтөнлөклө йүнәлешен билдәләне. Улар иҫәбендә - колледж студенттарын йәмәғәт һәм ирекмәндәр эшмәкәрлегенә, төҙөлөш отрядтары эшенә йәлеп итеү.

# ХЕҘМӘТ МИНИСТРЫ МЕНӘН...

**Өфөлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Антон Котяков менән осрашты.**

Республика Башлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, көн тәртибендә - мәшғүллек хеҙмәтен һәм дәүләткә ҡарамаған социаль хеҙмәтләндереү секторын үҫтереү, шулай уҡ республикала Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам саралары. Антон Котяков республиканың халыҡты эшкә урынлаштырыу мәсьәләләре менән шөғөлләнгән үҙәктәрҙе яңыртыу буйынса уңыштарын юғары баһаланы. "Тап Башҡортостан модулле төҙөлөш башланғысы менән сығыш яһаны, - тип билдәләне министр. - Һеҙҙең тәжрибәне тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә был федераль көн тәртибенә индерелде".

Осрашыуҙа Антон Котяков һәм Радий Хәбиров яңы социаль объекттар төҙөү, атап әйткәндә, "Именлек" республика геронтология үҙәгенең яңы корпусы мөмкинлектәрен тикшерҙе. Дәүләткә ҡарамаған социаль хеҙмәтләндереү секторы мәсьәләләренә айырым иғтибар бүленде. Башҡортостан был форматты әүҙем үҫтерә, төбәктә биш пансионат дәүләт-шәхси партнерлыҡ сиктәрендә эшләй, тағы бер нисә учреждение сафҡа индерелергә тейеш. Бынан тыш, яҡтар Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға, шул иҫәптән социаль хеҙмәтләндереү, белем биреү, һаулыҡ һаҡлау, эшкә урынлашыуға булышлыҡ итеү, торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өлкәһендә ярҙам күрһәтеү тураһында фекер алышты.

# ХАҠТАР АРТТЫ!

**Июлдән Өфөлә коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү уртаса 13 процентҡа артты.**

Ресурстар менән тәьмин итеүсе һәм хеҙмәтләндереүсе ойошмаларға ярҙам итеү маҡсатында бындай ҡарарҙы федераль властар 2023 йылда уҡ ҡабул итте. Һәр төбәк өсөн үҙенең максималь ҡиммәтләнеү кимәле билдәләнгән, Башҡортостан өсөн ул 16,7 процент тәшкил итә.

Башҡортостан халҡы өсөн һыу менән тәьмин итеү - 13,7 процентҡа, һыуҙы ағыҙыу - 14,1 процентҡа, йылылыҡ менән тәьмин итеү - 16,1 процентҡа, электр менән тәьмин итеү - 12,6 процентҡа, газ - 10,3 процентҡа, ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар сығарыу - 11,8 процентҡа артты.

Социаль льготаларға хоҡуҡлы граждандар торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә сығымдарҙың бер өлөшөн компенсациялай ала. Улар - күп балалы ғаиләләр, хәрби хәрәкәттәр ветерандары, инвалидтар һәм инвалид балалары булған ғаиләләр, шулай уҡ радиация йәки техноген һәләкәттәрҙән зыян күреүселәр. Бындай компенсацияны ғаиләүе килемдең 13-20 проценты торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн киткән осраҡта рәсмиләштерергә мөмкин. Ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмаларға аҡсаны планлы һәм капиталь ремонтҡа, хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡына йүнәлтеү өсөн тарифтарҙы төҙәтеү кәрәк.

# ЙӘМӘҒӘТ БИЛӘМӘЛӘРЕ ЯҢЫРА

**Рәсәйҙә йәмәғәт биләмәләрен төҙөкләндереү буйынса тауыш биреү тамамланды. Әйткәндәй, ул 2019 йылдан алып үткәрелә, һәм Башҡортостанға ҙур ғына аҡса йәлеп итеү мөмкинлеген бирә.**

Мәҫәлән, 2019 йылдан башлап "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхите булдырыу" федераль проекты сиктәрендә республикала 8,2 миллиард һумға 806 йәмәғәт биләмәһе төҙөкләндерелгән. Шуның 7,6 миллиард һумы - федераль ҡаҙнанан килгән аҡса. Быйыл Башҡортостан ҡарауға 241 биләмә тәҡдим итте. 53 көн эсендә ил буйынса бөтәһе 16,5 миллиондан ашыу кеше тауыш биргән, шуларҙың 770 меңдән ашыуы - беҙҙең республика халҡы. Был иһә - Рәсәй буйынса дөйөм һандың 5 проценты. Шартлы рәүештә әйткәндә, Башҡортостанда йәшәүсе һәр бишенсе кеше үҙ тауышын биргән. Бындай һандар республикабыҙ халҡының ҡала мөхитенә битараф булмауын асыҡ күрһәтә.

Төҙөкләндереү өсөн биләмәләрҙе халыҡ үҙе һайлай. Тауыш биреү йомғаҡтары "граждандарыбыҙ һайлауы нигеҙендә" формалаша, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә. "Республика халҡы был сарала, ысынлап та, ихлас ҡатнаша, - тине Радий Хәбиров. - Был, әйткәндәй, эш барышын контролдә тотоуҙа ла сағыла. Әле аҡса килә башланы, барыһын да тейешенсә ойошторорға кәрәк. Беренсенән, 2025 йылда башҡарылырға тейешле күләмде тамамларға, ә һуңынан инде 2026 йылға билдәләнгән эштәрҙе лә планлаштырырға мөмкин. Ғөмүмән, "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" проекты ярҙамында беҙ ауыл-ҡалаларыбыҙҙың бик күп проблемаларын хәл итә алдыҡ. Шуға күрә был эш менән артабан да әүҙем шөғөлләнергә кәрәк".

# Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓"Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы дауам итә. 2025 йылдың июлендә "Сәләмәтлек поездары" Архангел, Баймаҡ, Баҡалы, Балтас, Бәләбәй, Балаҡатай, Борай, Бөрйән, Йәрмәкәй, Йылайыр, Иглин, Илеш, Ишембай, Күгәрсен, Мәләүез, Мәсетле, Саҡмағош һәм Шишмә райондарына бара. Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, халыҡ бушлай тикшереү үтергә мөмкин. Белгестәргә яҙылыырға кәрәкмәй, ҡабул итеү сират буйынса. Иң мөһиме, үҙең менән паспорт һәм мотлаҡ медицина страховкаһын алырға кәрәк.

✓Әбйәлил районында өс йәш егет юл фажиғәһендә һәләк булған. Ҡырҙас ауылынан Айтуған, ағалы-ҡустылы Айнур һәм Инсаф исемле егеттәр Аҫҡар - Амангилде юлында еңел автомобилдә йөк машинаһына бәрелә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һыу һәләгәләй егеттәрҙең ғүмерен ҡотҡарып өлгөрмәйҙәр. Ошо көндәрҙә Ҡырҙас ауылы халҡы бик ауыр ҡайғы кисерә. Егеттәргә арналған яҙмалар һәм фотоһүрәттәр ауыл төркөмөнә ҡуйылған. Бөтә район халҡы мәрхүмдәрҙең яҡындарына һәм туғандарына ҡайғы уртаҡлашыу белдерә.

✓Ҡыйғы районында ошо көндәрҙә "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" милли проекты сиктәрендә яңы дүрт фельдшер-акушерлыҡ пункты асыла. Был хаҡта район хакимиәтенән хәбәр итәләр. ФАП-тар Сәгит, Абҙай, Иҙрис һәм Аҫылғужа ауылдарында төҙөлә. Эшселәр модуль конструкцияларҙы урынлаштыра башлаған да инде. Яңы фельдшер-акушерлыҡ пункттары заман талаптарына һәм стандарттарына яуап бирә.

✓Республикала "Мәктәпкә йыйыныրға ярҙам ит" хәйриә акцияһы бара. Йәй аҙағына тиклем теләгән һәр кем социаль йәһәттән аҙ тәьмин ителгән, күп балалы һәм тулы булмаған ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән, шулай уҡ һаулыҡ мөмкинлектәре сикле балаларға яңы уҡыу йылына әҙерләнергә ярҙам итә ала. Акцияны урындарҙағы "Ғаилә" үҙәктәре, Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы быйыл 15-се тапҡыр үткәрә.

✓9-14 июлдә Салауат районында урынлашҡан Янғантау геопаркында хәрәкәт итеүҙән мәхрүм инвалидтар араһында "Йүрүҙән" тип исемләнгән 12-се Бөтә Рәсәй фестивале үтә. Унда Башҡортостандан, Татарстандан, Пермь крайынан, Мурманск, Свердловск, Ырымбур, Силәбе өлкәләренән, Санкт-Петербургтан 13 команда ярыша. Беҙҙең республиканан "Нур" һуҡырлыҡ буйынса инвалидтарҙың спорт-реабилитация үҙәгенән, Бөтә Рәсәй инвалидтар ойошмаһының республика ойошмаһынан командалар ҡатнаша. Фестивалде ойоштороусылар булып Рәсәйҙең инвалидтар спорт союзы, Бөтә Рәсәй инвалидтар йәмғиәте тора.

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ЯҢЫ УРАМДАР

**Баш ҡаланың Ленин районында билдәле шағир һәм күренекле табип исемендәге урамдар барлыҡҡа килде. Ҡала советы депутаттары сираттағы ултырышта ошондай ҡарар ҡабул итте.**

Рәшит Шәкүров урамы Дуҫлыҡ проспектынан башлап балерина Тамара Хоҙайбирҙина урамына тиклем дауам итә. Шәкүров Рәшит Закир улы (псевдонимы Рәшит Шәкүр) - Башҡортостандың халыҡ шағиры, билдәле яҙыусы, педагог, филология фәндәре докторы, профессор, Халыҡ-ара төрки академияһы академигы. Былтыр июнь айында ул 88-се йәшендә арабыҙҙан китте.

Табип Саҡаева урамы иһә яңы биҫтәлә Дуҫлыҡ проспекты һәм Затон шоссеһы араһында урынлашҡан. Мәстүрә Саҡаева Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының Бөйөр үҙәген булдырыу инициаторҙарының береһе тип һанала, һуңынан үҙе уны етәкләй. 1965 йылда уның етәкселегендә илебеҙҙә тәүге тапҡыр геморрагик биҙгәк йоҡтороу һөҙөмтәһендә киҫкен бөйөр етешмәүсәнлеге менән сирләгән кешегә гемодиализ үткәрелә. М. Сакаева - Социалистик Хеҙмәт геройы һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған табибы.

# БЕР АҘНАЛА - МИЛЛИОН ҺУМ

**Өфөлә ҡаланың тарихи үҙәгендә түләүле парковкалар эшләй башлауы тураһында хәбәр иткәйнек.**

Баш ҡала хакимиәтенең транспорт һәм элемтә идаралығы начальнигы Олег Хмарин хәбәр итеүенсә, тәүге аҙнала улар муниципалитет ҡаҙнаһына миллион һум аҡса килтергән. Йыйылған сумма артабан юл-транспорт инфраструктураһын яңыртыуға йүнәлтеләсәк. "Өфөлә түләүле парковкалар сафҡа индерелгән тәүге аҙнала 30 меңдән ашыу транзакция үткәрелгән. Һүҙ түләүле парковка менән файҙаланған һәм функционалды үҙләштергән кешеләр тураһында бара. Ошо көндәрҙә ҡала үҙәге бик ныҡ үҙгәрҙе. Әгәр элек урамдарҙа машина ҡуйыр урын булмаһа, пик сәғәттәрендә автомобилдәр икенсе рәткә теҙелһә, буш урын табыу өсөн байтаҡ уралып йөрөргә тура килһә, хәҙер иртәнге сәғәт 7-нән үк буш урындар байтаҡ", - ти Олег Хмарин. Водителдәр түләүле парковка менән башлыса 1-2 сәғәт файҙалана, бик аҙҙары ғына автомобилен 4 сәғәттән ашыу ваҡытҡа ҡалдыра, тип өҫтәне ул. Тәүге боҙоуҙар ҙа теркәлгән, мәҫәлән, ҡағиҙәләрҙе боҙорға маташҡан 200-гә яҡын автомобиль штраф туҡталҡаларына күсереп ҡуйылған. Тикшереү йомғаҡтары буйынса ҡағиҙәне боҙоусыларға 1500 һум штраф һалына.

Өфөлә түләүле парковкалар буйынса колүҙәккә +7 (347) 246-68-66 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә мөмкин.

# РӨХСӘТҺЕҘ УРЫН АЛҺА...

**Өфө ҡала округы хакимиәте рөхсәтһеҙ урынлаштырылған һатыу киосктарын һәм павильондарын урындарынан алыуҙы дауам итә.**

Орджоникидзе районы хакимиәте башлығы Рөстәм Хәмитов ҡала халҡынан был объекттарҙы ниңә быға тиклем алмауҙары тураһында һорауҙар килеүе тураһында хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, бының үҙ сәбәптәре булған. Был һатыу нөктәләре 10-15 йыл эшләгән, кешеләр уларҙың хужалары тәҡдим иткән тауарҙар һәм хеҙмәттәр менән файҙаланған.

-Ҡасандыр был эшҡыуарҙар үҙ эшмәкәрлеген законлы нигеҙҙә башлаған булған. Әммә ваҡыт үтеү менән уларҙың документтарының ҡулланыу ваҡыты һәм ерҙе ҡуртымға алыу срогы тамамланған. Хәҙер иһә уларҙың тейешле норматив документтары юҡ, улар төрлө сәбәптәр арҡаһында идара органдары менән килешеү төҙөмәгән, - тип аңлата Рөстәм Хәмитов.

Уның әйтеүенсә, объекттарҙы күсерер алдынан уның хужаларына киоск һәм павильондарҙы үҙ көстәре менән һүтеү мөмкинлеге бирелә. Әгәр быны эшләмәһәләр, комиссия ағзалары закон буйынса эш итергә мәжбүр була. Билдәләнеүенсә, яңы норматив документтар, ҡағиҙәләр һәм ҡарарҙар баш ҡала тормошон яҡшыртыу, төҙөкләндереү маҡсатында ҡабул ителгән.

# НИҢӘ ШТРАФ ТҮЛӘРГӘ?

**Өфөлә штрафтарҙың яртыһынан күберәген - автомобилдәрҙе газондарҙа туҡтатҡан өсөн, дүрттән бер өлөшөн автомобилде ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары йыйыу майҙансыҡтары эргәһенә ҡуйған өсөн түләйҙәр.**

Төҙөкләндереү өлкәһендәге хоҡуҡ боҙоуҙарҙы урам камералары күҙәтә һәм махсус программа эшкәртә, тип хәбәр итте мэриялағы оператив кәңәшмәлә Өфө хакимиәтенең граждандар институттары менән үҙ-ара эш итеү идаралығы етәксеһе Илдус Шәңгәрәев. Уның мәғлүмәттәре буйынса, бындай тәртип боҙоуҙарҙың яртыһынан ашыуы (йыл башынан алып 20 меңдән ашыу) - газондарҙа машинаны ҡуйған өсөн билдәләнгән. Водителдәргә 30,8 миллион һумлыҡ штраф һалынған. "Газонға бер-нисә тапҡыр машина менән ингәндән һуң унда үлән үҫеүҙән туҡтай һәм тағы ла йәшелләндереү эштәрен башҡарырға кәрәк. Машиналар тәгәрмәстәр менән юлдарға ҡара ерҙе алып сыға, юлдарҙағы бысраҡ күләмен арттыра".

Төҙөкләндереү ҡағиҙәләрен боҙоуҙың 25 процентын - 10 меңдән ашыу осраҡ - сүп-сар контейнерҙары эргәһендә парковкалау осраҡтары биләй. Бының өсөн водителдәр 16 миллион һум штраф алған. "Бындай урындарҙа туҡтаған һәр кем коммуналь техниканың йөрөүенә ҡамасаулауын һәм сүп-сарҙы сығарыу графигын боҙоуын аңларға тейеш", - тип билдәләне чиновник. Штрафтарҙың күп өлөшө ҡала бюджетына йүнәлтелә.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ҒӨБӘЙҘУЛЛИН МИҢЛЕҒӘЛИ ХӘБИБУЛЛА УЛЫ

Ул - Бөйөк Ватан һуғышында кәүҙәһе менән дошман дзоты амбразураһын ҡаплап, батырҙарса һәләк булған яугир, гвардия лейтенанты. Советтар Союзы Геройы.

1923 йылдың 8 мартында (икенсе мәғлүмәт буйынса 28 октябрҙә) Башҡорт АССР-ының Бәләбәй кантоны Өршәкбаш-Ҡарамалы ауылында Хәбибулла һәм Мәликә Ғөбәйҙуллиндар ғаиләһендә тыуған. Ауыл мәктәбендә ете класты тамамлағас, Силәбе өлкәһенең Әшә ҡалаһында заводта эшләй.

1940 - 1941 йылдарҙа Баҡы ҡалаһындағы нефть техникумында уҡый. 1942 йылда Ҡыҙыл Армияға алына, Буйнак пехота училищеһының тиҙләтелгән курсын тамамлағандан һуң, Төньяҡ Кавказ фронтына ебәрелә. 1943 йылдың авгусында Көньяҡ фронтта (октябрҙән 4-се Украин фронты, 28-се армия, 109-сы гвардия уҡсылар дивизияһы) 309-сы гвардия уҡсылар полкында пулемёт взводы командиры вазифаһында дәшһәтле яуҙарҙа ҡатнаша. 1943 йылдың 26-27 сентябрендә Молочный йылғаһы буйында ике тапҡыр яраланһа ла, яу яланын ташлап китмәй, батырлыҡ өлгөһө өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ була.

Гвардия лейтенанты Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин Днепр йылғаһының уң яҡ ярын, Берислав һәм Херсон ҡалаларын азат итеү өсөн һуғыштарҙа Шакирйән Мөхәмәтйәновтың (Александр Матросовтың) батырлығын ҡабатлай. Был көндә полк Херсон өлкәһенең Дудчаны-Рядовое рубежында һөжүм итә, ләкин операция уңышҡа өлгәшә алмай, сөнки дошман үҙенең ут нөктәләрен ҡурғандарға уңайлы итеп урынлаштырған була. Дошмандың ут нөктәләрен юҡ итеүҙе взвод командиры Ғөбәйҙуллинға йөкмәтәләр. Ул үҙ взводын дзотты штурмлауға алып бара... СССР Юғары Советы Президиумының 1944 йылдың 3 июнендәге Указы менән гвардия лейтенанты Миңлеғәли Ғөбәйҙуллинға үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. М.Х. Ғөбәйҙуллинды наградаға тәҡдим иткән документта ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "Дзотҡа яҡынлаша биргәс, иптәш Ғөбәйҙуллин амбразураға ташланды, шул саҡта ул үлемесле яраланды, әммә... ул взвод менән идара итеүен дауам итте, амбразураға табан шыуышты... Ул уны үҙ кәүҙәһе менән ҡапланы, шуның һөҙөмтәһендә полк ҡалған ике пулеметты юҡ итте".

Миңлеғәли батыр Дудчаны ауылы ҡурғанында ерләнгән, бында уға һәйкәл ҡуйылған.

Батыр яҡташыбыҙҙың исеме мәңгеләштерелгән. Өфө һәм Борислав ҡалаларында, Дудчаны ауылы урамдарына Ғөбәйҙуллин исеме бирелгән. Миәкә районының Өршәкбаш-Ҡарамалы, Ҡырғыҙ-Миәкә ауылдарында, Херсон өлкәһендәге Нововоронцовка ауылының "Чернофлотец" колхозында һәм Өфө ҡалаһында уға һәйкәл ҡуйылған. Күренекле башҡорт яҙыусыһы Яныбай Хамматовтың уның тормош һәм батырлыҡ юлын сағылдырған "Тыуған көн" исемле күләмле романы донъя күрҙе. Әҫәр бер нисә телгә тәржемә ителгән.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә ремонтланған Ағиҙел күпере аркаһын элекке урынына ҡуйҙылар. Был хаҡта үҙенең социаль селтәрҙәрендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. "Өфөләргә вәғәҙә иткәнсә, баш ҡалабыҙҙың символдарының береһен - Ағиҙел аша иҫке күпер аркаһын кире ҡайтарҙылар. Реконструкция үҙ көйөнә бара", - тип яҙа ул. Республика етәксеһе объекттың әҙерлеге 85 процент тәшкил итә, тип билдәләне. Күпер аша хәрәкәтте быйыл көҙ башларға ниәтләйҙәр.

✓2025 йылдың 4 сентябрендә Өфөнөң Көрәш һарайында "Беренсе курс студенттарына бағышлау" республика фестивале уҙғарыла. Сараны ойоштороусы булып Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте министрлығы сығыш яһай. Фестивалдең ойоштороу комитетын республика Башлығы хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Азат Бадранов етәкләй. Шулай уҡ ойоштороу комитеты составына йәштәр сәйәсәте министры Вито Сабиров, мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин, фән һәм юғары белем биреү буйынса дәүләт комитеты рәйесе Светлана Мостафина инде.

✓Башҡортостан тенниссыһы, Паралимпия уйындары чемпионы Елена Прокофьева Ҡытайҙа өҫтәл теннисы буйынса халыҡ-ара ярыштарҙа көмөш миҙал яуланы. Башҡортостан спортсыһының еңеүе хаҡында республиканың Адаптив спорт үҙәгенән хәбәр иттеләр. "ITTF World Para Future Taipei 2025" өҫтәл теннисы буйынса халыҡ-ара ярыштар Ҡытайҙың Тайбэй ҡалаһында уҙҙы. Елена Прокофьева финалда япон спортсыһы Вада Нацукиҙан еңелде һәм икенсе урынды алды. Уйын 3:2 иҫәбе менән тамамланды, Прокофьева бер мәрәйгә генә ҡалышты.

✓Өфөлә 18-28 июлдә шахмат буйынса "Р. Х. Ғүмәров мемориалы" Рәсәй Балалар кубогы этабы үтә. БР Хөкүмәте вице-премьеры - Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов Башҡортостан Республикаһы Шахмат федерацияһы президенты Филүс Ишбулатов менән ярыштарҙы ойоштороу мәсьәләләрен ҡарауҙары тураһында хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, Рәсәй Кубогының балалар этабында 20 төбәктән 273 шахматсы ҡатнаша. Башҡортостан исеменән ил беренселегендә Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Октябрьский, Ағиҙел, Благовещен ҡалаларынан, Өфө, Асҡын, Ғафури районларынан йәш спортсылар сығыш яһай.

✓Өфөнөң Шаҡша биҫтәһендә "Уфагорсвет" заманса яҡтыртҡыстар ҡуйыуҙы тамамлай. Баш ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, эштәр Волгоград, Йәшел, Май, Әбйәлил, Эҙләнеү, Ҡыйғы, Спорт һәм Шишмә урамдарында алып барыла. Урам фонарҙарын монтажлағандан һуң, предприятие белгестәре "Балалар" скверын төҙөкләндерергә тотона. Шаҡша халҡы урамдарҙы яҡтыртыу мәсьәләһен ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев менән осрашыу барышында күтәргәйне.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

*✓ "Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Күп уйҙарҙан һаҡланығыҙ, сөнки ҡайһы бер уйҙар гонаһ, шымсылыҡ ҡылмағыҙ, бәғҙеләрегеҙ икенселәрегеҙ тураһында ғәйбәт һөйләмәһен".*



БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Асылдан тайпылма

Дөрөҫ йәшәү, тормош итеү рәүеше ҡағиҙәләре күрһәтелгән, күркәм әхлаҡҡа, сафлыҡҡа өндәгән, кешеләрҙең күңел күҙҙәрен асыусы бер нур, имандылар өсөн тура юл булған изге Ҡөрьәндә лә байтаҡ тыйыуҙар тәҡдим ителгән:

- Улар Алланан башҡа икенсе илаһҡа доға ҡылмайҙар, Алла харам ҡылған йәнде хаҡһыҙға үлтермәйҙәр һәм уйнаш ҡылмайҙар. Әгәр берәй бәндә быны эшләһә, язаһын алыр.
- Ысынлап та, Алла гүзәл булырға һәм изгелек ҡылырға, яҡындарға бүләк бирергә ҡуша, зина ҡылыуҙан, тыйылған эште эшләүҙән һәм кешеләргә йәбер-золом эшләүҙән тыя.
- Эй, улым! Намаҙға тор, яраҡлы тип табылған эшкә дәртләндер, яраҡһыҙ эштән тый һәм һиңә нимә ҡағылһа ла сабыр ит... Кешеләр алдында сырайыңды һытма, ер йөҙөндә маһайып йөрөмә. Һәр тәкәбберҙе, маҡтансыҡты Алла яратмай! Йөрөшөңдә самалап, уртаса йөрө, тауышыңды түбәнәйт.
- Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Күп уйҙарҙан һаҡланығыҙ, сөнки ҡайһы бер уйҙар гонаһ, шымсылыҡ ҡылмағыҙ, бәғҙеләрегеҙ икенселәрегеҙ тураһында ғәйбәт һөйләмәһен.
- Һәр хурлыҡлы ант итеүсегә буйһонма: яманлаусыға, ғәйбәт таратып йөрөүсегә, яҡшылыҡтан тыйыусыға, енәйәтсегә, гонаһлыға, тупаҫҡа, быннан һуң нәҫел-нәсәпһеҙгә.
- Һис бер иманһыҙға һәм гонаһлыға эйәрмә.
- Изгелектә һәм тәҡүәкәрлектә бер-берегеҙгә ярҙам итегеҙ, дошманлыҡта һәм гонаһта ярҙам итмәгеҙ.
- Белмәгән нәмәгә эйәрмә! Ҡолағың, күҙең һәм күңелең һине яуапҡа тартыр.
- Етемдәр бәлиғ булғанға саҡлы уларҙың малына яҡын килмәгеҙ, килешеүҙе үтәгеҙ. Етемде йәберләмәгеҙ.
- Үлсәүҙе дөрөҫ ҡылығыҙ, үлсәгән ваҡытта дөрөҫ үлсәгес менән үлсәгеҙ.
- Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Бер халыҡ икенсе халыҡты мәсхәрә итмәһен, ихтимал, тегеләр уларҙан яҡшыраҡтыр, бер ҡатындар икенсе ҡатындарҙан, ихтимал, яҡшыраҡтыр. Үҙ-үҙегеҙҙе хурламағыҙ, ҡушамат исем аташмағыҙ.
- Туғандарға тейешлеһен бир һәм ярлыларға, юлсыларға исраф ҡылма.

Ҡөрьәндә иң мөһиме - Нур. Әле килтерелгән тыйыуҙар был нурҙы көсәйтә, балҡыта ғына. Быны ентекләберәк төшөндөрәйек. Изге Китапта әйтелгәнсә, кем Алланың тыйған нәмәләрен ололаһа, был уға Раббыһы ҡаршыһында хәйерлерәк. Диндарҙарға Уның мөхәббәте шундай даирәлә вә сикһеҙ, бөтә тыйыуҙары ла шәхестә, ғаиләне, йәмғиәтте күркәмләндереүгә, яҡшыртыуға, юғарыға күтәреүгә бағышланған, кешеләрҙе рухи яҡтан камил, бәхетле итеүгә йүнәлтелгән. Тыйыуҙарҙы тотоуға ынтылыу эске нурҙан, яҡтылыҡтан, хәҡиҡәтте төшөнөрҙән, тойорға күңел менән тартылыуҙан килә. Хоҙай Тәғәлә аҡыллы бәндәләрҙе үлем өсөн йәшәргә һәм йәшәү өсөн үлергә өйрәткән. Был күк көмбәҙенән таралған яҡты балҡыш һымаҡ илаһи нур булып "Урал батыр" эпосында ла сағылған.

Үлем күрә алмай ҡаңғырған ҡарт үлемһеҙлеккә бәйле илгә йола булырҙай шундай мәңгелек тыйыу әйтә:

- Донъяла мәңге ҡалам, тип, Донъялай гөмөр һөрәм, тип, Үлемгә буй бирмәҫкә, Аны йола итмәҫкә, Йәншишмәнән эсмәгеҙ, Миндәй хурлыҡ, күрмәгеҙ... Мәңге ҡалам, тимәгеҙ, Йәншишмәнән эсмәгеҙ.

Эпоста раҫланыуынса, "донъяла мәңге ҡалыр эш, донъяны матур төҙөгән, бағты мәңге биҙәгән - ул да булһа яҡшылыҡ".

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ДӘҮЛӘТ ЯРҘАМЫ АЛ!

**Башҡортостанда балаһы тыуған бөтә ғаиләләр ҙә, уларҙың матди хәленә һәм балалар һанына ҡарамаҫтан, дәүләт яғынан матди ярҙамға иҫәп тота ала. Шул уҡ ваҡытта күп балалы, аҙ тәьмин ителгән, яңғыҙ әсәләр һәм инвалид балаларҙың ата-әсәләре өҫтәмә финанс өҫтөнлөктәргә эйә.**



## Йөклө ҡатындарға ярҙам

Әгәр ғаилә йәки ҡатын-ҡыҙ үҙе аҙ тәьмин ителгән тип танылһа, йөклөлөктөң 12-се аҙнаһынан бала тыуыу һәм тәрбиәләү менән бәйле айлыҡ берҙәм пособие түләнә.

2025 йылдан пособие тәғәйенләгәндә 18 йәштән өлкән һәр ғаилә ағзаһының эш хаҡы иҫәпкә алына. Ул минималь эш хаҡының дүрт минималь күләменән кәм булмаҫҡа тейеш (Башҡортостанда 89 760 һум). Әгәр ғаиләлә студенттар йәки инвалидтар булһа, уларға ҡарата был ҡағиҙә ҡулланылмай. Күләме - 8 601 һумдан 17 202 һумға тиклем.

Пособие суммаһы ғаиләнең килеменә һәм төбәктәге йәшәү минимумы күләменә бәйле. Мәҫәлән, түләүҙең төп күләме - 8 601 һум. Ул йән башына йәшәү минимумының 50 процентын тәшкил итә. Әгәр ошо сумманы иҫәпкә алып, ғаилә килеме барыбер минимумдан түбән булһа, ҡатын-ҡыҙға 12 901 һум күләмендә түләү ҡарала (йәшәү минимумынан 75 проценты). Был да етмәһә, 17 202 һум (йәшәү минимумының 100 проценты) билдәләнә.

Пособиены алыу өсөн Рәсәй Социаль фондының БР буйынса бүлексәһенә йәки йәшәгән урын буйынса Күп функциялы үҙәктең офисына мөрәжәғәт итергә, йәки уны Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша юлларға кәрәк.

## Беренсе бала тыуғас

**1.** Бөтә ғаиләләргә бала тыуғанда бер тапҡыр пособие бирелә. Уның күләме - 30 982,97 һум.

Ике һәм унан күберәк бала тыуған/уллыҡҡа алған осраҡта пособие һәр балаға тәғәйенләнә.

Әгәр бала тыуған көнгә ата-әсә эшләй икән, пособие түләгәндә әсәйҙең эш урыны өҫтөнлөклө. Әгәр ата-әсәләрҙең береһе эшләмәһә, пособие эшләгән атай йә әсәйҙең эш урыны буйынса түләнә. Әгәр ата-әсә икеһе лә эшләмәһә, пособиены Социаль фонд бүлексәһенә йәки Күп функциялы үҙәк офисына мөрәжәғәт итергә йәки Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша юлларға кәрәк.

**2.** 1,5 йәшкә тиклемге баланы ҡарау буйынса айлыҡ пособие ла бөтә ғаиләләргә тәғәйенләнә. Эшләмәгәндәр өсөн - 11 619,40 һум. Ике йыл стажы булғандарға уртаса эш хаҡының 40 проценты күләмендә билдәләнә. 2025 йылда пособиеның максималь суммаһы 68 995,48 һумға етеүе ихтимал. Был аҡсаны әсәй ҙә, атай ҙа, шулай уҡ башҡа яҡын туғандары һәм опекундары ла ала ала.

Эшләүсе ата-әсәләргә пособиены Социаль фонд эш биреүселәрҙән алынған мәғлүмәттәр нигеҙендә туранан-тура түләй. Эшләмәгәндәргә Рәсәй Социаль фондына шәхсән йәки Күп функциялы үҙәк йәки Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Эшләмәгән ата-әсәләргә, опекундарға һәм туғандарға пособие ғаиләнең мохтажлығынан сығып тәғәйенләнә. Ғаиләнең килеме һәм мөлкәте, эш хаҡының булыуы йәки уның юҡлығының объектив сәбәптәре ("нуль килем" ҡағиҙәһе, вкладтар буйынса алынған процент рәүешендәге килем) иҫәпкә алына. Шул уҡ ваҡытта ғаиләнең уртаса килеме йән башына йәшәү минимумы дәүмәленән артмаҫҡа тейеш.

**3.** 17 йәшкә тиклемге балалары булған аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә бала тыуыу һәм тәрбиәләү менән бәйле айлыҡ пособие билдәләнә.

2025 йылдан пособие тәғәйенләгәндә 18 йәштән өлкән һәр ғаилә ағзаһының эш хаҡы иҫәпкә алына. Ул минималь эш хаҡының дүрт минималь күләменән кәм булмаҫҡа тейеш (Башҡортостанда 89 760 һум). Әгәр ғаиләлә студенттар йәки инвалидтар булһа, уларға ҡарата был ҡағиҙә ҡулланылмай. Пособие күләме - 7 654,50 һумдан 15 309 һумға тиклем. Мәҫәлән, 17 йәшкә тиклемге балаға түләүҙең төп күләме 7 654,50 һум тәшкил итә. Был - балалар өсөн йәшәү минимумының 50 проценты. Әгәр ошо сумманы иҫәпкә алып, ғаилә килеме барыбер минимумдан түбән булһа, ғаиләгә 11 481,75 һум (балалар өсөн йәшәү минимумынан 75 процент) ҡарала. Был да етмәһә, балаға 15 309 һум (балаға йәшәү минимумының 100 проценты) тәғәйенләнә.

Түләүҙе Дәүләт хеҙмәттәре порталы, Күп функциялы үҙәк офисы йәки йәшәгән урыны буйынса Социаль фонд бүлексәһе аша юлларға мөмкин.

**4.** 18 йәшкә тиклемге балалары булған аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә айлыҡ пособие тәғәйенләнә. Күләме - 233,55 һум һәм унан юғарыраҡ. Уны алыу өсөн ата-әсәләрҙең береһенә йәшәгән урыны буйынса Республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәге филиалына йәки Күп функциялы үҙәккә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**5.** Бөтә ғаиләләргә лә яңы тыуған сабыйҙар өсөн бүләк йыйылмаһы бирелә.

**6.** Аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр йөклө һәм имеҙгән әсәйҙәр махсус аҙыҡ-түлек йыйылмаһы алыу хоҡуғына эйә.

Уны буласаҡ әсәйҙәр - йөклөлөк һәм бала табыу буйынса иҫәпкә ҡуйылғандан һуң киләһе айҙан, шулай уҡ имеҙгән әсәләр, балаға алты ай тулғансы, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр ҡарау тураһында белешмә биргән осраҡта, ала башлай.

Ғаиләне аҙ тәьмин ителгәндәр категорияһына индереүҙе раҫлаған белешмәне Республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәге филиалында, Күп функциялы үҙәк аша алырға мөмкин.

**7.** Тыуғандан алып өс йәшкә тиклемге балалары булған аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә, МХО-ла ҡатнашыусылар балаларына бушлай балалар аҙығы бирелә. Махсус аҙыҡ-түлек йыйылмаһы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә бала ҡарау тураһында белешмә (мәғлүмәт) нигеҙендә һөт кухняларында бирелә.

**8.** Бөтә ғаиләләргә лә балалар лагерҙарына һәм шифаханаларға хаҡының 70 проценты күләмендә ташлама менән путевкалар бирелә. Быны өсөн "Башҡортостан Республикаһының ял һәм һауыҡтырыу өлкәһендә мохтаж һәм хеҙмәттәр менән файҙаланған балаларҙы һәм үҫмерҙәрҙе иҫәпкә алыуҙың берҙәм системаһы" мәғлүмәт системаһында ғариза ҡалдырырға йәки йәшәгән урыны буйынса мәғариф идаралығына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Бала Башҡортостан мәктәптәре уҡыусыһы булырға тейеш. Әгәр бала ғаилә формаһында белем ала икән, ул республика биләмәһендә йәшәргә тейеш.

**9.** 3 йәшкә тиклемге бөтә балаларға һәм 6 йәшкә тиклемге күп балалы ғаиләләрҙәге балаларға рецепт буйынса бушлай дарыуҙар бирелә. Педиатр рецептты өс данала яҙа, шуларҙың икеһен ата-әсәһенә бирә.

**10.** Рәсми эшләгән ата-әсәләргә балаға һалым ташламаһы бирелә. Уның күләме беренсе балаға - 1400 һум.

**11.** Бөтә ғаиләләргә лә беренсе балаға балалар баҡсаһы өсөн ата-әсә түләүенең бер өлөшө компенсациялана. Уның күләме беренсе балаға БР Мәғариф министрлығы бойороғо менән билдәләнгән ата-әсә түләүенең уртаса суммаһының 20 процентын тәшкил итә. Инвалид балаларҙы, етем балаларҙы һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы, туберкулез интоксикацияһы менән сирләгән балаларҙы, шулай уҡ балалар баҡсаһына йөрөгән МХО-ла ҡатнашыусыларҙың балаларын ҡарау өсөн ата-әсә түләүҙәре алынмай. Быны өсөн ата-әсәләрҙең береһе ғариза яҙырға тейеш.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

26

# Ғаиләм-кәлғәм

11-17 ИЮЛЬ (майай) 2025 йыл №27 (1171)

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...



## ҒАИЛӘЛӘ КӨС ҠУЛЛАНЫУ...

**"Ғаилә" республика ресурс үҙәгенә килгән бөтә ҡатын-ҡыҙҙар мөрәжәғәттәренең 80 проценты ғаиләлә көс ҡулланыу менән бәйле. Был хаҡта учреждение директоры урынбаҫары Ангелина Девятерикова һөйләй.**

Уның билдәләүенсә, быңдай проблема имен булмаған ғаиләләрҙә генә осрамай - абьюздан һәм туҡмалыуҙан зыян күргән ҡатындар уңышлы тормош алып барған, бер-нисә юғары белемгә эйә ханымдар, уларҙың ирҙәре лә йәмғиәттә юғары дәрәжә биләгән ир-ат. Ангелина Девятерикова белдереүенсә, ғаиләлә көс ҡулланыу ҡорбандарының 20-25 проценты яңы тормош башларға теләй, ә 75-80 процент араһында тирандарға кире ҡайтыусылар осрай.

Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса совет рәйесе Зөлфиә Ғайсина билдәләүенсә, быңдай мәсьәләләрҙең һәр ваҡыт ике аспекты бар - юридик һәм психологик. "Ғаиләләге низағ факты буйынса административ эштәр ҡаралғанда - был административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында республика кодексында ҡаралған иң ябай административ эш. Әммә күпселек осраҡта административ комиссиялар һәр ваҡыт ниңәләр ике яҡ та ғәйепле тип иҫәпләй, һәм күпселек осраҡта агрессор ҙа, ҡорбан да яуаплылыҡҡа тарттырыла. Минең тәжрибәмдә ирҙе ҡулын күтәргән өсөн, ә ҡатынды көслө итеп ҡыҫҡырғаны өсөн яуаплылыҡҡа йәлеп итеү осраҡтары бар", - тип аңлатты Зөлфиә Ғайсина.

Абьюзерҙы нисек танырға? Табиппсихиатр, психотерапевт Татьяна Иващенко билдәләүенсә, абьюзер ир-егеттәр - йыш ҡына юғары борсолоу тойғоһо кисергән, үҙ-үҙен түбән баһалаған шәхестәр. Улар үҙҙәренең йәмғиәттә лайыҡлы урын ала алмауҙарын башҡа кешене рәнйетеүҙәре менән "баҫа".

Әммә ғаиләлә көс ҡулланыуға ынтылыш амбициялы, уңышлы кешеләрҙә лә бар. Бында төп сәбәп - уларҙың бала саҡта атай-әсәйҙәре тарафынан яҡлау, танылыу алмауында.

Белгес әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың быңдай тирандан китмәүендә психологик реакция ята. Улар ирҙәрен ике кеше - уны рәнйетеүсе "насар" һәм икенсе көнөндә сәскәләр тотоп килгән һәм ғәфү үтенгән "яҡшы" кеше булараҡ ҡабул итә. Улар "яҡшы ирҙең" килеүен, ә "насарының" китеүен көтөп йәшәй. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, хәлдең яҡшыға үҙгәрмәйәсәген ҡорбандар һуңлап аңлай.

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# БАЛАНЫ КЕМ ИТЕП ТҮГЕЛ,

## ниндәй кеше итеп тәрбиәләү мөһим



**Йыш ҡына, тормош ниндәй матур, ҡәҙерҙәрен генә белмәйбеҙ, сабабыҙ, ҡайҙалыр ашыҡҡан булабыҙ, үҙ-ара тәмһеҙләшәбеҙ, күңелдәрҙе ҡыйратабыҙ, бер-беребеҙҙең һаулығын ҡаҡшатабыҙ, ә нимә өсөн, тигән уйҙарға сумам. Тәбиғәттәге аҡлыҡ, паклыҡ, сафлыҡ кешеләр йөрәгенә лә күсһәсе, тип теләйем.**

Беҙ, уҡытыусылар, күп осраҡта үҙ-ара ла, ата-әсәләр менән дә балаларҙың уҡыуҙағы өлгәше хаҡында ғына һөйләшергә яратабыҙ. Ә уларҙың әхлаҡ тәрбиәһе, бер-береһенә, илгә, халыҡҡа, өлкәндәргә, кеселәргә, үҙҙәрен уратып алған барлыҡ тереклеккә мөнәсәбәте тураһында әңгәмә ҡороп өсөн һис ваҡыт еткерә алмайбыҙ.

Һәр халыҡтың үҙ яҙмышы, шул яҙмыштың иң мөһим ваҡиғаларын теркәп барған үҙ тарихы бар. Халыҡ данлы үткәнен, быуаттар буйына йыйылған рухи хазинаһын үҙ күңелендә туплап килгән. Шул рухи байлыҡты барлай башлаһаң, алмас таш кеүек ялтырап торған оло хазина - халыҡ педагогикаһы иғтибарҙы йәлеп итә.

Ҡыҙ баланы бөләкәй саҡтан уҡ йорт эштәренә өйрәткән, киләсәктә әсәй, ҡатын, өләсәй булырға әҙерләгәндәр. Тыйнаҡлыҡ, әҙәплелек, сабырлыҡ, тәүфиҡлы булыу юғары баһаланған. Беҙгә лә ысын ир ҡатыны, балаларының һөйөклө әсәһе булырға ҡыҙҙарҙы бәләкәйҙән өйрәтә башлау фарыз. Ҡыҙ бала янында ҡыҫҡырып өндәшеү, уға ҡарата тупаҫлыҡ күрһәтеү, бигерәк тә ҡул күтәреү үҙен бер нисек тә аҡламай. Уларға өләсәйҙәр тәрбиәһе һалынһын ине. Шул саҡта, бәлки, айырылышыуҙар, никахһыҙ тыуған балалар һаны кәмер ине.

Һуңғы осорҙа айырылған яңғыҙаҡ ҡатын-ҡыҙҙар күбәйеп китте. Был уларҙың ирҙәрҙе артыҡ һанға һуҡмауҙарынан да киләләр. Гүзәл заттар араһында эсеү-тартыу ғәҙәте нығынып бара. Әҙәплелек, изгелек булғанда ғына тормошобоҙ матур, бөтәһе лә етеш һәм тормош иптәштәребеҙ ҙә яҡшы яҡҡа үҙгәрер ине бит. Нәҙәкәтлелек, нескәлек, ир-аттың көслө зат икәнен таныу һәләттәлеген юғалтмаһын ҡыҙҙарыбыҙ. Көсләмән, тип, ирҙәр эшләй торған эште улар ҡулынан тартып алып, йөк аты хәлендә ҡалмаһындар ине.

Ир бала иһә тормош юлында осраясаҡ ауырлыҡтарҙы еңә белергә тейеш. Егет булһа, ебеп тормаҫ, ебеп торһа, егет булмаҫ, тиҙәр халыҡта. Малайҙарҙы йә иркәләтеп, йә юхалап, йә алдынан үҙең төшөп, йә артынан эйәреп ебәреп эшләтеү арҡаһында көслө зат холҡона тормош өсөн яраҡһыҙ ғәҙәттәр һалына. Ә бит тарихҡа әйләнеп ҡараһаҡ, ебегән, ҡатын-ҡыҙҙы һанға һуҡмаған, донъя көтөүҙән ҡурҡып ҡалған, илен, телен, ерен, ғаиләһен ҡурсалай алмаған ир-егеттәр бик аҙ булған. ***Бөгөн беҙгә көслө рухлы ҡаныбыҙҙы уятырға кәрәк. Егеттәребеҙ ил ағаһы урынын биләрҙәй, халыҡ ышанысын аҡларҙай, ата-әсәһе намыҫына тап төшөрмәй йәшәрлек шәхес булып ҡалһын. Был ниндәйҙер юғары пост биләү тигәндә аңлатмай. һәр кем - үҙ урынында ил ағаһы. Баланы кем итеп тәрбиәләү түгел, ниндәй кеше итеп тәрбиәләү мөһим. Бының өсөн үҙнәлеш биреү, тәбиғи һәләтен аса белеү, ышанысын үстереү, хатаһын ваҡытында иплән кенә төҙәтеп ебәреү ҙә етә.***

Сибәр, тәрбиәле бер егет ике ҡыҙҙы ресторанға саҡыра. Бер аҙ ултырғас, ул, күңелһеҙ генә:

- Эйе, ысын ҡатын-ҡыҙ, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, юҡ, - тип уфтана.

- Ә беҙ һуң? - ти әхирәттәр.

- Ресторанға саҡырҙым, машинала алырға килдем. Урынымдан тороп сығырға өлгөрмәнем, һеҙ үҙегеҙ ишекте асып инеп тә ултырҙығыҙ. Ресторанда шул уҡ хәл ҡабатланды. Гардероб янында ла, тиҙ генә сисенеп, үҙегеҙ пәлтәгеҙҙе тапшырҙығыҙ, үҙегеҙ өҫтәл һайланығыҙ, официант ҡулынан менюны алып, үҙегеҙ заказ бирҙегеҙ. Ә мин шул тиклем һеҙҙең күңелегеҙҙе табырға теләгәйнем, - тип яуаплай егет.

Ысынлап та, әгәр эргәбеҙҙә ысын ир-егетте күрергә теләһәк, беҙҙең үҙебеҙгә ысын ҡатын-ҡыҙ булырға кәрәк.

Ғаиләлә бер ниндәй закон ҡалыптарына ла һыйҙырып булмаған иң ҡатмарлы нәмә - ул үҙ-ара мөнәсәбәт. Һәр кемдең үҙ ҡаҙаны, үҙ ашы. Ҡаҙандағы аш тәмле бешһен өсөн бихисап шарттар кәрәк: ирҙең - хәстәрле, ҡатындың таҫтарлы булыуы ғына аҙ, күҙ һуҡырлығынан бигерәк, күңел һуҡырлығы баҫмаһын ул.

Ғаилә ағзаларының мөнәсәбәте бер-береһен ихтирам итеүгә, яратыу һәм бөтә эштә лә бер-береһенә терәк булыуға ҡорола. Ата-әсә балаһына һәр саҡ үрнәк булырға тейеш. Сөнки яҡшы үрнәк йөҙ һүҙҙән дә файҙалыраҡ. Балаларҙың ата-әсәһе менән аралашыуы уға тәжрибә тупларға, тәртип мәҙәниәтенә ылығырға булышлыҡ итә. Әгәр ғаиләлә насар мөхит урынлашһа, тәрбиәгә ауыр биреләүсе балалар, хоҡуҡ боҙоусылар барлыҡҡа килә башлай. "Сусҡаның балаһы ла атаһынан күреп мыркылдарға өйрәнә", - тигән мәҡәл дә бар бит әле халыҡта.

Ата-әсәле ғаиләлә үҫкән балалар изге күңелле, аҡыллы, эшсән була. Шуға ла кешеләргә гүзәл сифаттар - ҡояш яҡтылығынан һәм ата-әсәнең тигеҙ мөхәббәтенән, тип әйтәләр ҙә шул. Бала өсөн өлгө булырлыҡ итеп йәшәргә кәрәк беҙгә.

"...Ете йәшлек малай сағым. Әсәйем ҡаты ауырып китте. Атайым төндәр буйы уның эргәһендә ултырып сыға торғайны. Төндә уянып китһәм, әсәйем ауыр тын ала, ә атайым уның йөҙөнә текәлгән, күҙҙәрендә әйтеп аңлатып булмаҫтай түҙеп торғоһоҙ хәсрәт, һыҙланыу һәм һөйөү. Ҙурайғас, атайымдың тоғролоғон уйлап, уға ихтирамым тағы ла артты. Әсәйем аяҡҡа баҫты. Улар оҙаҡ татыу ғүмер иттеләр. Ғаилә ҡорғас, үҙем дә уларға оҡшарға тырыштым, үрнәк алдым", - тип һөйләгәйне бер ир кеше.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тәүге ауазын ишеттереп, тағы ла бер тынғыһыҙ йән эйәһе донъяға килә. Ғаләм буйлап уны тормош тоташтырыусы, йәшәтеүсе тылсымлы нур һуҙылған. Ошо нурҙың сағыулығын һаҡлау, баланы бәхетле, тәүфиҡлы итеп үҫтереү өсөн ата-әсәнән дә, уҡытыусынан да ҙур көс талап ителә. Тәрбиә эшендә ата-бабалар тәжрибәһенә - халыҡ педагогикаһына мөрәжәғәт итмәйенсә, ниндәйҙер һөҙөмтәләргә ирешеп булалыр, тип уйламайым.**

**Бала өсөн иһә иң абруйлы әхлаҡи өлгө булып ата-әсәһе тора. Ул беренсе булып ғәзиз кешеләренең ғәҙәттәрен үҙләштерә. Ә бала саҡтағы ғәҙәт - ул ғүмерлек.**

**Рузидә ҮТӘШЕВА-КӘРИМОВА,
мәғариф алдынғыһы,
Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.
Сибай ҡалаһы.**

✓ ***Балаларыма шулай тип өйрәтәм: "Әгәр ҙә берәй нәмәгә тотонһағыҙ, уны аҙағына тиклем алып барып еткерегеҙ. Ярты юлда туҡталып ҡалмағыҙ".***

# БЕҘҘЕҢ ӨСӨН шәжәрәбеҙҙәге

(Башы 1-се биттә).

**Марсель, иң тәүҙә шуны белергә ине, буласаҡ ҡатынығыҙ менән ҡасан, нисек таныштығыҙ, ниндәй юлдар һеҙҙе бергә осраштырҙы?**

**Марсель Айрат улы:** Минең атайым һәм Рәйсәнең әсәһе Әлшәй районының Балғажы ауылынан, беҙ 2002 йылда ошо ауыл клубында таныштыҡ. Уртаҡ фекерҙәр, донъяға ҡараштар берлеге беҙҙе бер-беребеҙгә яҡынайтҡандыр. Мин астрономия фәнен ныҡ яраттым. Шуға ла тәү күрешкәндә, беләмме-белмәйемме, әйҙә, йондоҙҙар тураһында һөйләгән булам Рәйсәгә. Ғәҙәттә, китаптарҙан уҡып беләбеҙ бит инде егет һәм ҡыҙ кистәрен күрешкәндә күкте байҡап, йондоҙҙар тураһында әңгәмә ҡорғанды. Мин дә килештергәнмендер инде шулай. Ысынында, әле лә ошо темаға арналған ғилми яҙмаларҙы, икенсе планеталарға сәйәхәт итеүгә арналған фантастиканы ла, яратып уҡыйым.

**Рәйсә Илшат ҡыҙы:** Иң тәүҙә Марселдең аҡыллы, матур итеп, еренә еткереп һөйләүе минең иғтибарҙы үҙенә йәлеп итте. Тәүҙән үк унең етди кеше икәненә, тормошҡа етди ҡарағанына ышандым.

**Әле үткәнгә күҙ һалдыҡ. Һеҙ, Марсель, хыялланырға яратҡан, киләсәккә асыҡ ҡарашы булған егет тип күҙ алдына баҫтығыҙ.**

**Марсель Айрат улы:** Донъяға ҡараш тәрбиәләүҙә уҡытыусынан күп нәмә тора, тип уйлайым. Астрономия фәненән беҙҙе класс етәксебеҙ уҡытты, унең дәрестәре әле лә иҫтә. Ә былай алып ҡарғанда, бала саҡта үҙеңде әллә нисә һөнәр эйәһе итеп күрәһең бит, был тәбиғи. Шулай ҙа бөгөн мине борсоған нәмәләр юҡ түгел. Балаларҙан: "Кем буларға теләйһең? - тип һораһаң, күпселеге: "Белмәйем", - тип яуап бирә. Ә беҙ бәләкәй саҡта осоусы, инженер, янғын һүндереүсе һ.б. һөнәрҙәрҙе атай инек. Әле баланы нисек үҫтерәбеҙ? Уға бишектә биләнгән бала кеүек итеп ҡарайбыҙ. Бала нимә теләй, ата-әсә шуны һатып алып бирә. "Үҙебеҙ бала саҡта уныһы булманы, тегенеһе булманы, балаларыбыҙ шулай үҫмәһендәр",- тип уйлайҙар ҙа, саманан тыш ҡурсалайҙар. Балаға һораған нәмәһен ата-әсә алып бирмәһә, йә ҡартатаһы-өләсәһе, йә ағай-апайҙары алып бирә. Йәғни, бала алдында бөтә нәмә бар, әҙер, унең хатта хыялланырға ла мөмкинлеге юҡ... Беҙ бала саҡта ашарға ла, ҡайһы бер мәл кейем дә етешмәгән ваҡыттар булды. Был хәл беҙгә киләсәккә маҡсат ҡуйырға, шуға табан ынтылырға ярҙам итте.

Мин үҙем уҡытыусы булып эшләгәс, күпте күрәм. Хәҙер балаларға бихисап хоҡуҡтар бирелгән. Беҙ уҡығанда улай булманы: уҡытыусы әйтә икән, ул закон ине - иҙәнде лә йыуаһың, таҡтаны ла һөртәһең. Ә хәҙер тегеләй ярамай, былай ярамай, тип кенә торалар. Хатта ата-әсәләр, беҙҙең балаға эш ҡушмағыҙ, тип килеп ҡыҫылалар. Былай ҙа уҡытыусыны эш хаҡы менән дә, туҡтауһыҙ отчет биреү менән дә ҡыҫалар. Уҡытыусы әлеге ваҡытта бөтә яҡтан да ҡыҫылыуҙарға дусар ителә. Кирәһенсә, уларға ярҙам кәрәк. Элек уҡытыусы шелтәләйме, киҫәтәме - атай менән әсәйгә ҡайтып һөйләү уйҙа ла булманы. Ошаҡлашһаң, кирәһенсә, уларҙан үҙеңә эләгә - һине уҡытыусы юҡҡа әрләмәгән, һиңә юҡҡа асыуланмаған. Мин ата-әсәләр менән һөйләшәм. "Үҙегеҙ нисек уҡынығыҙ, иҫләйһегеҙме?" - тип һорайым. "Заманы икенсе", - тип кенә ҡуялар...

**Бергә тормош башлап ебәреүе ауыр булманымы? Йәштәргә ниндәй теләктәр булыр?**

**Марсель Айрат улы:** Иң элек, ниндәйҙер хата эшләйһең икән, ҡатының алдында ла, балалар алдында ла уны таный белеү кәрәк. Был йәһәттән мин уңдым, Рәйсәнең иң һәйбәт сифаттарының береһе - мине аңлауы. Ниндәйҙер бәхәсле, аңлашылмаған хәлдәр булһа, беҙ һәр саҡ уртаға һалып һөйләшәбеҙ. Кешеләр бит, ғәҙәттә, әрләшә, бер-береһен ғәйепләй башлайҙар. Ә беҙ иһә, фекер алышабыҙ, ни өсөн һин - улай, ни өсөн мин былай эшләнем. Иркенләп һөйләшәбеҙ. Ҡасан була һуң ундай буш ваҡыт? Кис, бөтөн эш-мәшәҡәттәрҙе тамамлап, йоҡлар алдынан, түшәктә иркенләп һөйләшеп ятабыҙ. Туғандар элек нисек аңлашҡандар? Улар өҫтәл янында ҡор йыйып, фекер алышҡандар. Эшлекле һөйләшеү өсөн түңәрәк өҫтәл ҡулай, ул туған-тыумасаны бер-береһенә яҡынайта. Ә ҡатын менән ир кешенең уртаҡ урыны - түшәк. Ир менән ҡатын әрләшәме, дуҫлашамы, һәр саҡ бер түшәктә ятырға тейештәр. Ҡайһы бер йәштәрҙең төп хатаһы шунда, үпкәләшһәләр, кемеһелер ата-әсә йортона ҡайтып китә лә, бер аҙна, бер ай буйы һөйләшмәй йөрөйҙәр. Беҙ иһә бер ҡасан да бер-беребеҙҙән айырылманыҡ.

**Һеҙ биш балаға ғүмер бүләк иткәнһегеҙ. Улар менән дә таныштырып китәһегеҙ ине.**

**Марсель Айрат улы:** Иң оло ҡыҙыбыҙ Аделина Санкт-Петербург ҡалаһында медицина университетында уҡып йөрөй, Илина быйыл унынсы класты тамамланы, Дәүләкәндә Башҡорт гимназияһында белем ала. Етенсе класты тамамлаған Дим улыбыҙ шулай уҡ Башҡорт гимназияһында уҡый, Мәҙинә икенсе класты бөттө. Төпсөк улыбыҙ Иҙел әле балалар баҡсаһына йөрөй.

Һөнәр һайлауға килгәндә, өлкән ҡыҙыбыҙ балалар баҡсаһына йөрөгәндә үк, "табип булам", ти торғайны. Үҙе лә сирләштерҙе, шул да этәргәндер был һөнәрҙе үҙләштереүгә. Һәр хәлдә, маҡсатына тоғро булды. Икенсе ҡыҙыбыҙ Илина уйлана әле. Туғыҙынсы кластан һуң берәй махсус уҡыу йортона инергә уйы бар ине. Мин был ҡарарҙың иртәрәк икәнен һиҙендем, икенсе ят йоғонтоларға бирелеп китмәҫме, тип шикләндем. "Ун берҙе бөткәнсе бында уҡыйһың. Унан инде ҡайҙа теләйһең, шунда уҡырға инерһең", - тинем. Илина шаян, илгәҙәк ҡыҙ, кешеләр менән тиҙ генә уртаҡ тел таба, аралашыусан. Дим иһә бик етди егет, аҙ һүҙле, һорауыңа бер-ике һүҙ менән генә яуап ҡайтара. Хатта йылмайып та бармай, шаярып һөйләшһәң дә, ул хис-тойғоларын бик сығарып бармай. Бер туғаным хатта "ул шпион" тип көлөп тә ҡуйҙы. Мәҙинә - асыҡ ҡыҙыҡай. Кешеләргә бүләк бирергә ярата. Һүрәт төшөрөп булһа ла, бүләк итәсәк ул һиңә. Бәләкәсебеҙ Иҙел шулай уҡ илгәҙәк. Ҡунаҡ килһә, иң беренсе унең алдына менеп ултыра, ҡосаҡлай, үбеп ала. Унең йәшендә Дим, кирәһенсә, кешенән ҡаса ине.

Биш бала - бишеһе биш төрлө. Һәр береһенең күңеленә юл табырға тырышабыҙ. Бәләкәй саҡта әсәйем беҙҙе ҡосаҡлап, яратып ала торғайны, яғымлы һүҙен дә онотманы. Атайым ундай уҡ йылылыҡ күрһәтмәне. Хәҙер аңлайым, атай кеше үҙенең хис-тойғоһон бик күрһәтергә тырышмағандыр. Ә мин иһә балаларымды ҡосаҡлап та, маҡтап та алырға тырышам. Телефонымда ҡыҙҙарымдың исемдәре "Минең королевам", "Минең принцессам" тип кенә яҙылған. Әгәр ҙә атай кеше ҡыҙҙарына йылылыҡ күрһәтмәһә, улар ҡурҡып үҫерҙәр, ир-егеткә ышаныу менән ҡарамаҫтар ине. Ә улдарыма саҡ ҡына ҡатыраҡ була беләм. "Шуны эшләргә, быны эшләргә тейешһең", - тигән талаптар ҡуям.

Мин мәктәптә көрәш түңәрәген алып барам, традицион уҡтан атырға ла өйрәтәм. Етеһигеҙ йәш булғанда улымды көрәш түңәрәгенә йөрөтә башланым. Күнекмәләрҙә ҡарап, һанап торам: унең көрәшергә әллә ни теләге юҡ. "Был көрәш оҡшамаһа, улым, самбоға бараһыңмы?" - тип һораным. "Юҡ", - ти. Волейбол, футбол һымаҡ башҡа спорт төрҙәрен һанайым, ул "Юҡ" тип, баш сайҡай. Һуңынан әсәһенә: "Гитарала уйнағым килә", - тип әйткән. Мин үҙем көрәшсе булғас, улыма ла шул күҙлектән генә ҡарайым, тик спорт яғына ғына баҫым яһайым икән. Баланың икенсе шөғөл менән ҡыҙыҡһыныуы башыма ла инеп сыҡмай. Баланы бит мәжбүр итергә ярамай. Әлбиттә, аңлау килде. Улыма: "Гитарала уйнарға өйрән", - тип әйттем. "Тик берҙән-бер талап, һин мотлаҡ бассейнға йөрөйһөң, сөнки ир бала йөҙә белергә тейеш". Беҙҙең эргәлә генә Дим йылғаһы аға. Унда балалар йыш йөрөй, ҡотҡарыусылар ҙа бар, ләкин балаларҙы Димгә һәр ваҡыт һағайып ҡына ебәрә инек. Йылғала сағында йөрәкте ҡурҡыу ҡыҫып-ҡыҫып ала ине. Улыбыҙ уҡыған Шайморатов класында йөҙөү дәресе бар, дәррәү бассейнға йөрөйҙәр. Байтаҡ ваҡыт гитара менән шөғөлләнде лә улыбыҙ, бер мәл: "Инде ташлайым", - тип ысҡындырҙы. Мин үҙ һүҙемде әйттем: "Ярты юлда бер нәмәне лә ташлап ҡуймайҙар. Маҡсат алғанһың икән, уға мотлаҡ өлгәшергә кәрәк".

Тормошта кемдәрҙе генә осратмайһың. Мәҫәлән, кеше бер эш башлай ҙа, килеп сыҡмаһа: "Эй, минән булмай инде", - тип ҡул һелтәй ҙә ҡуя. Шул рәүешле, унда һуғыла, бында һуғыла, ахыры, бер нәмәгә лә өлгәшмәй. Беҙ, башҡорттар - тәбиғәт балалары, бармы-юҡмы, булғанынан шөкөр итеп йәшәйбеҙ. Ләкин шөкөр иткән үрҙе яулау өсөн дә ныҡышмаллыҡ талап ителә. Балаларыма шулай тип өйрәтәм: "Әгәр ҙә берәй нәмәгә тотонһағыҙ, уны аҙағына тиклем алып барып еткерегеҙ. Ярты юлда туҡталып ҡалмағыҙ".

**Рәйсә Илшат ҡыҙы:** Өйҙәге эште лә шулай бергә эшләп өйрәтәбеҙ. Хеҙмәттән ҡурҡырға ярамай, тибеҙ. Ҡоймаҡ ҡояммы, бәлеш бешерәмме, балалар ихлас ярҙам итәләр. Хатта Иҙел дә ҡоймаҡ ҡойорға булһа, ҡамыр бутай һалып бирә.

**Марсель Айрат улы:** Эйе, балаларҙы эшкә йәлеп итеү - тәү бурыс тип һанала ғаиләбеҙҙә. Димгә, мәҫәлән, эштең иң тоҫо эләкте инде. Быға тиклем беҙ үгеҙҙәр тоттоҡ. Һигеҙ үгеҙ аҫыраныҡ. Баланың теләге булһын, мал ҡарауға яуаплы ҡараһын, тип: "Бер үгеҙ һинеке. Һуйғас, аҡсаһына нимә теләйһең, шуны алырһың",- тинем Димгә. Беҙ уны мәжбүр итмәйбеҙ, ә ул үҙе теләп, мал ҡарау эшен атҡарырға өйрәнде.

Мин үҙем дә - бәләкәй сағымда мал, ҡош-ҡорт ҡарап үҫкән кеше. Әсәйем аяҡ кейеме тегеү фабрикаһында эшләне. Сменалы эш ине. Автобустар ул саҡта бик йөрөмәне. Төнгө сменанан уны атайым барып алып ҡайта. Әсәйем эшкә китер алдынан һәр саҡ өҫтәлдә кем нимә эшләргә тейешлеге хаҡында яҙыу ҡалды-



***✓ Мин үҙем рус мәктәбендә уҡыным. Балалар баҡсаһында ла русса, урамда ла русса... Башҡорт телен ауылға ҡайтҡанда ғына ишетә инем. Өләсәйгә рәхмәт, ул тик башҡортса ғына һөйләште. Мин уның менән башҡортса өйрәндем.***

# ТӨП ӨЛГӘ...

**атай-олатайҙар**

ра торғайны. Марселгә шуны, Айҙарға быны эшләргә... Ҡала фатирында йәшәһәк тә, тауыҡ-өйрәк тоттоҡ. Мәктәптән ҡайтыуға беҙҙе ниндәй эш көткәнен белеп торабыҙ. Һәр эшләгән эште ҡағыҙҙа һыҙып барабыҙ. Бына шулай ҡушылған эшкә яуаплы ҡарап үҫтек.

**Рәйсә, һеҙгә ҡарап, иман юлында икәнегеҙҙе аңлауы ауыр түгел. Дини ғаиләлә үҫтегеҙме?**

**Рәйсә Илшат ҡыҙы:** Әхирәттәрем араһында дини ғаиләлә тәрбиәләнгәндәр бар ине. Шулар йоғонтоһонда дин менән ҡыҙыҡһына башланым, артабан мәсеткә йөрөп, иман юлында белемемде нығыттым. Тормош үҙе мине ошо юлға алып килде.

**Марсель Айрат улы:** Мин ул көндө лә яҡшы хәтерләйем. Мин эштә инем, бер мәл Рәйсә шылтыратты: "Марсель, мин намаҙ уҡый башлайым, рөхсәт итәһеңме?" "Үҙеңдең теләгеңдән тора. Мин һиңә "юҡ" тип тә, "эйе" тип тә әйтә алмайым", - тип яуап бирҙем. Аллаһ Тәғәлә менән бәйләнеш - тик кешенең үҙенең шәхси эше. Был, ысынлап та, шулай. Бер ни тиклем ваҡыттан: "Мосолманса кейенеп йөрөйөммө?" - тип һораны. Унда ла: "Бары тик үҙең генә хәл итә торған ҡарар был", - тинем. Артабан үҙем дә намаҙ уҡый башланым.

Иман юлын һайлауҙың тағы ла бер сәбәбе бар, беҙ үҙебеҙҙең шәжәрәләребеҙҙе ныҡлап өйрәндек, шул да булышлыҡ итте был юлға баҫырға. Ни өсөн беҙҙең йөрәккә дин йомшаҡ итеп, матур итеп килеп инде, тип уйлай инек. Ике яҡтан да, атайҙарыбыҙ яғынан да, әсәйҙәребеҙ яғынан да, беҙҙең ата-бабалар дин әһелдәре булғандар. Әсәйем яғынан ҡартатайҙарҙың хәрби булғандарын асыҡланым. Улар - тархандар. Ҡәнзәфәр бей менән бергә йөрөгәндәр, ғилемле, уҡымышлы заттар. Хатта фамилиябыҙ ҙа Ғәлимов бит.

Йәйҙәрен атай менән әсәй һәр ваҡыт ҡустым менән мине ауылға өләсәй янына илтеп ҡуялар ине. Ул мулла ҡыҙы. Революциянан һуң ҡартатай, ғаиләһен алып, Урта Азияға китә, Ҡырғыҙстандың Ош ҡалаһында канал ҡаҙыуҙа ҡатнаша. Һуғыш башланғас, фронтҡа китә һәм хәбәрһеҙ юғала. "Балаларҙы алып, ауылға ҡайт", - тип ҡатынына әйткән була. Һуғыш йылдарында ғаилә ауылға әйләнеп ҡайта. Тик өләсәйҙең әсәһе һәм иң бәләкәс ҡыҙҙары ағыулы башаҡ ашап үләләр. Беҙҙең өләсәйҙе һәм кесе туғаны Шәмсунды Шафран балалар йортона алып барып бирәләр. Ә өләсәйем детдомдан ҡаса, туғаны Шәмсунды санаға ултыртып, егерме километр ҡар кисеп, ауылға кире ҡайтып инә.

Эйе, өләсәйем көслө, көрәшсе рухлы кеше ине. Һәр саҡ: "Мин Хөсәй мулла ҡыҙы бит әле",- тип, үҙенең ябай кешенең балаһы түгеллеген һыҙыҡ өҫтөнә ала торғайны. Хөрмәт итеп "Хөсәй ҡыҙы" тип йөрөтәләр ине уны белгәндәр. Ауылға ҡайтҡанда шуға иғтибар итә инек, өләсәй: "Ен инмәһен",- тип уҡынып, һәр саҡ ишекте бикләп, бысаҡ тығып ҡуя торғайны. Каникулдан ҡайтҡас, йоҡо бүлмәһендә йоҡларға ятҡас, ҡустымдан: "Ишеккә бысаҡты ҡыҫтырҙыңмы?" - һорайым. "Юҡ, онотҡанмын", - тине лә Айҙар, йүгереп барып ишеккә бысаҡ ҡыҫтырып ҡуйҙы. Иртәнсәк торһаҡ, әсәйем: "Өләсәйҙәренән күреп, ишеккә бысаҡ тығып ҡуйғандар, ниңә улай итәһегеҙ!" - тип һуҡранып йөрөй.

Ғаиләбеҙ өсөн эшләгән кәрәкле эштәрҙең береһе - тамырҙарыбыҙҙы барлау. Мин дә, ҡатыным да ҡартатайҙар, өләсәйҙәр яғынан, тимәк, дүрт яҡтан, шәжәрәләребеҙҙе төҙөнөк. Һигеҙ-туғыҙ быуыныбыҙҙы беләбеҙ. Бөтә яҡтан да беҙ башҡортбоҙ. Ошо ғорурлыҡты балаларыбыҙҙа ла тәрбиәләргә тырышабыҙ.

**Шәжәрә төҙөү уйламаған, белмәгән тарихтарҙы асырға ла булышлыҡ иткәндер...**

**Марсель Айрат улы:** Шундай тарихтарҙың береһе - ҡартатайымдың апаһы Гөлнәзирә әбейҙең ҡыҙын табыу булды. Һуғыштан һуң Гөлнәзирә апаһы менән Үзбәкстанға сығып китә, шунда ҡаҙаҡ кешеһенә кейәүгә сыға, уларҙың Мөхәббәт исемле ҡыҙҙары тыуа. Гөлнәзирә әбей, ауырып киткәс, бәләкәс ҡыҙын алып, кире ауылына ҡайта, һауыға алмай, шунда үлеп ҡала. Мөхәббәт апайҙың атаһы килеп, ҡыҙын үҙҙәренә алып ҡайтып китә һәм шунан ары бәйләнеш өҙөлә. Мөхәббәт апайыбыҙ тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ ине. Бары исеме һәм тыуған йылы ғына билдәле. Аҙаҡҡы биш йылда туҡтауһыҙ эҙләнем. Бәлки, Ҡаҙағстандалыр, тип, ошо республиканың Эске эштәр министрлығына ла яҙҙым. Үзбәкстанға мөрәжәғәт иттем. Хатта мошенниктар ҙа килеп сыҡты шул ваҡыттарҙа. Берәү ватсаптан: "Туғанығыҙҙы таптым", - тип яҙҙы. Өс мең генә аҡса һорай. Мин шатланып киттем. Нимә инде өс мең аҡса! Ебәрәм, тип уйлайым. Шунан башыма шик төштө. "Туҡта, ниндәй ҡаланың исемен яҙҙы әле?"- тип, компьютеры асып, интернеттан эҙләйем: Үзбәкстанда ундай ҡала ла, урам да теркәлмәгән. Тегегә: "Ундай атамалар юҡ, яңылыштығыҙмы, әллә алдайһығыҙмы?" - тип яҙҙым. Ул һүгенеп кенә яуап бирҙе, шуның менән бәйләнеште өҙҙө.

Себерҙә йәшәгән Алһыу туғаныбыҙ Үзбәкстандан бер ағай менән таныша, ә уның кешеләрҙе эҙләү менән шөғөлләнгән ирекмәндәре бар икән. Шуларға йөҙ доллар күсерҙем, тап улар Мөхәббәт апайҙы таптылар. Былтыр беҙ апайыбыҙ янына барып ҡайттыҡ. Быйыл Мөхәббәт апай әхирәте менән үҙе беҙгә килде. Дәүләкәнде, Өфөнө күрһәттек. Салауат Юлаев һәйкәленә алып барҙым. "Бына беҙҙең шундай батырыбыҙ булған", - тип һөйләйем. Ә улар берсә Салауат һәйкәленә, берсә Ағиҙелгә, йәнә йәшеллеккә ҡарайҙар. "Үәт мөғжизә! Был бит ожмах!" - тиҙәр. Мөхәббәт апай: "Быңдай йәшеллекте бер ҡасан да күргәнем булманы. Үзбәкстанда быңдай йәшеллек тә, быңдай йылға ла юҡ",- тине. Асылыкүлде күрһәттек. Аптырап йөрөнөләр. "Бында ағас аҫтында бер төн йоҡлап алыу минең хыялым", - ти Мөхәббәт апай. Баҡтиһәң, апайым башҡорт халҡы тураһында ла, Башҡортостан хаҡында ла бер ни ҙә белмәгән икән. Улар йәшәгән ерҙә сит милләттәрҙе бик яратмайҙар икән. Уларҙы татар тип уйлағандар. "Беҙ Себер, Ҡаҙан, Ҡырым татарҙары барлығын белә инек. Мине "татар" тип кәмһетәләр ине. Мин ояла инем", - ти. "Данлы тарихыбыҙҙы ишеттең. "Мин - башҡорт!" тип күкрәк һуғып йәшәргә тейешһең", - тинем апайыма.

**Был донъяла үҙ урыныңды табыу юлы төрлөсә була. Иман, әҙәп, әхлаҡ төшөнсәләре һәр саҡ алға сыға. Бында ғаиләлә дини тәрбиә тигән һүҙҙән ситкә китә алмайбыҙҙыр...**

**Рәйсә Илшат ҡыҙы:** Беҙ балаларҙы, дин тотоғоҙ тип, көсләмәйбеҙ. Кеше үҙе күңеле менән хәҡиҡәтте ҡабул итергә әҙер булырға тейеш. Әлбиттә, иң кәрәкле сүрәләрҙе беләләр. Балалар беҙҙең намаҙ уҡығанды күрәләр, ҡабатлайҙар.

**Марсель Айрат улы:** Мин иң элек балаларҙы нимә яҡшы, нимә насар, шуны айырырға өйрәтергә һәм ни өсөн икәнен аңлатырға кәрәк, тип уйлайым. Көсләп намаҙға баҫтырһаң, ҡайҙалыр сығып китәләр икән, улар был ғәмәлде онотасаҡ. Беҙ дингә үҙебеҙ аңлап, әҙер булып килдек. Балалар ҙа был юлға үҙҙәренең башыйөрәге менән ҡабул итеп килергә тейештәр. Атай булараҡ та, уҡытыусы булараҡ та, ата-әсәләр йыйылышында даими ҡатнашам. Төрлө дин тотҡан кешеләрҙең балалары уҡый. Ҡайһы саҡ уларҙың да балаларының тәртибе насар, тип шелтәләйҙәр. Быны ишетеүе ҡыйын. Ә бала-сағаның күбеһе телефон ҡоллоғонда үҫә: блогерҙар нимәгә генә өйрәтмәйҙәр ҙә, нимәгә генә ышандырмайҙар. Ә бала тиҙ генә бирелә насар йоғонтоға. Шуға ла уларҙы ошо йоғонтонан һаҡларға, һәр кемдән тәртипле, әҙәпле булыуҙы талап итергә кәрәк. Балаларҙы спорт буйынса күнектерәм бит инде, ҡай саҡ кемелер: "Һеҙ беҙгә баҫым яһарға тейеш түгелһегеҙ", - тип әйтеп ҡуя. "Мин баҫым яһамайым, мин өйрәтәм!" - тием. Оҫтаның, тренерҙың өйрәтеүе ата-әсәнекенән айырыла, әлбиттә. Улар үҙҙәре һуңынан минең менән ризалашалар. Шәкерттәрем күп, уҡып бөтөп минән киткәндәр менән дә араларҙы өҙмәйем.

Музейҙағы эш икенсерәк, унда төрлө яҡтарҙан килгән ҡунаҡтар менән эш итәһең. Музей эшен еңел, тип әйтмәҫ инем. Район хакимиәте менән даими бәйләнеш тоторға кәрәк, улар ҡушҡанды ла, булдыраһыңмы-юҡмы, ваҡытың бармы-юҡмы, сифатлы итеп, еренә еткереп эшләргә тейешһең.

**"Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" асыҡ республика конкурсында ҡатнашыу тарихы нисек булды? Өфө төбәгендә әлегә Дәүләкәндән берҙән-бер еңеүсе һеҙҙең ғаилә бит әле...**

**Марсель Айрат улы:** Эйе, беҙҙең Өфө төбәгендә әүҙем, алдынғы ғаиләләр күп, "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" конкурсында ҡатнашып, һәр саҡ призлы урын яулайҙар. Шуға ла Ғәлимовтар ғаиләһенең ошо ярышта Гран-при алыуына күптәр аптырай. Ә ҡатнашыуыбыҙ көтөлмәгәнсә килеп сыҡты, тиһәм, дөрөҫөрәк булыр. Беҙҙе Дәүләкән ҡала хакимиәтенә саҡырып, конкурста ҡатнашырға тәҡдим иттеләр. Дәүләкәндә күп бала тәрбиәләгән, уңған, әүҙем ғаиләләр бар, әлбиттә. Ләкин был ярышта ҡатнашыр өсөн айырым талаптар ҙа ҡуйылған. Беҙҙең ғаилә иһә бөтә төр сараларҙа, йәмәғәт эштәрендә, ярыштарҙа даими ҡатнаша килә. Тәүге турҙы Дәүләкәндә уңышлы үттек, унан дөйөм Өфө төбәгендәге һайлауҙан да үтә алдыҡ. Артабан Стәрлетамаҡҡа юл алдыҡ. Шуныһы ҡыуандыра, балаларыбыҙ бик ихлас ҡатнаштылар. Финалға сыҡҡан дүрт ғаилә араһында беҙ еңеүсе булдыҡ.

**Тренер йәш быуын менән араны өҙмәй, уларҙан бына тигән спортсылар әҙерләй. Был яуаплы бурыстың үҙ ауырлыҡтары барҙыр бит?**

**Марсель Айрат улы:** Тренер, бер һүҙһеҙ, баланы спорт ярыштарында ҡатнашырлыҡ итеп әҙерләргә тейеш. Уларҙы аҙна һайын тиерлек төрлө ярыштарға йөрөтәбеҙ. Бер атай кеше: "Мин баламдың бер тапҡыр көрәшкәнен ҡарап ҡына ла уның өсөн йәнем сыға яҙа. Ә һин ун биш-егерме бала өсөн көйәһең-янаһың, йөрәгең нисек түҙә?"- тип аптырай. Ете-һигеҙ йәшлектәр менән эшләүе ныҡ ҡыйын, улар бер урында тора белмәйҙәр. Йә талашып-һуғышып китәләр. Береһе илай, икенсеһе йырлай, өсөнсөһө телефонға йәбешкән... Уларҙың иғтибарын үҙеңә йәлеп итергә, улар артынан йөрөргә кәрәк. Ныҡ арып ҡайтам, әлбиттә.

**Рәйсә Илшат ҡыҙы:** Беҙ уның хәлен аңлап торабыҙ. Марселгә аҙ ғына булһа ла ял итеп алырға, үҙен ҡулға алырға, тынысланырға, яңынан көс йыйырға кәрәк. Шундай мөмкинлекте тыуҙырабыҙ. "Атайығыҙға ял бирегеҙ", - тип кенә торам балаларға ла.

**Марсель Айрат улы:** Күп йылдар тренер булып эшләү тәжрибәһенән сығып, шуны әйтә алам, тәрбиәләнеүселәрем араһында атайһыҙ үҫкән баланы миңә айырыуы ауыр түгел. Уларға ирҙәргә хас ныҡлыҡ, тәүәккәллек етешмәй. Умыртҡа һөйәге ныҡ түгел, тип әйтәйемме... Тренировка мәлендә йығылһа, уны хәҙер йәлләрҙәр, тип, көтөп ята ул. "Тор, ҡыҙҙар кеүек үҙеңде йәлләтеп ятма. Аяғыңа баҫ, көрәш, шөғөлләң!" - тип, талапсан, ҡәтғи өндәшһәм, "Мине йәлләргә кәрәк", тигән сырайы шундуҡ юҡҡа сыға.

**Балаларҙы тәрбиәләүҙә ниндәй талаптарҙы алға ҡуяһығыҙ?**

**Марсель Айрат улы:** Иң тәүҙә, туған телде белергә тейештәр, тигән талап ҡуйыла уларға. Мин үҙем рус мәктәбендә уҡыным. Башҡорт теле уҡытылмай ине ул ваҡытта. Балалар баҡсаһында ла русса, урамда ла русса... Башҡорт телен ауылға ҡайтҡанда ғына ишетә инем. Өләсәйгә рәхмәт, ул тик башҡортса ғына һөйләште. Мин уның менән башҡортса өйрәндем. Кешеләр менән башҡортса һөйләшһәм, "Һин Дим башҡорто, эйеме?" тиҙәр. "Дим башҡорто икәнемде ҡайҙан беләләр, мин бит саф башҡорса һөйләшәм", - тип аптырай инем. Беҙҙе диалекттан айыралар икәнен белмәй инем әле.

Әле беҙ өйҙә ремонт эшләйбеҙ, уның тап башҡорт өйө икәне күренергә тейеш, Урал батыр тураһында һүрәт һәм беҙҙең шәжәрәләр эленеп торһон, тип талап ҡуйҙым ҡатыныма. Был да дөрөҫ талап, тип уйлайым. Балалар бит ошондай атрибуттарға ҡарап та милли рухта тәрбиә алалар. Улыбыҙ Шайморатов класында уҡығас, уға эйәреп, мин дә үҙемә Шайморатов костюмын тектерҙем.

Бына шулай, балаларҙы үҙебеҙҙең өлгөлә тәрбиәләйбеҙ, тиһәк, дөрөҫ булыр. Алда әйткәнебеҙсә, мал тотабыҙ, бергәләп баҡсала эшләйбеҙ. Ата-әсәләребеҙ беҙҙе нисек хеҙмәт тәрбиәһендә үҫтергәндәр, беҙ ҙә шундай тәрбиәне дауам итәбеҙ. Ни өсөн? Сөнки эшләп үҫкәндә генә балалар берҙәмлеккә өйрәнә, бер-береһенә ярҙам итә һәм терәк булалар. Ҡыҙҙарҙы әсәһе ҡыҙҙар эшенә өйрәтһә, улдарҙы ир-егет эшенә өйрәтеү - минең өҫтә. Улар бер-береһен хөрмәт итеп, яратып үҫергә тейештәр.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *"Зәңгәр томандар артында" әллә ҡасан уҡ ятып ҡалған монарға үрелеп, ҡулыңдағы ысын бәхетеңдән яҙып ҡалыуың бар, бына нимәһе ҡурҡыныс.*



СЕТЕРЕКЛЕ МӘСЬӘЛӘ

**Һәр саҡ тиерлек "ысын мөхәббәтте" данлаған һинд фильмдарын әҫәрләнеп ҡарамаған кеше юҡтыр. Бәғзе берәү "Әй, әкиәт бит ул..." тип, шундай киноға ышанмай, хатта уны ҡарамаҫҡа ла тырыша. Әммә тормошта ысынлап та оҡшаш хәлдәр була икән ул. Бер нисә йыл элек, "Йәшлек" гәзитендә "Зәңгәр томандар артында..." исемле мәҡәлә баҫылып сыҡҡайны. Шул әҫәр һаман хәтеремдән сыҡмай. Мәҡәләнең төп геройҙарының тормошо хаҡында уйланып, ошоға борсолоп йөрөнөм. Борсолорлоҡ та шул. Баныу Ҡаһарманова тарафынан бик оҫта итеп һүрәтләнгән шул ваҡиғалар "тере генә" булып күҙ алдына килеп баҫа. Берәй уйлап сығарылған хикәйә-маҙар булһа, әлбиттә, быға әллә ни әһәмиәт тә бирмәгән булыр инем...**

# ЭЛЕККЕ МӨХӘББӘТТЕ ҠАЙТАРЫУ КӘРӘКМЕ?



Мәҡәләнең төп геройы - Зилә исемле ҡатын (исемдәр үҙгәртелгән), ысынлап та, ғәйәт бер сетерекле хәлгә тарый. Шул хаҡта мәҡәлә авторына үҙенең эс серҙәрен сисеп һала ул. Бала сағынан бер Илсаф исемле малайҙы оҡшатып, бер аҙҙан өҙөлөп ярата башлап, мәле еткәс, уны бер кис кенә "иркәләп" әрмегә оҙатып ҡала. Унан төрлө сәбәптәр арҡаһында ҡабаттан бер ҡасан да осратмаған ул һөйгәнен. Илсаф та, Зилә лә үҙҙәренә башҡа-башҡа һыңар табып, ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп, тыныс ҡына йәшәй башлай. Уларҙы ҡасандәр "һуштарынан яҙҙырған" әлеге төн хаҡында ла уйланмай, һәр кемеһе үҙ ғаиләһе мәшәҡәтенә сумып, әллә күпме йылдар ғүмер итә бирә. Әммә, әлеге әйтмешләй, тормош юлдары ифрат ҡатмарлы, донъя ла әллә ни киң түгел икән шул. Зиләнең улы әллә ҡайҙа, бөтөнләйгә башҡа район үҙәгендә йәшәгән әлеге Илсафтың ҡыҙы Нәфисә менән танышҡан, хатта өйләнешергә лә булғандар! Ҡыҙҙы һората барғанда инде нисәмә тиҫтә йылдар күрешмәй торған Илсаф менән Зилә бер-береһен ҡабаттан табыша. Ул ғына ла түгел, әллә ҡасан "зәңгәр томандар артында" ятып ҡалған "тәүге мөхәббәттәрен" иҫләп, бер-береһен яңынан һағыныша башлай...

Ҡоҙа менән ҡоҙағый телефон аша бәйләнеш тота, һөйөү һүҙҙәре лә әйтешәләр. Илсаф ҡоҙаһы хатта Зиләне уның законлы иренән "үлеп көнләшә", тәүге ялҡынлы мөхәббәте хаҡына "бер нимәгә ҡарамай ҡауышайыҡ та ҡуяйыҡмы", тип, талпына бирел тә ҡуя. Бер аҙ ныҡыша бирһә, Зиләһе лә ризалыҡ бирмәҫ тимә!.. Автор әйткәндәй, "һөйөү бер генә була, ҡауышһағыҙ - ҡауышығыҙ ҙа ҡуйығыҙ", тип берәү кәңәш иткән хәлдә, ана шул яҡҡа ауышырға ғына тора мөхәббәттән иҫергән был ҡатын. "Туҡтатырға кәрәк был ғишыҡ-мишыҡты. Һин нисек уйлайһың?" - тигән булып, авторҙан кәңәш һораған кеше була Зилә. Икеләнеп торған был ҡатынды һаҡ ҡына итеп: "Зилә апай, бөтә нәмә лә үтә", - тип, тынысландырырға тырыша йомшаҡ күңелле автор. Әммә һөйөү утында янған героинябыҙ әллә ни тынысланырға уйламаған һымаҡ...

Был хаҡта бер ни ҙә белмәгән улы, киленe ошо мәлдә татыу-татлы ғына йәшәп ята (бәлки, инде бәпес тә көтөләрҙер). Зиләнең бер аҙ ғына һалҡынрыраҡ, әммә баҫалҡы, тыныс холоҡло ире Барис, өндәшмәһә лә, улына, килененә һөйөнә, ҡартатай булырға ла өмөтләнәләр. Нәфисә килендең әсәһе - ҡоҙағый ҙа (Илсафтың хәләл ефете) ҡыҙына бәхет теләй, ул да өләсәй булыу хыялы менән яналыр, тыуасаҡ ейән йәки ейәнсәренә бүләккә йүргәк-маҙар ҙа йыя башлағандыр... Бына ошондай хәлгә тарыған "ғишыҡтарға" ҡапыл да ниндәйҙер файҙалы кәңәш биреүе ауыр. Автор урынында бер-бер уҫалыраҡ кеше булһа, әлбиттә, һис кенә лә оҙаҡ уйлап тормаҫтан: "Олоғайған көнөңдә, "мөхәббәт" тип ауыҙыңды ла асаһы булма, бөгөндән уҡ Илсаф ҡоҙаң менән арағыҙҙы һыуытыу яғын хәстәрлә!" - тип, ҡырҡа һуғыр ҙа ҡуйыр ине, моғайын...

...Дүрт тиҫтә йыл элек (ун дүрт йәштәрендә генә) танышҡан был һөйәркәләргә бөгөнгө көн нисә йәш икәнен иҫәпләп сығарыу ҡатмарлы түгел: хәҙер улар кәмендә илле бишен ҡыуып китеп барған оло кешеләр булып етешкән. Ана шуларҙан да күпкә олораҡ, инде "аҡһаҡал" ҡорона ингән кеше булараҡ, ошо хаҡта үҙемдең фекеремде лә белдермәк булам. Әйтәйек, Зилә, бер нәмәгә ҡарамай, Илсаф ҡоҙаһы менән ҡауышты икән, ти. Был осраҡта (тураһын әйтеү кәрәк) улар йәш саҡтарындағы хатаһын тағы ҡабатлаясаҡ, кемдер әйтмешләй, "икенсе мәртәбә бер үк тырмаға баҫасаҡ"! Дөрөҫөн генә әйткәндә, был ике ғишыҡтың артабан бәхетле йәшәп китеүен мин күҙ алдына килтерә алмайым. Уларҙың тик бер кискә генә оло бәхет тойғоһо кисереүе ихтимал. Ярай, әйтәйек, бер-береһен күреп түҙә алмай, бер нисә көн йәшәп тә алдылар икән, ти. Йә, шунан?.. Артабан - ел дә буран! Бик күп яҡынын бәхетһеҙ итәсәк улар.

Әле генә яңы тормош башлаған йәштәр - уларҙың балалары өлкәндәрҙең был ҡылығын алҡышлап, сәләмләп ҡабул итерме икән? Минеңсә - тап киреһе буласаҡ! Йәш ғаиләнең тормошо мотлаҡ боҙоласағын күҙаллауы ауыр түгел... Аҙ һүҙле, әлеге йыуаш Барис та: "Мөхәббәт - мөхәббәт инде, әйҙүк, ҡоҙа, мин һинә ҡатынымды тапшырам, бәхетле йәшәгеҙ..." - тип, ҡоҙаһына хөрмәт йөҙөнән Зиләһен "тотторол" ебәрмәҫ, моғайын. Йыуаштан йыуан сыға, тигәндәй, ир-ирлеген итеп, оло бола сығарауы ла ихтимал. Ә инде үҙен өләсәй тип хис итеп, татлы хыялдарға бирелгән ҡоҙағыйы - Нәфисә килендең әсәһенең хәле хаҡында әйтеп тораһы ла юҡтыр... Ҡыҫҡаһы: ваҡытында шул "ғишыҡ-мишыҡ" хистәр тыйылмаһа, "уны, мине, үҙенде лә бәхетһеҙ итәһең бит" тип йырҙа йырланған һымаҡ, ошо мәҡәлә геройҙарының барыһы ла оло бәхетһеҙлеккә тарыясаҡ. Ҡабаттан ҡауышыу түгел, хатта олпат йәштәге был "ҡоҙа" менән "ҡоҙағый"ҙың ҡасандыр булған үҙ-ара мөнәсәбәте хаҡында яҡындарының бөтөнләйгә белмәүе хәйерләрәк. Шунлыҡтан, олоғайған көнөндә "башын юғалтҡан" был ҡатынға - Зиләгә, тағы ниндәйҙер аҡыллы кәңәш өмөт итеп, был хаҡта башҡалар менән бүлешеү тураһында уйларға ла ҡурҡыу кәрәк...

"Зәңгәр томандар артында" әллә ҡасан уҡ ятып ҡалған монарға үрелеп, ҡулыңдағы ысын бәхетеңдән яҙып ҡалыуың бар, бына нимәһе ҡурҡыныс. Бала-сағалар үҫтереп, уларҙы башлыҡҡа күҙле итеп, шул гәзиздәреңә ҡарап шатланып йәшәү мөмкинлеге булыуы - үҙе бер оло бәхет бит ул. Шуға күрә лә, бөгөнгө хәле менән ризалашып, хатта уның өсөн шөкөр итеп, Аллаһ Тәғәләнән балаларына иман, һаулыҡ, бәхетле тормош һорап, законлы хәләл ефете Барис менән үҙенә тыныс ҡартлыҡ теләп, шунан ҡәнәғәтлек табып, артабан ғүмер итергә тейеш Зилә һылыу.

...Ҡасандыр йәш сағында, ҡурыстар әйтмешләй, "роман"дары булған ҡатын һәм ирҙәр тирә-яҡта күп бит ул. Хатта береһе ирһеҙ, икенсеһе ҡатынһыҙ ҡалып, олоғайған көндәрендә "иректе" булып киткәндәр ҙә бына ошонoң һымаҡ мәсьәләгә ифрат һаҡ ҡараштa. Бер-береһе менән ҡабаттан табышып ҡауышҡан бындай парҙарҙың да һин дә мин, "бәхеткә сумып" йәшәп киткәндәре бик-бик һирәктер. Әллә нисәмә тиҫтә йылдар элек ике йәш йөрәккә бер-береһенең һөйөүенән, наҙынан башҡа бер нәмә лә кәрәкмәгән булһа, инде оҙон тормош юлы үткән оло кешеләрҙең донъяға ҡарашы ла бөтөнләйгә башҡаса формалашып бөткән була бит. "Һөйгәнең менән бергә саҡта ҡыуыш та ожмах була", тип урыҫтар әйткән мәҡәлде инде был йәштәге кешеләргә ҡулланып та булмай. Һәр кемеһенең үҙ хәстәре: бала-сағаһы, йорт-ҡураһы, хатта ниндәйҙер берәй (йәки бер нисә) хроник сире лә тигәндәй... Үҙҙәре лә олоғайып барған балаларҙың күптәре атаһын, әсәһен башҡаларҙан ҡыҙғаныусан булыуы да күҙ уңынан ысҡындырыу ярамай. Бына ошондай сетерекле мәсьәләнең нескәлектәрен аңлай белгән "элекке ғишыҡтар"ҙың күптәре күрше ауылдарҙа (хатта бер ауылда ла!) әллә ни ҡымшанмаҫҡа тырышып, бер-береһен "күрмәй", тыныс ҡына йәшәп ята. Бәғзеләре хатта: "Алай ҙа ана шуға сыҡмағанмын (йә шуны алмағанмын), ана бит, ҡалай булып киткән...", тип, ҡыуанып бөтә алмай. Һәр кемеһе үҙ балаһын яҡын күреп, гәзиздәренең бәхетен ҡайғыртып, ғүмер һөрә. Мин дә ана шул яҡлымын. Ошо осраҡта, кемдер, ҡасандыр уйлап сығарған "мөхәббәт бер генә", тигән нәмәне күңелдәрҙән алып ташлау кәрәк. Шунһыҙ - эш харап! Инде хәҙер һәммәбеҙ ҙә йәш, тинтәк сағыбыҙҙы иҫләп, шул иҫәр ваҡыттарҙы кире ҡайтарырға ынтыла башлаһаҡ, донъяның аҫты өҫкә килер бит, Аллаһ һаҡлаһын! Хәйер, әлеге "һөйөү менән янған" Зилә, хатта Илсаф та, үҙҙәре үк хәҙер бына ошондай фекергә килерҙәр, бәлки, ә мин юҡҡа ғына борсоламдыр, тип уйлап, үҙ-үҙемде тынысландырырға тырышам тағы....

**Хәлил ҺӨЙӨНДӘКОВ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ӨЛӘСӘЙ-ОЛАТАЙҒА ЛА БИРӘЛӘР



Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында яугирҙың Махсус хәрби операцияла һәләк булыуына бәйле түләү алыусылар тураһында закон ҡабул ителде. Республика парламенты спикеры Константин Толкачёв һүҙҙәренсә, бәлиғ булмаған балаларҙың аҡса алыуға өҫтөнлөклө хоҡуғы һаҡлана, сөнки улар матди ярҙамға нығыраҡ мохтаж. "Закон менән бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам алыусылар даирәһе киңәйтелде, - тине Константин Толкачев. - Әгәр һәләк булған яугирҙың башҡа ғаилә ағзалары булмаһа, уның бәлиғ булған балаларының 2 миллион һум алыу хоҡуғы бар. Аҡса тигеҙ өлөшкә бүлеп бирелә". Законға Башҡортостан Республикаһы Башлығының ҡул ҡуйыуы көтөлә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ғәмәлдәге ҡануниәт буйынса һәләк булған (үлгән) хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаилә ағзалары: рәсми ҡатыны, әгәр Махсус операцияға шәфҡәт туташы булып ҡатын-ҡыҙ китһә, уның рәсми ире; ата-әсәһе йәки уллыҡҡа алыусылар; өләсәһе һәм олатаһы, әгәр ата-әсәһе булмағанлыҡтан, өс йылдан ашыу тәрбиәләгән һәм ҡараған булһалар; үгәй атаһы менән үгәй әсәһе, әгәр биш йылдан ашыу тәрбиәләгән һәм ҡараған булһалар; бәлиғ булмаған балалары, 18 йәшкә тиклем инвалид булған бәлиғ балалары, шулай уҡ 23 йәшкә тиклемге студент балалары.

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

***✓ Сәми йәштәрҙең күңел асыуын үҙенә, эшенә, ауылдың ауыр тормошона, бөтмәҫ-төкәнмәҫ мәшәҡәттәренә, бысрағына, хатта ямғырына мыҫҡыллау тип ҡабул итте лә тегеләр менән бәхәскә ингеһе, һүҙ көрәштергеһе килде.***



# Хөкөм

**Әмир Әминев**

**Хикәйә**

Шофер булып эшләгән әшнәһенә барғайны Сәми, әле шунан ҡайтып килеүе. Элек, машина, трактор йөрөткәндә, кеше менән үҙе лә шулай өҙөп-йолҡоп һөйләшмеме икән, был инде үтә лә фырт ҡылана - кис булһын, йоҡлап торайыҡ, ҡарарбыҙ, тип ултырасы. Иҫең китер. Әүәлерәк бер ҙә улай түгел ине, һөйләшеп килешәһең дә алмашлап, бер-береңә ярҙам итәһең, йәғни ҡул алмаш. Кемгә бесән, кемгә һалам килтерәһең, утынға бараһың. Тракторист, шофер халҡы араһында шундай яҙылмаған ҡағиҙә ине был. Ҡулында хәҙер техника юҡ, бынан нимә өмөт итәһең, тиме икән? Эх, ҡолаҡ ҡаҡты шул тракторынан, һаман ҡайғы белмәй йәшәр ине. Инәлеп йөрө инде хәҙер. Кемгә бит әле, үҙе менән бергә эшләгәндәргә, бергә ашаған-эскәндәргә! Асыуың килмәҫ ерендән килер. Йомошо ла бит әллә ни ҙур түгел: аҙна самаһы элек комбайн артынан ҡалған арыш һаламын таллыҡ араһына индереп өйгәйне. Шуны килтереү ине ниәте. Ямғыр яуыуы бар, кеше лә алып китмәҫ тимә. Яртыһы һиңә булыр йә яңынан өйөп бирермен, тип тә ҡараны, юҡ, тыңламаны. "Беларусь"та саҡта Сәми бесән-һалам тип һис борсолманы, ат урынына йөрөттө үҙ йомошона колхоз техникаһын. Үкенескә ҡалманы инде былай. Бынау Фәррәх ағай үлеп китмәһә, һаман эшләп йөрөр ине әле. Шул ваҡиғанан һуң тарттылар ҙа алдылар бит тракторын, әйтерһең, Сәмиҙе тракторһыҙ ҡалдырһалар, Фәррәх ағай терелеп китә. Бына шунан бирле этләнә Сәми - шырпы-тәмәке артынан да "Беларусь" менән йөрөп күнеккәс, тере ҡулһыҙ ҡалыу яман ҡыйын икән.

Ни генә тимә, барыбер ҙә йүнсел түгел, тип Сәми уйҙары менән йәнә тиндәшенә әйләнеп ҡайтты. Яҙ башында уҡ ҡырҡҡан ағасы бар, оҙон йәй буйы, ваҡыт табып, шуны ташып ала белмәне. Ул өй тигәнен ҡасан һалырға самалай икән һуң? Утыны ла һаман өйөлмәгән: ярған көйө сәселеп ята. Сәсеү, бесән, ураҡ тип кенә йәшәп буламы икән ни донъяла? Йорт-ҡура, өйҙәге эшкә елкәһе йоҡалар гел шулай колхоз йомошон сәбәп итеүсән инде ул...

Сәмиҙең уйҙарын көлөшкән тауыштар өҙҙө. Тирә-яғына ҡараһа, Мөбәрәк ағайҙың өйөнән килә икән. Иркен ултыралар, ахыры, көлөшәләр, булыр-булмаҫ тауыштары менән йырлап та маташалар. Малайы, Илгиз, теге көн, оҙаҡламай китәм, тип һөйләнә ине, ысынлап та, уҡыуына юлланырға самалайҙыр. Күңел асыуҙары шунандыр. Хәҙер йәштәр фырт бит, юҡ-бар сәбәп табалар ҙа, билдәләйбеҙ, тигән булып йыйылышырға әҙер торалар.

Сәми йәштәрҙең күңел асыуын үҙенә, эшенә, ауылдың ауыр тормошона, бөтмәҫ-төкәнмәҫ мәшәҡәттәренә, бысрағына, хатта ямғырына мыҫҡыллау тип ҡабул итте лә тегеләр менән бәхәскә ингеһе, һүҙ көрәштергеһе килде. Заманында үҙенең уҡымай ҡалыуына йәне көйҙө, күңелле, ҡәнәғәт тауыштар ишетелгән тәҙрәләрҙән йөрәге ярһыны, үҙенең бер ҡасан да улар һымаҡ була алмаясағына йәне әсене. Ошо әсенеү йөрәгенә йәбеште лә үҙенең бөтөнләй ҙә төшөп ҡалған бәндә түгеллеген иҫбат итеү өсөн аяҡтарын ят ҡапҡаға борҙо. Салт аяҙ көндө барлыҡҡа килгән ҡойон һымаҡ көтөлмәгән тойғо, көтөлмәгән әсенеү, ярһыу ине был.

Ишекте Азамат асты.

- О, Сәми ағай, әйҙүк! - тине ул, килеүсене алға үткәреү өсөн ситкә тайпылып. Үҙе, инһенме, юҡмы, тигәндәй, һораулы ҡарашын хужаға ташланы.

Ишеккә арты менән ултырған Илгиз бар кәүҙәһе менән инеүсегә боролдо ла, урынынан ҡалҡынып, Сәмигә йүнәлде.

- Һай, аҫыл ир Сәми, һин кәрәкһең бит самый, - тине, көлөп.

Барыһы ла ҡәнәғәт шаулашып алды.

- Һаумыһығыҙ! Ярайсы, ҡамасауламайыммы?

- Ярай, нишләп ярамаһын, һинең бер ҡасан да ҡамасаулағаның юҡ, - тине Ильгиз, ҡулдары менән барыһын да өҫтәл янына саҡырып.

Өйҙә өсәүҙәр - Илгиз менән Азаматтан башҡа Билал ла бар. Азамат, ошо яҙ армиянан ҡайтып, ҡайҙалыр уҡырға кергән. Билал бына өсөнсө йыл инде агрономлыҡҡа уҡып йөрөй. Барыһының да кәйефе күтәренке, ҡыҙмасараҡ булып алғандар. Быларға тракторы ла, һаламы ла кәрәкмәй шул. Донъя бөтөн, борсолорлоҡ мәсьәлә юҡ.

- Һиңә штрафной, Сәми ағай, - тине Билал һәм таҙа рюмка килтереп, араҡы ҡойҙо.

- Әллә тағы, штраф һалырға, мин саҡырылған ҡунаҡ түгел дәһә, - тине Сәми, көлөмһөрәп. Әрләп сығайым тигән ниәте, үҙ ярҙарына ҡайтҡан яҙғы йылға кеүек, яйлап баҫылды һәм ул, уйынан баш тартып, эсенән генә ҡул һелтәне. Әйҙүкләп торғанда, етмәһә, төшөрөргә лә мөмкинлек булғанда, кешегә нисек ҡаты һуғылаһың да, нисек яманлашаһың? Егеттәрҙең береһененең дә Сәмигә зыяны тейгәне юҡ былай, киреһенсә, йомошҡа килһәң, йәки берәй эш ҡушһаң, ярҙамлашырға әҙер торалар. Тракторы бар саҡта бер-береңә ҡул алмаш эшләнде инде эштәр - улары һиңә килә, һин уларға. Шулай булғас... Ауылда ул ғына көн итмәй, уҡырға китеүселәр ҙә ошо малайҙар ғынамы ни? Баштары эшләгәс, уҡыһындар әйҙә.

- Ризыҡ ишараты, үҙем бешергәйнем. Барыһы ла студенттарса ғына инде, - Илгиз ҡулдары менән өҫтәлдәге картуфлы табаға ишараланы.

- Ярай, ярай, үрелермен. Гөлсөм еңгә менән Мөбәрәк ағай ҡайҙа һуң?

- Тәскирә апайымдың ҡыҙы бар бит. Шунда киткәйнеләр.

- Ә, шулаймы ни? Күргәйем шул. Артҡандар икән. Тәскирәләрҙе әйтәм. Һәйбәт булған.

- Насар түгел инде.

- Үҙең ҡасан китәң?

- Иртәнән һуң. Каникул бөттө, вәссәләм.

- Улай булғас барығыҙ ҙа ҡуҙғалалыр инде? - Сәми алмашлап егеттәргә ҡарап сыҡты.

- Эйе, - тине Илгиз һуҙып ҡына.

- Да-а, уҡыуҙары еңел түгелдер инде. Еңел булһа, барыһы ла керер, уҡыр ине. Ғәйшә апай, уҡыу - энә менән ҡойо ҡаҙыу, ти торғайны. Мин ҡаҙа алманым ул ҡойо тигәндәрен. Үкенгән саҡтар ҙа бар, тик терһәк йыраҡ, тешләрлек түгел. Ә һеҙ, егеттәр, маладис, ҡаҙаһығыҙ. Бына мин ғүмер буйы тракторҙа... Бәхетме ни инде шул... Илгиз, һинең ҡайҙа уҡығаныңды онотам да ҡуям.

- Университет, юридик факультет.

- Ә, шулай бит әле, - Сәми ҡулын һелтәп хәтеренә зарланғандай итте лә, ҡапыл алға эйелеп маңлайын тотто. - Мин шуны һорарға тип кергәйнем. Беләһеңдер, һин булаҫаҡ закон һаҡсыһы бит. Иҫеңдәме, күрше ауылдан бер егет Әклимәнең туйына килеп һуғышып йөрөгәйне. Үткән аҙнала милиция килеп керҙе лә шуларҙы һораша, ныҡый башланы, өйҙө тентергә керешә, әйтерһең, берәй төрлө ҡорал йәшергәнмен.

- Бәй, нимә эҙләгәнен әйтмәйме ни?

- Әйтмәй шул. Һорап-һорап ҡарайым, шымтайып аҡтарыуын белә. Башың ауыртһа, ҡоям тип тә ҡарайым, юҡ, яҡын да килмәй. Күргәнһең, ҡарап торғанһың туҡмағандарын, ти шунан. Шаһит яһарға маташа инде. Беҙҙекеләр теге егеттең башын яра һуҡҡандар ҙа балнисҡа эләккән, ә мына эш. Ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырған, тигән һымаҡ, ул маңҡаға ҡыҫылып йөрөмәһә, булмаймы икән?

- Һин ул малайҙы күрмәгәйнеңме?

- Юҡ, ҡайҙан күрәйем?

- Ә беҙҙең ауыл егеттәрен?

- Уларҙы ни, күрҙем. Теге ваҡыт бит аласыҡҡа килеп керҙеләр. Уныһын өндәшеп торманым, бәләһенән баш-аяҡ. Бына шул милиция ишаратын ҡыуып сығарырға итәм дә, законды белмәйем. Алды китте, йөрө шунан. Ҡулында ордер-фәлән булмаһа, өйгә үткәреп тентеү яһатып тороу ярамай шикелле лә инде?

- Дөрөҫ әйтәһең, хаҡы юҡ.

- Во, ҡара аҡылым менән мин дә шулай уйлайым шул. Ул ҡарыша, ләпәк кеүек күҙгә инеп килә, малай, - Сәми һорауына яуап алыуҙан бигерәк үҙенең һөйләүенә, һүҙен йөпләүҙәренә ҡәнәғәт булып ҡулдарын һелтәп ебәрҙе, йөҙө яҡтырҙы. Шулайтмайса, уҡыған кешеләр араһында ултыра, улар кимәлендә һөйләшә бит!

- Ярар, күтәрәйек, - Билал рюмкаһын ҡулына алды.

Эсеп ҡуйҙылар, һыуынған картуф ҡаптылар, ҡыяр кетерҙәттеләр.

- Юриспруденцияны белгең, әҙерәк аңлағың килһә, әйтәйек, милиция әлеге ише өйөңә керә аламы, юҡмы икәнен белгең килһә, бер уйын уйнап алырға тәҡдим итәм. Ҡайһы бер мәсьәләләр аңлашылыр. Юҡһа, халыҡ, ысынлап та, ябай ғына әйберҙәрҙе лә белмәй. Форма кейгәнде күрҙеме, ҡото оса. Әбей-һәбей, бала-саға тыңламаһа, милицияға биреп ебәрәм, тип ҡурҡыта. Һөҙөмтәлә, беҙ бала саҡтан уҡ шуларҙан ҡурҡып үҫәбеҙ, өлкәнәйеп бөткәнсе өркөү дауам итә, бөгөн беҙҙең егеттәрҙең милицияла аҙ булыуының сәбәптәренең береһе шундалыр, тип уйлайым. Ә бит улар араһында ла төрлө кешеләр бар, йүнлеһе, йүнһеҙе, тигәндәй.

- Йүнһеҙе күберәк инде аның. Эшләгең, уҡығың килмәһә, милицияға эшкә бар, тиҙәр бит.

- Шулайҙыр, килешәм, мин үҙем дә уларға мөхәббәт тойғолары йөрөтмәйем, - тип һүҙен дауам итте Илгиз. - Беҙ бында дүртәү. Билал менән Азамат суд заседателдәре икән ти, - Илгиз иптәштәренә күҙ ҡыҫты, минең уйынды ҡабул итегеҙ, йәнәһе. - Суд рәйесе вазифаһын мин үҙ өҫтөмә алам. Ә һин, Сәми ағай, "ғәйепләнеүсе", йәғни ғәйепле кеше. Нимәлер ҡылғанһың икән, ти. Суд шуны тикшерергә йыйылған. Килештекме?

- Сержанттан да ҡото алынған кешене суд эскәмйәһенә ултыртырға самалайһығыҙмы? - Сәми көлдө. - Милицияның килеүен ҡайҙан әйттем? Эштең былай бололорон белһәм...

- Милицияның иң йәнгә тейгәне ана шул сержанттар инде, - тине Билал.

Йәштәргә ни нимә, мәрәкә генә тап, бер-береһенә ҡарашып, тамам ирәйеп киттеләр.

- Ҡурҡма, бында милиция юҡ, суд, - быныһын Илгиз әйтте.

- Әллә, миңә барыбер. Суды ла, милицияһы ла, прокуратураһы ла бер ҡалыптан һуғылған нәмә инде.

- Улай тимә, айырмаһы бар уларҙың... Үсегеп китмәгеҙ, аҙағына тиклем уйнарға кәрәк. Бар ҡыҙығы шунда.

- Бәй, ысын суд түгеллеген генә төшөнәм инде. Барыбер әллә нисектәһә.

Илгиз өҫтәлдән ашамлыҡ ҡалдыҡтарын йыйып алды, ҡыяр телде, рюмкаларҙы тултырҙы, үҙенең алдына ҡағыҙ, ручка һалды.

- Башлайбыҙ. Суд заседателдәре, әҙерһегеҙме? - Илгиз ике иптәшенә алмашлап ҡараны ла йәнә күҙ ҡыҫты, унан "ғәйепләнеүсе"гә баҡты. Һынсыл ине ҡарашы. Ике ҡулының бармаҡтарын төкәтеп, ҡабаланмай, һәр һүҙен бәҫләп, етди дауам итте. - Беҙ ниндәй генә факт килтерһәк тә, һеҙ, Сәмиғулла Боҫҡонов, үҙегеҙҙе гонаһлы тип иҫәпләмәйәсәкһегеҙ, ә беҙ һеҙҙең ғәйептәрҙе табырға, иҫбат итергә тырышасаҡбыҙ.

Әйткәндәрен нығытып ҡуйыр өсөнмөләр, Илгиз йәнә иптәштәренә ҡарап алды, күрһөндө, шырт ҡара сәсен артҡа һыпырып, кәүҙәһен турайтып ултырҙы.

- Һин упсым ысын суд рәйесе кеүек, - тип көлдө Сәми.

- Бәндә бер ваҡытта ла үҙен ғәйепле иҫәпләмәй. Кеше философияһы шулай. Бөтәһе лә бер иш тип әйтә алмайым, әммә күпселеге шулай. Бигерәк тә йәштәр. Кемделер һыу эскеһеҙ итеп туҡмай ҙа, ҡайтып, тыныс күңел менән йоҡларға ята. Ә күңелендә теге кешене йәлләү, үҙенең ҡылығына үкенеү тойғоһо юҡ. Кеше хәҙер йыртҡысҡа әйләнде.

- И-и, мырҙам, һеҙ йәш әле, күп нәмәне белмәйһегеҙ, ә бына беҙҙең малай саҡта олоно оло, кесене кесе итә белеү бар ине, кешегә ихтирам да, иғтибар ҙа көслө ине, - Сәми, Илгизде бүлдереп, ҡулын һелтәй-һелтәй, үҙ фекерен ҡыҫтырҙы.

**(Дауамы бар).**

✓ *Көндөҙ эҫе ваҡытта кофе, ҡара сәй кеүек көслө эсемлектәрҙән баш тартып тороу яҡшыраҡ. Улар тәнде йылыта, һыу юғалтыуға килтереүе ихтимал. Ә бына үлән сәйҙәре тынысландыра һәм һалҡынлыҡ бирә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАТЫН-ҠЫҘ ХИСЛЕРӘК

■ Йәмғиәттә ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда хис-тойғоға байыраҡ, тигән стереотип булһа ла, ғалимдар быны ҡиреһен раҫлаған. 15 ғаилә башлығы һәм 15 ҡатын-ҡыҙҙан торған төркөмдә төрлө һынауҙар үткәргәндән һуң, көслө зат ҡайһы бер ваҡиғаларҙы ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда ике тапҡырға көслөрәк кисереүе асыҡланған, әммә улар үҙҙәрен хислерәк икәнен барыбер танмаған. "Гүзәл зат илағыраҡ, ул эмоциялар ҡоло, тигән фекерҙе аңыбыҙға һеңдереп бөткәндәр. Тик ир-егеттәр был йәһәттән уларҙан һис ҡалышмай, кирһенсә, ҡайһы берҙә нығыраҡ ҡайғыра, ихласыраҡ шатлана. Йәмғиәттә был ирҙең көсһеҙлеге булып ҡабул ителгәнгә күрә, улар тойғоларын күрһәтеп бармай. Бала саҡтан малайҙарҙы, ир кеше иламай, тип тәрбиәләүҙең йоғонтоһо ла бар был күренештә", - ти тикшеренеүҙең авторы Дэвид Льюис.

■ Эштә көнө буйы ултырып эшләһәгеҙ, 1 сәғәт буйына физик күнекмәләр менән шөғөлләнеү ҙә һеҙгә сәләмәтлек өстәмәйәсәк. Торонтолағы Реабилитация институты ғалимдары 47 кешенең йәшәү рәүешен тикшереп ҡараған. Кем көнө буйы дөйөм алғанда 8 сәғәт тирәһе ултыра, башҡа факторҙарға ҡарамайынса, уларҙың диабет, һимереү, яман шеш, йөрәк ауырыуҙарына дусар булыу ихтималлығы ҙурая. Тикшеренеү авторҙары көнөнә 4-5 сәғәттән артыҡ ултырып эшләргә кәңәш итмәй, тороп бер аҙ хәрәкәтләнеп алырға кәрәк.

■ Калифорния университеты психологтары кешенең ҡайһы бер сифаттары һәм иммунитеттың эшмәкәрлеген контролдә тотоусы гендар араһында бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Аралашырға яратыусы, бер урында ултырып сыҙамаған кешеләр инфекцияларға бирешеп бара, шуға ла уларҙың иммунитеты көслөрәк, ә тыныс холоҡло кешеләрҙеке насарыраҡ эшләй икән.

■ Ғалимдар эш көнөн иртәнге ундан башлау яҡшыраҡ, тип белдерә. Уларҙың фекере буйынса, иртән 15-20 минутҡа оҙағыраҡ йоҡлау ҙа эшкә һәләттелекте арттыра. Был аҙыраҡ эшләргә кәрәк, тигәнде аңлатмай. Эшкә бар иғтибарын йүнәлткән кешенең йоҡоһо туймаған хеҙмәттәшенә ҡарағанда күпкә һөҙөмтәлерәк эшләүе барыһына ла билдәле. Кемдәрҙең эш көнө иртә менән башлана, улар төүлегенә 6 сәғәт тирәһе йоҡлай. Был ваҡыт эсендә организм тулыһынса ял итеп өлгөрмәй. Был иһә эшләү һәләтенә лә, сәләмәтлек торошона ла кире йоғонто яһай.

■ Белгестәр газлы татлы һыуҙарҙың зыяны тураһында күптән белдерә, әммә уларҙан, тәү сиратта, йөрәк сирлеләр баш тартырға тейеш. Сөнки газлы эсемлектәр ҡан баҫымын күтәрә, етмәһә, һыу һалып һатылған банканың составындағы матдәләр ҙә быға булышлыҡ итә. Тимер һәм пластик һауыттарҙы бисфенол менән ҡаплайҙар. Корея тикшеренеүселәре әйтеүенсә, быяла һауыттан башҡа һауыттар сәләмәтлек өсөн ҙур зыян килтерә. Бисфенолды элегерәк тә күп сирҙәргә килтереүҙә гәйепләйҙәр ине, улар араһында баш ауыртыуы, һимереү, шәкәр диабеты, түлһеҙлек, инфаркт, хатта яман шеш тә бар. Европала балалар өсөн тәғәйенләнгән һауыттар етештергәндә бисфенол ҡулланыу тыйылған.

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# БАЙМАҠ "ПИРАМИДА"ҺЫ



**Тарих дәрестәрендә Мысыр пирамидаларын ентекле өйрәтәләр. Хәҙер кеше уларҙы барып та күрә, таштарын ҡапшап ҡарай. Шулай булмай һуң - экзотика, донъяның ете мөғжизәһенең береһе лә баһа!**

Пирамида бит беҙҙә лә, Башҡортостанда ла, бар. Баймаҡта! Тик ул ҡара төҫтә һәм Мысырҙыҡынан күпкә ҡайтыш, хасил булыу тарихы ла уның бөтөнләй башҡа. Баймаҡ уртаһындағы ҡара тау-пирамида тураһында бер ҡайҙа ла яҙылмаған. Нисек барлыҡҡа килгән ул? Һәр хәлдә, интернетта мин мәғлүмәт тапманым. Баймаҡтарҙың ауыҙынан ғына ишеткәнем бар тау тураһындағы хикәйәтте. Алдан уҡ иҫкәртеп үтәм: уның бер ниндәй ҙә сере юҡ, тарихы ябай һәм бөтөнләй ҡыҙыҡ түгел - баҡыр иретеү заводының ҡалдығы, шлак өйөмө генә ул. Халҡыбыҙ хужа булырға, үҙ мәнфәғәтенә файҙаланырға тейешле Ирәндек буйы хазинаһы - алтын-баҡыр - ситкә оҫҡан, ә беҙгә ҡара "пирамида" ғына ҡалған. Тау булып ятҡан шлакты хәҙер ҡыш-ҡы тайғаҡтарҙа Баймаҡ, Сибай ҡалалары юлдарына һибәләр. Коммуналь хеҙмәттәр уны Баймаҡ машиналар эшләү заводынан һатып ала.

"Һатып ала". Фәҡәт ошо урында ғына Мысыр һәм Баймаҡ пирамидаларының оҡшашлығы төҫмөрләнә. Үткән быуындар тарафынан булдырылған, хәҙерге заманда үҙ тәғәйенләнешен юғалтҡан ҡоролма һәм сәнғәт ҡалдығы бөгөн аҡса сығанағы булып тора. Тегендә туристарҙан аҡса алалар, бында - юл хәүефһеҙлеген тәьмин итеү хеҙмәттәренән.

Ун ике йәшемә тиклем мин ғәжәйеп Баймаҡ "пирамида"һының барлығын белмәй ҙә инем. 1973 йылда Баймаҡ интернат-мәктәбенә уҡырға барҙым. Август аҙағы көҙгөсә һалҡын, ел-дауыллы, болотло ине. Ҡара ҙур тауҙы тәүҙә автобус тәҙрәһенән күрҙем һәм был мөғжизә күҙҙәремә күренә икән тип уйланым. Идеаль ҡиәфәттәге ҙур һәм бейек конус - пирамида! Төҫө - ҡап-ҡара! Дөм ҡара! Ҡайҙан һәм нисек хасил булған ул Таналыҡ быуаһы буйында? Улар ҙа аптыраймы икән был күренешкә, тип, автобус эсендәге кешеләргә ҡараным. Юҡ, бер кемдең дә иҫ-ағылы китмәй. Әсәйем дә битараф. Был ни ғилмә, нишләп шундай мөғжизәгә иғтибар юҡ уларҙа?

Эйе, Баймаҡ тауына кеше тәүге күргәндә генә иғтибарын йүнәлтә, минең ише бала-сағаға ғәжәпкә ҡала. Уның низан ғибрәт икәнен белгәс тә ҡыҙыҡһыныу юғала. Шулай ҙа: "Ни рәүешле шлакты ул тиклем бейек итеп өйгәндәр, башына менеп буламы икән?" - тигән һорау һәр кемдең башынан үтәләр. "Менеп ҡарағанда ҡыҙыҡ булыр ине", - тип тә ҡуяларҙыр. Әҙәми заттың барыһын да тотоп, ҡапшап ҡарағыһы килә бит. Ана, Мысыр пирамидаларына ла менәләр, ә ғалимдар уларҙың нисек төҙөлөүе серҙәрен нисәмә быуат өйрәнә, тик аныҡ ҡына һаман бер фекергә килә алмай.

Ул заманда Баймаҡ ҙур ауылды хәтерләтте. Һирәкләп кенә ике ҡатлы йорттар күренә, хәҙерге Тыныслыҡ урамының осонда аңылары һалына ине. Баймаҡ "пирамида"һын йәйәүләп быуа ситләтеп үтеп барғанда яҡыныраҡтан тағы бер тапҡыр ентекләберәк күҙҙән үткәрҙем. "Пирамида"ның бер итәге Таналыҡ быуаһы һыуы аҫтына инеп юғала. Кире яғында ниндәйҙер бағаналар һерәйеп торғандай. Дөм ҡара йөҙөндә эҙҙәр һыҙатлана. Эҫе көндәрҙә малайҙарҙың һыу яғына ҡараған ҡара тау битләүендә ҡояшта ҡыҙынып ятҡандарын күрҙем аҙаҡтан.

Баймаҡ "пирамида"һын хасил иткән тарихтың башы XVIII быуаттың 1754-1755 йылдарына барып тоташа һәм Ирәндек буйҙарының ер аҫты хазиналарына бай булыуы менән бәйле. Архив документтарынан билдәле булыуынса, тап атап үтелгән йылдар тирәһендә Таналыҡ һәм Урғаҙа йылғалары буйында бай баҡыр һәм алтын ятҡылыҡтары табыла. Был ваҡытта Йылайыр (1748 йыл) һәм Кананикольск (1753) ауылдарында баҡыр иретеү заводтары эшләй һәм уларға сеймал талап итепә. Ырымбурҙан килгән экспедицияға ер аҫты байлыҡтары ятҡылыҡтарын башҡорт мәғдәнселәре Бикбулат Арҡаев, Муса Аҙнағолов, Ҡыуат Кинйәғолов күрһәтә.

Баймаҡтың үҙендә, бөгөнгө Баймаҡ машиналар эшләү заводы урынында, әйткәндәй, ҡара "пирамида" уның билөмәһендә ултыра, 1880 йылда алтын йыуыу фабрикаһы төҙөлә. Ә 1912 йылда шунда уҡ баҡыр иретеү заводына нигеҙ һалына. Бер йылдан предприятие сафҡа индерелә. Хәҙергесә әйткәндә, инвесторҙар булып инглиз капиталистары тора.

Баҡыр ҡойғанда он рәүешле ваҡ ҡара шлак айырылып сыға. Тәүҙә уны шул килеш асыҡ урында өйә баралар. Тик төбәккә хас киҫкен елдәр уны әллә ҡайҙарға осороп алып китә. Һөҙөмтәлә тирә-яҡ ҡара саң менән ҡаплана, бер нәмә лә үҫмәй башлай. Был хәлдән ҡотолор өсөн, ҡара "он"до кристалл хәленә килтерергә өйрәнәләр. Ул ныҡ ята, осмай. Өйә торғас, йылдан-йыл күтәрелә барған шлак ҙур бер ҡара тау хасил итә. Төрлө сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәт буйынса, ҡара "пирамида"ла бер миллион тоннаға тиклем шлак тупланған. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында уны һатып алыу ниәте менән Баймаҡҡа япондар ҙа, ҡытайҙар ҙа, башҡалар ҙа килә, тик килешеү төҙөлмәй. Сөнки төрлө металдар булған кристалды эшкәртеү һәм унан файҙалы компонетларҙы айырып алыу технологияһы бер кемдә лә булмай сыға.

Эшселәр ҡасабаһы Баймаҡҡа ҡала статусы (1938 йыл) биргән завод 1957 йылда ябыла. Сөнки тирә-яҡта баҡыр мәғдәне ятҡылыҡтарынан сеймалды алып бөтәләр. Предприятиенең производство майҙансығында иһә машиналар эшләү заводы асыла. Баймаҡ баҡыр заводы, бөтә йылдарҙы бергә алғанда, 81 мең тонна ҡара баҡыр, 195,3 килограмм алтын һәм 25,5 мең килограмм көмөш биргән. Был байлыҡ ҡайҙалыр киткән, ә урында, мираҫ булып, ҡара "пирамида" тороп ҡалған. Хәҙер ул - Баймаҡтың төп иҫтәлекле урыны, йәҙә! Әгәр уны талып, юлдарға һибеп бөтһәләр, был бәләкәй генә ҡаланың үҙенсәлеге юғалыр, моғайын. Шунан кем әйтер, Баймаҡта ҡасандыр алтын-баҡыр сығарғандар, тип.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН.**

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# ДӨРӨҪ ЭСЕМЛЕК ЭС!



**Йәйге эҫелә организм һыу күп юғалта, шуға күрә эсемлектәрҙе дөрөҫ һайлау бик мөһим.**

Был ваҡытта иң яҡшыһы - төрлө үлән сәйҙәре, йәшел сәй, емеш-еләкле һалҡын сәйҙәр эсеү. Үлән сәйҙәре - мәтрүшкә, бөтнәк, лимон бальзамы, ромашка, ҡурай еләге һәм ҡарағат япрағы - тәнде һыуындыра, эсәк эшмәкәрлеген яҡшырта, кәйефте күтәрә, иммунитетты нығыта.

Йәшел сәйҙә антиоксиданттар күп, ул организмды таҙарта, матдәләр алмашыныуын яҡшырта, йәйге эҫелә еңеллек бирә. Емеш-еләкле сәйҙәр (ҡурай еләге, ҡарағат, лимон, алма) витаминдарға бай, тәмле һәм файҙалы. Сәйҙе һалҡын килеш, боҙ, лимон, бал, яңы емеш-еләк өҫтәп эсһән, ул һыуһыныңды ла ҡандыра, тәнде лә йомшарта.

Көндөҙ эҫе ваҡытта кофе, ҡара сәй кеүек көслө эсемлектәрҙән баш тартып тороу яҡшыраҡ. Улар тәнде йылыта, һыу юғалтыуға килтереүе ихтимал. Ә бына үлән сәйҙәре, айырыуса бөтнәк, лимон бальзамы, ромашка тынысландыра һәм һалҡынлыҡ бирә.

Йәйге сәйҙе үҙең үҫтергән үләндәрҙән, емеш-еләктән әҙерләп, ҡайнар һыуҙа төнәтеп, һалҡын килеш эсһән, эҫелә үҙеңде еңел, дәртле һәм сәләмәт тояһың!

**Ирина ЙӘҒӘФӘРОВА,**
**фельдшер.**

ЙӘНӘШ ДОНЪЯ

# МӨҒЖИЗӘЛЕ ХӘЛДӘР

## Тылсымлы таяҡ

**20-се быуаттың аҙағында - 21-се быуаттың баштарында мин Башҡорт дәүләт педагогия институтының башҡорт филологияһы факультетында уҡыттым. Йылына бер мәртәбә уҡыусыларға, үҙегеҙҙең тормошоғоҙҙа булған берәй әһәмиәтле ваҡиғаны һүрәтләгеҙ, тигән эш ҡуша торғайным. Тапшырылған эштәр араһынан берәүһе минең ҡағыҙҙарым араһында һаҡланып ҡалған. Йөкмәткеһе ғәҙәти булмағанлыҡтан, мин уны үҙемдә ҡалдырғайным. Иншаның яҙылыу ваҡыты - 2000 йылдың 7 марты. Иғтибарығыҙға шул яҙманың йөкмәткеһен тәҡдим итәм.**

- Олатайым Хөснөтдин Хисаметдинов 1840 йылда Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылында тыуған. Ул Дәүләтбирҙин Хисаметдиндең улы икәне билдәле. Әммә олатайымдың атаһы тураһында мәғлүмәттәр бөтөнләй юҡ.

Өс йәшендә олатайым тома һуҡыр булып ҡала. Шул ваҡыттан ул ҡояш нурҙарын күреүҙән мәхрүм була. Уҡыу-яҙыуҙы үҙләштереү йәшенә етеп өлгөрмәһә лә, Ҡөрьән Кәримде яттан белеүе менән халыҡты хайран ҡалдыра. Өләсәйемдең әйтеүенсә, ниндәйҙер мөғжизәле көс сабыйға ярҙамға килә - уны мосолман пәрейе уҡыта. Олатайым кешеләрҙе өшкөрөп дауалаған. Ауырыуҙарҙың бөтәһенә лә тиерлек ярҙам итерлек көскә эйә булған.

Өләсәйемдең исеме Йәмилә булған. Ишеткәндәремдән бер тарихты ғына һөйләп китмәксемен.

Ҡышҡы көндәрҙең береһендә олатайым менән өләсәйем Кәшәлә ауылында йәшәгән ҡыҙына ҡунаҡҡа барырға булалар. Санаға ат егеп, икәүһе шунда урын алып, юлға сығалар. Ҡалыу тигән текә генә тауға барып менгәс, аттары сығынлап, санаһыние менән бергә ауып китәләр. Әммә ниндәйҙер мөғжизәле көс, атты, сананы, ундағы кешеләре менән бергә, кире юлға сығарып ултырта.

"Кем беҙҙе юлға төшөрөп ултыртты? Ҡулдары йомшаҡ ҡына ине?" - тип һорай олатайым. "Әлләсе, мин бер кемде лә күрмәнем. Кем булғандыр, белмәйем. Атыбыҙҙын, санабыҙҙың, үҙебеҙҙең талғын ғына тауҙағы юлға кире менеп ултырыуына аптырап тик ултырҙым", - тип яуап бирә өләсәйем. Олатайым өндәшмәй, тик йылмайып ҡына ҡуя.

Олатайым үлерен дә алдан белгән (тик өләсәйем йылын иҫләй алманы). Йома көндө иртән тәһәрәт алып инә. Намаҙын уҡый. Ошоларҙы атҡарғандан һуң, балаларын эргәһенә йыйып ала. "Бөгөн йома ваҡытында был донъянан китәм. Сәләмде, улым, һиңә бирәм", - тип, баш кейемен улына һона. Улы, Садиҡ олатайым, көлөп: "Нисек тә шулай булмаған! Ауырымай, һау көйө үләме кеше?" - тип ышанмауын белдерә.



Зәкәриә, олатайымдың оло ҡыҙының кейәүе, шул мәлдә сослоҡ күрһәтә. "Һин алмаһаң, мин алам!" - тип, сәлләне әләктереп тә ала. Эштең былай барып бөтөрөн көтмәгән була Хөснөтдин олатайым: "Һүттең инде, улым! Мә, исмаһам, таяғымды булһа ла ал", - ти ҙә улына таяғын бирә. Сәлләһе менән улына муллалыҡ көсөн дә тапшырырға ниәтләнгән була олатайым. Сәлләһен алғас, Хөснөтдин олатайымдың муллалыҡ көсө уның кейәүенә күсә.

Йома ваҡыты еткәс, олатайым тыныс ҡына баҡыйлыҡҡа күсә. Үҫә төшкәс, Садиҡ олатайым нык үкенгән: "Малайлығым менән аңламай ҡалғанмын шул!"- ти. Хәкимә өләсәйем, уның ҡатыны, ире үлгәс, таяҡты ҡәҙерләп һаҡлаған. Үҙенең вафат булырын һиҙеп, мираҫты әсәйемдең әсәһе - Һәҙиә өләсәйемә - ҡалдырған. Ул әле лә иҫән.

Тылсымлы көскә эйә булып сыға Хөснөтдин олатайымдың таяғы. Уның улы Мөхәмәтсадиҡ (Садиҡ олатайымдың тулы исеме шулай була) ауырыуҙарҙы өшкөрөп дауалай алған. Үлән, артыш, тоҙ ярҙамында ла кешеләрҙе һауыҡтырған, тип һөйләй торғайны әсәйем.

Таяҡтың оҙонлоғо ун ҡарыш (170 см). Торғоҙоп ҡуйғанда, ул Хөснөтдин ҡарттың яурынынан булған. Мөхәмәтсадиҡ олатайымдың буйы ҡайтыштыраҡ икәне билдәле - таяҡ уның ҡолаҡ япрағының аҫтынан икәнен ишеттем. Оҙон буйлы, елле ирҙәр килеп баҫа ҡүҙ алдыма.

Хәйер, Һәҙиә өләсәйем дә, ҡартайыуына ҡарамаҫтан, һис кенә лә сүкмәгән. Оҙон буйлы, тура кәүҙәле ҡалған. Атаһы Мөхәмәтсадиҡты күреү бәхете теймәй уға. Иң бәләкәс бәпес булғанлыҡтан, ғаилә башлығы вафат булыуға өс ай үткәс кенә донъяға килә. Хөснөтдиновтар нәҫеленең берҙән-бер вәкиле ул. Ағайҙары, һуғышҡа китеп, кире әйләнеп ҡайта алмаған. Шуға ла таяҡ өләсәйҙән өләсәйгә күсеп килә. Бөгөн дә өләсәйем, мал-тыуар ауырыһа, таяҡты өҫтөнән йөрөтөп өшкөрә. Файҙаһы тейә.

Һәҙиә өләсәйем күп нәмәне иҫләмәүен әйтә. Әсәйем һөйләгәндәрҙең ҡайһыларын ҡолаҡҡа элмәнем - йәшем бәләкәй ине шул, ти.

Иншамды шунның менән тамамлайым. Эшегеҙҙә уңыштар теләп, Гөлназ.

**Иҫкәртеү.** Гөлназ, Гөлназдың туғандары! Һаҡ булығыҙ: тылсымлы таяҡты үҙләштерергә теләүселәр табылыуы мөмкин. Улар районығыҙҙа йәшәүселәр, башҡа төбәк кешеләре, хатта сит илдәрҙән килеүселәр араһынан да килеп сығыуы бар. Таяҡты йәшереп ҡуйығыҙ, сит кешеләргә уның ҡайҙа икәнен һөйләмәгеҙ.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ**
**яҙып алды һәм баҫмаға әҙерләне.**
**(Аҙағы. Башы 25-26-сы һандарҙа).**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ВИТАМИН ЕТЕШМӘҮҘӘН



❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған гөлйемеш һәм миләш емешенә 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 4 сәғәт төнәтергә һәм көнөнә 3 тапҡыр 100 миллилитрлап эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ ҡарағатҡа ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Көн дауамында шуны эсеп бөтөргә. Яҙғыһын ҡарағаттың йәш һабаҡтарын ваҡлап тура сәй эшләп эсеү ҙә организм өсөн файҙалы.

❖ 60 г миләш, 10 г ҡурай еләге емештәрен һәм 5 г ҡарағат япрағын алып ҡушырға. Йыйылманың бер ҡалағына ярты литр һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға һәм ауыҙын яҡшы ябып төнәтергә. Витамин етешмәүҙән 120 мл итеп көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

❖ Витамин етешмәгәнлектән хәлһеҙләнеү осрағында киптерелгән бөтнөк, мәтрүшкә, кейәү үләне (чабрец), һары мәтрүшкә үләндәрен, ҡурай еләге сәскәһе һәм өлгөрмәгән емештәрен, миләш, ҡарағат (бөрөһө, япрағы, емеше), еләкте (япрағы, емеше) тигеҙ нисбәттә алып, сәй бешерергә. 240 мл итеп көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

# МАТДӘЛӘР АЛМАШЫНЫУЫ БОҘОЛҒАНДА

❖ 350 г һарымһаҡты ваҡ ҡырғыс аша үткәреп, шуның 200 грамын быяла һауытҡа һалырға һәм 200 мл спирт ҡойоп, һауыттың ауыҙын ныҡлы ябырға, болғатырға һәм ҡараңғы, һалҡын урынға ҡуйырға. Ун көндән һуң һөҙөргә һәм һарымһағын һығып алырға. Был төнәтмәне түбәндәге ҡағиҙәләрҙә ҡәтғи үтәп кенә ҡулланырға: көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 50 мл һалҡын һөтҡә 1 тамсынан башлап, көн һайын 25 тамсыға тиклем арттыра барып эсәләр. Дауаның миҡдары 25 тамсыға тиклем еткәс, киреһенсә, 25-тән 1 тамсыға тиклем аҙайта барып эсергә кәрәк. Был дауаланыу ысулын 6 йылдан һуң ғына яңынан ҡабатлайҙар.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡарсыға ябалағы**
**(Ястребиная сова)**



Ҡыҫҡа ҡойроҡло, уртаса ҙурлыҡтағы (ҡарғанан бәләкәйерәк) ябалаҡ. Кәүҙәһенең өҫкө яғы һоро, ә бына аҫҡы яғы нескә генә буй-буй һыҙыҡлы аҡ, шуға ла уны, ҡарсығаға оҡшатып, ҡарсыға ябалағы тигәндәр. Күҙҙәре, сукышы - һары, "ҡолаҡ"-тары юҡ. Осоу тиҙлеге юғары, ғәҙәттә, ерҙән әллә ни бейек осмай. Уны ағаста ҡорбанын күҙәтеп ултырғанында күрергә була.

Ҡарсыға ябалағы - аҙ һанлы, ҡышлай торған ҡош. Республиканың көньяҡ өлөшөндә оя ҡороуы билдәле. 1932 йылдың йәйендә ғалимдар йәш ҡарсыға ябалағын тап Башҡортостан ҡурсаулығында, Ағиҙел йылғаһы буйында тота. 1965 йылдың ҡышында биолог Ф. Үтәгән Ғафури районы Оло Юрмаш ауылы янындағы яланда ҡарсыға ябалағын тота, уның ҡараҫҡыһы бөгөн Өфө фән һәм технологиялар университетының зоология музейында һаҡлана.

Яҙын ҡарсыға ябалағы "һайрауын" йыш ишетә алмаясаҡһығыҙ. Был сут-сут иткән тауыш 3-6 секундтан 10 секундҡа тиклем һуҙыла һәм ата ҡош осоп барышлай ғына "һайрай". Инә ҡоштоң ҡысҡырыуы иһә оҙон-оҙон, ике ижектән тора: "иууу-лии". Ылыҫлы, шулай уҡ тәпәш ағастарҙан торған ҡатнаш урмандарҙа йәшәй, ҡош туйы ҡыш аҙағында, әле ҡар ирей ҙә башламаҫ борон башлана.

Оялары йышыраҡ башҡа ҡоштар - һайыҫҡандар, ҡарғалар, шулай уҡ йыртҡыс ҡоштар ташлап киткән иҫке ояларҙа. Ағас олонондағы ҡыуышлыҡтарҙы ла оя итә. Ояһына бер нәмә лә түшәмәй, йомортҡаһын шул яланғас ояға һала. Ерҙә урынлашҡан ояларға ла тап булғаныбыҙ бар. Йомортҡаларының һаны - 3-9, 13 йомортҡа ла булыуы ихтимал. Йомортҡаларының төҫө ап-аҡ. 28 көн баҫа. Оло ҡоштар ояны нығ һаҡлай, әгәр ҙә кеше уға яҡынлаша икән, ташланыуҙары ла бар. Был мәлдә ул дошманының башын тырнаҡтары менән тырнарға тырыша. Бәпкәләр ҡыҙғылт-аҡһыл йөнлө, унан көл төҫөндәге ҡауырыйҙар менән ҡаплана.

Ҡыр сысҡаны, улар аҙ ваҡытта тейен, ваҡ ҡоштар менән туҡлана. Башлыса энерҙә һунар итә, шулай ҙа көндөҙ ҙә үҙенә ризыҡ тота. Ҡышын йәй йәшәгән урынын ташлап китмәй, әгәр ҙә ризыҡҡа ҡытлыҡ икән, күсенеп китеүе лә билдәле.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



### 14 ИЮЛЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.50, 11.25, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.55 "Время героев". [16+]
13.00, 14.15 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-6". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ангел мести". [16+]
22.45 Т/с "Такси под прикрытием". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Между нами глубокое море". [12+]
23.25 Т/с "Медиум". [12+]
0.30 XXXIV Международный фестиваль "Славянский базар в Витебске".
4.12 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]
11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Специальный репортаж. [12+]
12.15 Квадратные метры. [12+]
12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]
13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 4.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 5.30 Колесо времени. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Асыш. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Башҡорттар. [6+]
16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45, 20.15 Профессионалы. [12+]
18.00 Защитники Отечества. [12+]
19.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 О чем молчат Памятники. [12+]
21.00 Д/с "Герои". [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
23.30 Т/с "Двойная сплошная". [16+]
1.00 Спектакль "Асылъяр". [12+]
5.00 Хазина. [12+]

### 15 ИЮЛЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-6". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ангел мести". [16+]
22.45 Т/с "Такси под прикрытием". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Между нами глубокое море". [12+]
23.25 Т/с "Медиум". [12+]
0.30 Торжественная церемония закрытия XXXIV Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
3.53 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]
11.00 День семьи, любви и верности. [12+]
11.15 Д/ф "Уфимский хоспис: день, чтобы..." [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]
13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 4.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 5.30 Колесо времени. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
19.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15, 0.00 Профессионалы. [12+]
20.30 Д/с "Символы русского флота". [12+]
23.00 Башҡорт йыры-2025. [12+]
0.05 Т/с "Двойная сплошная". [16+]
1.30 Спектакль "Три аршина земли. Нур". [12+]
3.15 Письма солдатам. [12+]

### 16 ИЮЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-7". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ангел мести". [16+]
22.45 Т/с "Такси под прикрытием". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.50, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Между нами глубокое море". [12+]
23.25 Т/с "Медиум". [12+]
0.30 Х/ф "Крылья Пегаса". [12+]
4.12 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]
11.00 Дорога к храму. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]
13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 4.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 5.30 Колесо времени. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Экологично. [6+]
15.30 Атайсал. [6+]
16.00, 3.00 Автограф. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45, 0.00 Профессионалы. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Защитники Отечества. [12+]
21.00 Д/с "Заповедники России". [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Байыҡ-2025. [12+]
0.05 Т/с "Двойная сплошная". [16+]
1.30 Спектакль "Не ломайте крылья". [12+]
5.00 Тайм-аут. [12+]

### 17 ИЮЛЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-7". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ангел мести". [16+]
22.45 Т/с "Такси под прикрытием". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00 Д/ф Премьера. "Союз-Аполлон". Сила притяжения". К 50-летию первой международной космической экспедиции". [12+]
1.50, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Т/с "Между нами глубокое море". [12+]
23.25 Т/с "Медиум". [12+]
0.30 Х/ф "Крылья Пегаса". [12+]
4.12 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]
12.15, 0.00 Профессионалы. [12+]
12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]
13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 4.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 23.00, 5.30 Колесо времени. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Сулпылар. [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Дознание. [16+]
17.00 Автограф. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Йома. [6+]
19.00 Телецентр. [12+]
19.45 Мама. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Д/ф "Вода и злато". [12+]
21.00 Асыш. [6+]
22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
0.05 Т/с "Двойная сплошная". [16+]
1.30 Спектакль "Бесталанная". [12+]

### 18 ИЮЛЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Т/с "Ищейка-7". [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" [16+]
22.50 Премьера. "Наша новая музыка". [12+]
0.10 Х/ф "Шагни вперёд". [16+]
2.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе! Народный кастинг". [12+]
23.40 "Истории Большой Страны". [12+]
0.40 Х/ф "Его любовь". [12+]
3.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]
11.00 Йома. [6+]
11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]
13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 4.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 5.30 Колесо времени. [12+]
15.00 Асыш. [6+]
15.15 Тирмәкәй. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Аль-Фатиха. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Квадратные метры. [12+]
18.00 Башҡорттар. [6+]
19.00 Честно говоря. [12+]
19.45 Территория женского счастья. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Профессионалы. [12+]
20.30 Башҡорт йыры-2025. [12+]
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
22.15 Письма солдатам. [12+]
23.00 Ҡурай-шоу. [12+]
23.30 Ете егет. [12+]
0.30 Х/ф "Оборванная мелодия". [12+]
2.00 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]
5.00 Аль-Фатиха. [6+]

### 19 ИЮЛЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Три кита Василия Ливанова". К 90-летию народного артиста". [12+]
11.05, 23.50 Д/ф "Олимпиада-80. Больше, чем спорт". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Союз-Аполлон". Сила притяжения". К 50-летию первой международной космической экспедиции". [12+]
13.20 Т/с "Убойная сила-3". [16+]
16.20 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Д/ф Премьера. "Музыка - это лестница в небо". К 80-летию композитора Алексея Рыбникова". [12+]
19.20 Творческий вечер Алексея Рыбникова. "Через тернии к звездам". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
0.35, 3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
1.50 Вечер бокса. А. Папин (Россия) - М. Ровчанин (Сербия). А. Сусленков (Россия) - А. Смакичи (Хорватия). Бой за титул WBA Continental в супертяжелом весе. Прямая трансляция.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 Д/ф "Азов" головного мозга". [16+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Время надежды". [12+]
0.40 Х/ф "Расплата за счастье". [16+]
4.20 Х/ф "Маша". [12+]
6.04 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Золотой фонд башкирского ТВ.[12+]
8.30 Аль-Фатиха. [12+]
9.00, 18.15 Профессионалы. [12+]
9.15 Ҡурай даны. [12+]
9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.45 Книга сказок. [6+]
11.00 Зерно. [6+]
11.30 Атайсал. Беҙҙекеләр! Знай наших! [6+]
12.00 Елкән. [6+]
12.30, 3.45 Ете егет. [12+]
13.30 Башҡорттар. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Все песни о прекрасном… [6+]
19.00 История одного села. [12+]
19.15, 3.00 Вопрос + Ответ = Портрет.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Байыҡ-2025. [12+]
22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. 12+
22.30, 4.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]
23.15 Караоке по-башкирски. [12+]
23.45 Х/ф "Оборванная мелодия". [12+]
1.15 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]
5.15 Письма солдатам. [12+]
5.30 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]

### 20 ИЮЛЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 1.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.40 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Будем жить!". [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.05 Х/ф "Собака Баскервилей". К 90-летию Василия Ливанова". [12+]
17.00 Д/ф Премьера. "Жил-был я". К 85-летию композитора Давида Тухманова". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Премьера. Юбилейный концерт "День Победы", посвященный 85-летию композитора Давида Тухманова. [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с "Триггер". [16+]
0.00 Х/ф "Самый лучший босс". [18+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.10, 2.00 Х/ф "Только любовь". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
22.30 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05 Д/ф "Азов" головного мозга". [16+]
3.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45, 2.00 Тормош. [12+]
8.15 Легенды Урала. [12+]
8.30 Күстәнәс. [12+]
9.00 Профессионалы. [12+]
9.15 Мама. [12+]
9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж.
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.45 Тирмәкәй. [6+]
11.00 Городок АЮЯ. [6+]
11.15 Беседка. [6+]
11.30 Сулпылар. [6+]
12.00 Асыш. [6+]
12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]
13.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]
13.30 Д/с "Заповедники России". [12+]
14.00 Дорога к храму. [6+]
15.00 Честно говоря. [12+]
15.45 Спектакль "Навстречу мечте". [12+]
19.15 Әлләсе… [12+]
20.00 Патриот РФ. [12+]
20.30, 2.30 Автограф. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Концерт. [12+]
0.30 Спектакль "Семейный портрет с посторонним". [12+]
3.00 Колесо времени. [12+]
4.00 Письма солдатам. [12+]
4.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]
4.45 Башкирские каникулы. [12+]

## НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Июль (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (19) дүшәмбе | 2:51 | 4:58 | 13:30 | 19:00 | 21:46 | 23:16 |
| 15 (20) шишәмбе | 2:51 | 4:59 | 13:30 | 18:59 | 21:45 | 23:15 |
| 16 (21) шаршамбы | 2:52 | 5:01 | 13:30 | 18:59 | 21:43 | 23:13 |
| 17 (22) кесе йома | 2:53 | 5:02 | 13:30 | 18:58 | 21:42 | 23:12 |
| 18 (23) йома | 2:54 | 5:04 | 13:30 | 18:57 | 21:41 | 23:11 |
| 19 (24) шәмбе | 2:55 | 5:05 | 13:30 | 18:57 | 21:39 | 23:09 |
| 20 (25) йәкшәмбе | 2:55 | 5:07 | 13:30 | 18:56 | 21:38 | 23:08 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ТАУҒА ҠАРАП ТАШ АТМА

1


2


Сит телде боҙоп һөйләшеү

... ятҡан Урал тауы Атай-олатай-ҙарҙың да төйәге

... тау ҙа ҡыҙыҡҡан

... юлын йырһыҙ үткәнем юҡ

Еңеүсе проект өсөн аҡса

Табаҡ та ... табаҡ ай аҡ ҡағыҙ

Белорет ҡалаһы янында ҡурай еләкле тау

Сит илдәрҙә уҙған ... Бер көндәре әллә йыл микән?

3

Тауға ла менеп, ... баҫып һин ҡарарһың,йөнем, мин булмам

"Киске Өфө" хәбәрсеһе ... Нафикова

... таш (кремень)

Иркә, йомшаҡ

Еҙем м-н Инйәр бассейнында тау һырты

Шаран, Баҡалы, Илеш аша Ағиҙелгә ҡоя

Аты ... - батыр, аты юҡ - ятыр

Ҡыҙҙың ҡылығы - ...

Атына күрә ...

Ҡурайсылар ҡурай уйнамаҫ, Башҡорт ... булмаһа

Оло Әүжән м-н Ағиҙел араһында тау һырты

4

К.Уралдың иң бейек түбәһе Яман...

Дүрт шихандың береһе

.. - салат

Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан, Урал тауы буйлап, көн ...

1 Күгәрепкәй ятҡан ... тауы Атай-олатайҙарҙың да төйәге

2

Мәленә күрә ... тап

Ир бала ..., иркенләп ят

Башҡорт халыҡ йыры

*

3


Салауат районы ауылы

***

4


Янартауҙан бәреп сыҡҡан масса

Ҡатау йылға-һынан Кесе Ямантауғаса Урал һырты

...ләрҙә йөрөп сәс еткерҙем

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**26-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Нумератив. Сингармонизм. Мөршит. Аборт. Инеш. Синоним. Ҡылым. Теркәүес. Иманы. Синтаксис. Нурия. Фонетика. Ять. Пакт. Яго. Өмөтбаев. Неологизм. Имидж. Шарҙыуан. Һалым. Өтөр. Байрам. Өноҡшаш. Ранецы. Маҡсат. Укупник. Ҡорт. Ырғандаҡ. Ҡалым. Икешәр. Ҡурмас. Саҡрым. Марс.

**Вертикаль буйынса:** Ясин. Сантьяго. Лайыҡ. Омоним. Откуп. Өмөт. Абай. Сумо. Мисәт. Мажор. Ҡаҡшатҡыс. Нөгөш. Шытым. Ташҡын. Еймә. Исем. Айыл. Прозаик. Есем. Трибохимия. Норд. Тартюф. Өндәш. Ҡырлас. Ором. Айырыу. Өлгөр. Кредит. Ҙурлау. Байҡы. Илла. Уҙаман. Атавин. Наждак.

*БАШ ҠАТЫРМАҠ*

# АҒАСТЫҢ ЙЫУАНЛЫҒЫН...

## ниндәй берәмек менән үлсәйһең?

**Ошо ябай ғына һорауҙарға яуап биреп, үҙеңдең башыңдағы белемде һанап ҡара. Йә был викторина һорауҙарын балаңа төбәп, уның белем кимәлен тикшер.**



1. Ағастың йыуанлығын "башҡортса" үлсәү берәмеге нисек атала?
2. Бер туған башҡорт опера йырсылары кемдәр?
3. "Кешегә күпме ер кәрәк" әҫәренең авторы кем?
4. "Ҡурайсы" төркөмөнөң етәксеһен ата.
5. Донъяға билдәле башҡорт офтольмологы кем?
6. Яков Протазановтың башҡорт халҡына бәйле кинофильмы нисек атала?
7. "Боҙ" һәм "мотоцикл"төшөнсәләрен бергә бәйләүсе спорт төрөнән алты тапҡыр донъя чемпионы булған спортсыны беләһеңме?
8. Башҡорт ихтилалдарының бер сәбәбе булған тәмләткес ни?
9. "Башҡорт көсө" әҫәренең авторы кем?
10. Шишмә районының ҡайһы ауылынан Башҡортостандың халыҡ артисы һәм ике халыҡ шағиры сыҡҡан?

*ИҪКӘРТӘБЕҘ!*

# ПИЛОТҺЫҘ ОСОУ АППАРАТЫ...

## һөжүм итә ҡалһа



**Рәсәйҙә ваҡытлыса интернетты һүндереү осраҡтары йыш була башланы. Мәҫәлән, ошо көндәрҙә Рәсәйҙең 89 төбәгенең 74-ндә интернет бер ни ҡәҙәр эшләмәй торҙо. Быҙдай хәлдең Башҡортостан ла булыуы ихтимал.**

Мобиль интернетты һүндереп тороу дрондарҙың координацияһына һәм навигацияһына ҡамасаулай, шулай уҡ уларҙың һөжүменең әһәмиәтен кәметә. Был - халыҡтың хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә йүнәлтелгән ваҡытлыса сара ул. Интернетты сикләһәләр йәки пилотһыҙ осоу аппаратын күрһәгеҙ, ни эшләргә? Ошо ҡағиҙәләрҙе белеү һеҙҙең һәм яҡындарығыҙҙың ғүмерен аяп алып ҡалыр:

- паникаға бирелмәгеҙ;
- пилотһыҙ осоу аппараты һөжүмен видеоға төшөрөгөҙ һәм күргәндәрегеҙҙе 112 номеры буйынса хәбәр итегеҙ;
- төшөргән фотоны һәм видеоны интернетҡа һалыуҙан тыйылығыҙ;
- хәүефле урындан тиҙерәк китегеҙ;
- эргә-тирәләге кешеләрҙе хәүеф тураһында иҫкәртегеҙ;
- әгәр пилотһыҙ осоу аппараты йортҡа һөжүм итһә, янғын сыҡҡандағы кеүек эш итегеҙ;
- әгәр урамда булһағыҙ, яҡындағы бинаға инеп йәшенегеҙ. Транспортта китеп барған осраҡта тиҙ генә унан төшөгөҙ һәм ышыҡ урын табығыҙ. Хәүеф фатирҙа булған саҡта янаһа, тәҙрә янынан китегеҙ һәм терәк стеналы бүлмәнең иҙәненә ултырығыҙ. Башҡа бинала икәнһегеҙ, лифтҡа ултырмағыҙ, баҫҡыстар буйлап тиҙ генә подвалға төшөгөҙ;
- әгәр пилотһыҙ осоу аппараты табылһа, уға бер нисек тә яҡын килмәгеҙ һәм был хаҡта шунда уҡ 112 номеры буйынса хәбәр итегеҙ.

*БАҠСА*

# ҠУРАЙ ЕЛӘГЕ



**Әлеге ваҡытта баҡсала ҡурай еләгенең иң өлгөргән мәле. Уны йыйып, ҡышҡылыҡҡа етерлек әҙерләп ҡуйығыҙ.**

Ҡурай еләге - бик файҙалы емеш, уның составында витаминдар (С, В, Е), тимер, калий, магний, органик кислоталар күп. Ул иммунитетты нығыта, һалҡын тейгәндә температураны төшөрә, организмдан шлактарҙы сығара, йөрәк-ҡан тамырҙары эшен яҡшырта. Ҡурай еләге ашҡаҙан-эсәк эшмәкәрлеген дә көйләй, нервылар системаһын тынысландыра.

**Ҡышҡылыҡҡа ҡурай еләген әҙерләү ысулдары:**

- Ҡайнатма йәки джем яһау өсөн еләкте шәкәр менән ҡайнаталар.
- Компот өсөн - еләкте стериль банкаларға һалып, ҡайнар һыу ҡойоп ябалар.
- Ҡоро итеп туңдырыу - еләкте йыуып, киптереп, туңдырғысҡа һалып ҡуялар.
- Емеште киптереү - еләкте күләгәлә йәки махсус киптергестә киптерәләр.

**Япраҡтарын да файҙаланып була:**

- Йәй йыйып, күләгәлә киптерәләр.
- Кипкән япраҡтарҙан сәй әҙерләйҙәр - иммунитетты нығыта, һалҡын тейгәндә файҙалы.
- Япраҡтарҙы ҡайнатмаға ла өҫтәргә мөмкин.

Ҡурай еләгенең емеше лә, япрағы ла организм өсөн бик файҙалы, ҡышҡылыҡҡа әҙерләп ҡуйһаң, һалҡын көндәрҙә лә уның шифаһын татып була!

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ТӘҮГЕ РӘССАМ-АНИМАТОРҘАР



**Өфө сәнғәт училищеһында Башҡортостан тарихында тәүге "Анимация" һөнәре буйынса сығарылыш имтиханы үтте, тип хәбәр итә республика Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәте.**

2021 йылда Башҡортостан Башлығы инициативаһы буйынса асылған "Анимация" һөнәре заман саҡырыуҙарына яуап булды. 4 йыл дауамында студенттар был һөнәрҙе бөтә яҡлап үҙләштерҙе. Улар классик һүрәтләү, компьютер 2D-анимацияһы, автор киноһы режиссураһы, реклама роликтары оҫталығына өйрәнде. Йәш белгестәр һүрәттәрҙе хәрәкәтләндерергә генә түгел, ә "персонаждарға йән өрөргә", тотош донъялар булдырыу серҙәренә төшөндө. Диплом яҡлаусыларҙың һәр береһе - Дарья Мальцева, Арина Сучкова, Зарина Юнысова, Алена Лукьянова, Камилла Байбурина, Диана Хәснәтдинова һәм Дарья Серкова комиссия иғтибарына өс минутлыҡ анимацион фильмдарын тәҡдим итте.

Имтихан комиссияһы ағзалары фильмдың идеяһын, башҡарыу техникаһын, төҫтәр гаммаһын һәм нисек янғыратылыуын баһаланы. Сығарылыш уҡыусылары-аниматорҙар үҙ эштәрендә дуҫлыҡ, яуаплылыҡ, изгелек һәм хатта хәҙерге донъялағы хәүеф менән нисек көрәшергә кәрәклеге тураһында көнүҙәк темалар күтәрҙе. Буласаҡ рәссам-аниматорҙар, бер фильм төшөрөүгә ярты йыл ваҡыт китте, тип белдерҙе.

"Анимация" йүнәлешендәге студенттар һаны арта ғына барасаҡ. Хәҙерге ваҡытта ижади индустриялар үҫешә, һәм сығарылыш уҡыусыларына тағы бер һөнәр үҙләштереү мөмкинлеге тыуҙырыла. Тиҙҙән контент күләме мотлаҡ сифатҡа әйләнәсәк - беҙ балалар тыуҙырасаҡ популяр сериалдар, йәнһүрәттәр күрәсәкбеҙ. Шуға күрә анимация кластерын үҫтереү өсөн ҡуйылған бөтә тырышлыҡтар ҙа дөрөҫ, дөрөҫ һәм киләсәктә яҡшы һөҙөмтәгә килтерер", - тип билдәләне "Муха" студияһының рецензент-продюсеры, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Артур Абдрахманов.

# ЯҘЫУСЫЛАР ҠОРОНДА

**Башҡортостандың Яҙыусылар союзы - республикабыҙҙың абруйлы йәмәғәт ойошмаһы - бөгөн 200-ҙән ашыу тәжрибәле һәм йәш әҙипте берләштерә. Радий Хәбиров "Башҡортостандың Яҙыусылар союзы" төбәк йәмәғәт ойошмаһының дөйөм йыйылышында ошо турала белдерҙе.**

"Союз Рәсәйҙең донъяға күренекле авторҙар һәм сағыу әҫәрҙәр биргән ижади ойошмаларҙың береһе булды һәм булып ҡала. 90 йыл дауамында ул рухи-мәҙәни тормош үҙәгенә, оҫталыҡ мәктәбенә әүерелде, - тип билдәләне республика етәксеһе һәм шулай тип дауам итте: - Яңыраҡ "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһе көндәрендә Яҙыусылар союзының яңыртылған бинаһы асылды, унда һуңғы 30 йылда ремонт эштәре башҡарылмағайны. Йәйге майҙансыҡ, "Өфө йүкәләре" скверы төҙөкләндерелде. Былтыр Башҡортостан Рәсәйҙең иң күп уҡыған төбәге һәм Әҙәби флагманы тип танылды. Йыл һайын төбәк бюджеты иҫәбенә рус, башҡорт һәм республика халыҡтарының башҡа телдәрендә 100-гә яҡын художестволы китап нәшер ителә. Башҡортостанда яҙыусылар өсөн Салауат Юлаев, Шәйехзада Бабич, Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге премиялар, 30-ҙан ашыу муниципаль награда бар. Республика премияларының приз фонды арттырылды. Балалар һәм үҫмерҙәр әҫәрҙәре өсөн бирелгән Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге премия фонды - 100 меңдән 500 мең һумға, Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр премияһы 150 меңдән 500 мең һумға, Салауат Юлаев премияһы миллион һумға тиклем артты".

Хәҙер балалар һәм үҫмерҙәр араһында яңы яҙыша башлаған шағирҙар һәм яҙыусылар конкурсын ойоштороу мөмкинлеге ҡарала, тип өҫтәне Радий Фәрит улы. "Яҙыусының һүҙе һәр ваҡыт мөһим әһәмиәткә эйә, айырыуса хәҙер, беҙҙең өсөн Махсус хәрби операция темаһы төп урынды биләгән саҡта. Районд арҙа һәм ҡалаларҙа "Үҙебеҙҙекеләрҙе ташламайбыҙ" әҙәби-патриотик акциялар циклы өсөн һеҙгә ныҡ рәхмәтлемен. Мөнир Ҡунафиндың "МХО. Мин һуғыштан тере килеш сыҡтым" кеүек әҫәрҙәр хәҙерге мәҙәниәтебеҙҙең мөһим өлөшөнә әүерелде. Быйыл хәрби-патриотик темаға арналған әҙәби, музыкаль, һынлы сәнғәт әҫәрҙәре республика конкурсин лайыҡлы приз фонды менән үткәрҙек", - тип билдәләне республика етәксеһе.

# ТАҒЫ БЕР ФЕСТИВАЛЬ

**1 августан 3 августа тиклем Ҡырымда етенсе тапҡыр "Таврида.АРТ" йәш сәнғәт фестивале ойоштороло. AY YOLA һәм UZORITSA унда Башҡортостан исеменән сығыш яһай**

Фестивалдең махсус ҡунағы - ижадында традицияларҙы һәм заманса музыкаль стилдәрҙе берләштергән, Һомау йыры менән донъя чарттарын яулаған AY YOLA музыкаль проекты. Фестивалдә республикабыҙ исеменән шулай уҡ UZORITSA фолк-төркөмө сығыш яһай. Төркөм фольклор нигеҙендә ижад ителгән, заманса аудиторияға ла яҡын булған үҙенсәлекле музыкаһы менән һөйөндәрә.

Биш сәхнәлә төрлө стилдә һәм жанрҙа башҡарыусыларҙың сығыштары көтөлә, тип хәбәр иттеләр Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. 250 гектар хозур ер, 300-ҙән ашыу сара: шоу, музыка, кино, театр, бейеүҙәр, әҙәбиәт, һынлы сәнғәт - фестиваль бер урында илебеҙ мәҙәниәтенең төрлөлөгө менән таныштыра.

Иң яҡшы театр коллективтары һәм студиялары үҙҙәренең спектаклдәрен һәм постановкаларын күрһәтә. Төбәктәр фестивалгә мәҙәни һәм гастрономик ҡаҙаныштарын алып килә. Рәссамдар һәм дизайнерҙар визуаль сәнғәт менән таныштыра. Һуңынан мәнәрләгән ҡатнашыусы, сағыу колоннаға теҙелеп, фестиваль биләмәһенән үтергә тейеш. Шулай итеп, "Таврида.АРТ" йәнә барлыҡ төбәктәрҙән ижади ҡарашлы йәштәрҙе бергә туплай.

ТЕЛҺӨЙӘР

# КӨЛСӘҺЕ ЛӘ ҺҮРӘПӘН

**Тел хикмәте күп һөйләүҙә түгел, самалы һүҙ ярҙамында ла мәғәнә еткереүҙә. Аҙ һүҙ ҙә бай, тәрән йөкмәткегә эйә була ала. Бына шундай һүҙҙәрҙең бер нисәһе.**

**Һөм.** Һөм "йөҙ-ҡиәфәт" тигәнгә тура килә. Әйтемдән миҫал: *Эт тиһәң, йөнө юҡ, әҙәм тиһәң, һөмө юҡ. Әрпешлек, тупаҫлыҡ - һөмһөҙлөк билдәһе.*

**Һүрәпән.** Үлән баҫҡан юл, һуҡмаҡ хаҡында электән "һүрәпән" һүҙен ҡулланып һөйләгәндәр. *Һүрәпән юлдан барыу. Урман эсенә һүрәпән һуҡмаҡ илтә.*

**Һығымса.** Русса "вытяжка, экстракт" тип йөрөтөлһә, башҡортса иһә - "һығымса". *Сәй һығымсаһы. Шифалы үләндәрҙән һығымса.*

**Һелкәү.** Икмәк тураһында ҡулланылған һүҙ. Мәғәнәһе - бысыйыраҡ, бешеп етмәгән. *Һүрән мейескә ҡуйылған икмәк һелкәү булған. Көлсәһе лә һелкәү.*

**Һыҙыра.** Һыҙырым. Һөйләштәргә хас һүҙ. "Тына" тигәнгә тура килә. *Бер һыҙырым баҡса утаныҡ. Ял иткәс, тағы бер һыҙыра эшләрбеҙ.*

**Шулай итеп, тел хәтере һүрәпәнгә әйләнмәһен тиһәк, туған телдә һөйләшәйек, һүҙ байлығын туплайыҡ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИСӘР ЙҮКӘ ҺУЙЫР...

## аҡыллы тәкә һуйыр

Дуҫ итеп серең һөйләмә, танда дошман булмаһын, дошман тип хәтерен ҡалдырма, танда дуҫың булмаһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бер аҙым эшләү өсөн егерме йыл икеләнергә мөмкин, әммә ул аҙымды эшләгәнһең икән, сигенергә ярамай.

**(Альфред де Мюссе).**

Үҙ уйҙарығыҙға ҡарата иғтибарлы булығыҙ, улар һәр ҡылыҡтың башы.

**(Лао-цзы).**

Доғалар яуапһыҙ булырға тейеш, шунһыҙ, ул доға булыуҙан туҡтар һәм ҡара-ҡаршы әйтешкә әүерелер ине.

**(Оскар Уайльд).**

Йәшәүҙ мәғәнәһе - ул барлыҡ теләктәреңде ҡандырыу түгел, ә теләктәреңдең булыуы.

**(Михаил Зощенко).**

Кеше үҙенең ҡайғыларын һынарға ярата, ә бына шатлыҡтарын һынамай.

**(Федор Достоевский).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер саҡ Һиндостан батшаһына бик үҙенсәлекле бүләк бирәләр: өс алтын һын һәм барыһы ла бер төрлө. Был бүләккә, һындарҙың һәр береһенең үҙ тәғәйенләнеше бар һәм уларҙың береһе генә үтә ҡиммәтле баһаға эйә, тип яҙылған хат та беркетелгән була. Батша үҙенең барлыҡ кәңәшселәрен һәм аҡыл эйәләрен саҡырып ала һәм был бүләк-һындарҙағы айырманы табырға бойора. Аҡыл эйәләре бик оҙаҡ баш вата, һындарҙы төрлөсә тикшерә: уларҙың ауырлығын да, алтынының сифатын да, эшләнешен дә тикшереп ҡарай, әммә береһе лә улар араһындағы айырманы таба алмай. Шул саҡ батша һарайына көскә-көскә атлап бер ҡарт килеп инә. Тикшереп сыҡҡас, һындарҙың ҡолағында бәләкәй генә тишек булыуын шәйләй. Тишектәргә нәҙек тимерсыбыҡ тығып ҡарай. Тәүге һындың ҡолағына тығылған тимерсыбыҡ осо - икенсе ҡолағынан, икенсе һындыҡы- ауыҙынан, өсөнсө һындыҡы кендегенән килеп сыға. Ҡарт был йомаҡ өҫтөндә бер аҙ уйланғандан һуң, шундай аңлатма бирә:**

**- Был һындарҙың хикмәте шунда: беренсеһе бөтә хәбәрҙәрҙең бер ҡолағынан инеп, икенсеһенән сыҡҡан кешене кәүҙәләндерә. Икенсе һын - ул һәр ишеткән хәбәрен ныҡлап уйлап, тикшереп-үлсәп тормай, башҡаларға һөйләргә ашыҡҡан кеше. Ә өсөнсө һын һәр ишеткәнен йөрәге аша үткәреп, хәтеренә һеңдереп, һығымталар яһаған кешене хәтерләтә. Тимәк, ошо өсөнсө һын иң ҡиммәт баһаға эйә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
10 июль 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -**
10 июль 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 1296

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.